ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25-1 ноябрь - декабрь (ҡырпағай - аҡъюлай)
2023
№46 (1088)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡурсаҡ уйнарғамы, бала табырғамы?**


2-3

**Ояһында - күргәне, осҡанында - булғаны**


8-9

**"Байыҡ" телевизион бәйгеһе... бөтөн республиканы башҡортса бейетә**


11

**Беренсе ҡоймаҡ тәмле булды!**


12

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

***АРЗАНҒА ЯҘЫЛЫП ҠАЛ!***

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 1-10 декабрҙәге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында 2024 йылдың тәүге яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ташламалы хаҡ менән 750 һум 84 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә дәррәү генә яҙылып, уҡыуҙан туҡтамаған, фекерле, аңлы, ғәмле, вайымлы милләттәштәр иҫәбен ишәйтәйек!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Бөгөн мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың бер-береһен йәберләүе, хатта туҡмауы тураһында хәбәрҙәр йыш ишетелеп тора. Мәғариф системаһында "буллинг" тигән төшөнсәнең әүҙем ҡулланыла башлауының сәбәбен нимәлә күрәһегеҙ?

***Гөлсирә ӘХТӘМОВА, әсәй:*** Бала үҙ милли мөхитендә белем алырға тейеш. Улымды, үҙе ҡайтып йөрөр, тип, башта йорт эргәһендәге мәктәпкә биргәйнек. Үҙе лә йомшаҡ күңелле, уҡытыусы тарафынан да хуплау булмағас, ҡыйын булды. Өйрәнеүе ҡыйын булыр тип борсолһаҡ та, милли мәктәпкә күсерҙек. Үҙен ышаныслы тота башланы, бейеүгә, ҡурайға йөрөй, баламды алыштырып ҡуйҙылармы ни! Шуға ла төп кәңәш - үҙ мөхитенән айырмағыҙ башҡорт балаһын.

"Буллинг" тигән төшөнсә үҙ эсенә физик йәберләүҙе генә алмай шул, агрессор йышыраҡ тел менән йәберһетә, кәмһетә. Туҡмауҙар - уның иң аҙаҡҡы стадияһылыр. Мәғариф министрлығы: "Бар беҙҙең мәктәптәрҙә бындай күренеш, былтыр 15 сигнал булды, быйыл - 8" - тигән мәғлүмәт бирә. Әле былары беленгәне, һуңғы сиккә еткәне генә. Ә күпме тағы йәберһетелгән, ҡанаттары һындырылған балалар? Шуға ла ата-әсәләр ныҡ иғтибарлы булһындар ине, бала зарлана икән, күҙ йоммағыҙ, асыҡларға тырышығыҙ. "Үҙең ғәйепле-лер", "Ни эшләп һин үҙеңде яҡлай алмайһың?", "Мәктәптә булғанды ҡайтып һөйләп ултырма", "Бигерәк йыуашһың", тип әйтмәгеҙ, бала үҙенә бикләнер.

Әле бына тағы бер яңылыҡ баҫылды - Башҡортостан IT-белгестәре "Антибуллинг" тип аталған махсус система өҫтөндә эшләй икән. Ул социаль селтәрҙәрҙә буллинг билдәләрен эләктереп алырға тейешле. Эшмәкәрлеккә психологтар ҙа йәлеп ителгән, тимәк, хәҙер йәмғиәт быны проблема булараҡ таныны. Ыңғай һөҙөмтәләр ҙә булыр, моғайын.

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# КӘРӘКЛЕ ҺҮҘҘЕ ЕТКЕРӘ



**Әлеге мәлдә республиканың ваҡытлы матбуғатына яҙылыу кампанияһы бара. Район һәм республика баҫмалары гәзит һәм журнал уҡыусыларына ташламалы хаҡҡа яҙылыу мөмкинлеге бирә, төрлө акциялар ойоштора, бүләктәр вәғәҙә итә һәм башҡалар. Бөтә нәмәгә хаҡтар арҡан мәлдә гәзит-журналдарға яҙылыу ҙа осһоҙҙан түгел, әлбиттә, ләкин рухи аҙыҡ сығанағы булған баҫмалар үҙенең тоғро уҡыусыларын юғалтмаясағына өмөт бағлай.**

**(Дауамы 2-се биттә).**

## КӨН ТЕМАҺЫ

# ҺИНЕ ӨЙҘӘ КӨТӘЛӘР,

## йәки Буласаҡ һалдаттарға әйтер һүҙем



**Хәрби комиссариаттарыбыҙҙа көҙгө саҡырылыштың ҡыҙған мәле. Йөҙҙәренән балалыҡ төҫө лә китеп бөтмәгән йәш егеттәребеҙҙе ата-әсәһе, туғандары, һөйгән ҡыҙҙары әрме сафына оҙата. Уларҙың илаша-илаша хушлашҡандарын күргән һәр кемдең күңеле тулалыр. Саҡырылыш буйынса хеҙмәт иткән егеттәребеҙҙе махсус операцияға ҡатнаштырмауҙары хаҡында барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Әммә, хәрби хәрәкәттә ҡатнашмауына ҡарамаҫтан, ғүмерҙәре әле генә башланған был малайҙарҙың һаҡһыҙлығы, йә иһә тыңлауһыҙлығы арҡаһында ла бәлә-ҡазаға юлығыу осраҡтары элек-электән була килеүе хаҡында беләм. Үҙем шундай ваҡиғаларҙың эсендә сирек быуатҡа яҡын хәрби табип вазифаһын атҡарып йөрөгән кеше булараҡ, әрмегә барыусы егеттәребеҙҙе иҫкәртеү ниәте менән сираттағы мәртәбә ошо мәҡәләмә тотондом. Үҙем шаһит булған бер нисә миҫал гәзит уҡыусыларҙы битараф ҡалдырмаҫ тип уйлайым.**

### "Холостой патрон" ғына, тимә...

Рядовой Плеханов учение ваҡытында кеҫәһенә йәшереп алып ҡалған бер "холостой патрон"ды казармаға алып килә. Кис, "оружейка"ла автомат таҙартҡан мәлдә ана шул патронды "һынап" ҡарарға уйлай. Автоматының магазинына ҡуя ла, икенсе бер һалдатты шаяртып алмаҡсы була...

- "Холостой" булғас, бер ни ҙә булмаҫ, тип уйланым, - ти ул һуңынан илай-илай хәрби трибунал судында. Асылда, көбәген терәп атһаң, холостой патрондың удар тулҡыны менән дә кеше үлтереп була икән!.. Әммә, оло бәхеткә, эсәге ике урындан өҙөлгән, талағы ярылған һәм байтаҡ ҡан юғалтҡан әлеге һалдатты ҡатмарлы операция ярҙамында ҡотҡарып алып ҡалырға Аллаһы Тәғәлә насип итте. Шунын өсөн госпиталь командованиеһе миңә һәм тағы бер хирургка сираттағы офицер званиеһын ваҡытынан бер аҙ алдараҡ бирергә Мәскәүгә юллау ебәрҙе...

**(Дауамы 6-сы биттә).**

12+

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# КӘРӘКЛЕ ҺҮҘҘЕ ЕТКЕРӘ

(Башы 1-се биттә).



Мин үҙем гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы башланыу менән яратҡан баҫмаларыма яҙыла һалам. Квитанцияларҙы күренеп торған ергә элеп ҡуйамһам, көнөлдә ниндәйҙер тамамланмаған эш бар һымаҡ тойғо тик тора. Тағы ла шуныһы - нисә тиҫтә йыл буш тормаған почта йәшнигенең гәзитһеҙ етемһерәүен күҙ алдына килтерә алмайым. Тиҫтәләгән баҫма алдырһам да уларҙың араһында ла иң-иң көнөлемә яткандары бармаҡ менән һанарлыҡ. Һәм был исемлектең тәүге баҫҡысын, әлбиттә, "Киске Өфө" гәзите биләй. Почта хеҙмәткәрҙәре лә өйрәнеп-белеп бөткән: мин барыуға, гәзиткә квитанция яҙып әҙерләп тә ҡуялар.

Гәзиттең, бер яҡтан, мәғәнәле булыуын үҙ итәм. Шулай уҡ уның халыҡсанлығын яратам. Бөтә быуын вәкилдәренә лә бер кимәлдә ҡыҙыҡлы булыуы ла уны мәртәбәле итә. Баш ҡаланың һәм республиканың ижтимағи тормошон йөплә генә итеп еткереүе, Рәсәй һәм тотош донъя кимәлендәге хәлдәрҙе ыҡсым һәм аңлайышлы яҙыуы, йәмғиәттең бөтә өлкәһенә лә иғтибар биреүе минә һәләк оҡшай. Уҡыйым тиһәң - ҡыҙыҡлы хикәйәләре, баш эшләтеп алайым тиһәң - сканворды, уңышлы кешеләр тураһында мәғлүмәт кәрәкһә - "Уңыш ҡаҙан", аҡыл кәрәкһә - "Аҡыл - ҡаҙна" һәм башҡа рубрикалары бар гәзиттең.

Республика баҫмалары араһында милләтебеҙгә, туған телебеҙгә, туған мәҙәниәтебеҙгә ҡағылышлы иң күп баҫылған мәҡәләләр, уйланыуҙар һәм борсолоуҙар "Киске Өфө"лә икәнлеге һәр кемгә мәғлүм. Ысынлап та, баҫма сыға башлағандан алып ошо мөһим темаларҙы яҡтыртыуы менән беҙҙең күңелдәрҙә яуланы.

Милләттебеҙҙең күренекле шәхестәре менән рәсмилектән алыҫ булған, донъяуи әңгәмәләр баҫтырыуы, йәштәрҙең һәм хатта балаларҙың уй-фекеренә ҡолаҡ һалыуы, төрлө өлкәлә уңышҡа өлгәшкәндәр тураһында ла мәғлүмәт бирә барыуы маҡтауға лайыҡ.

Шулай уҡ "Интернеттан" рубрикаһын да ҡыҙыҡһынып уҡып сығам һәр ваҡыт. Уйлап ҡараһаң, интернет селтәрендә әҙ ултырмайбыҙ кеүек, ә "Киске Өфө"ләр шул мең төрлө мәғлүмәт араһынан иң ҡыҙыҡлыһын һәм файҙалыһын ғына эҙләп табып, гәзит уҡыусыһына еткерә.

Яратып уҡыған гәзитем артабан да уңышлы баҫма булһын, уҡыусыларының яҡын кәңәшсеһе булыуҙан туҡтамаһын.

Рәйсә ИРНАЗАРОВА.
Бөрйән районы
Иҫке Собханғол ауылы.

БЫНАҒАЙЫШ!

# ҠУРСАҠ УЙНАРҒАМЫ, БАЛА ТАБЫРҒАМЫ?

**Аптыраған өйрәк арты менән һыуға сума, тигәндәй, ошо көндәрҙә сенатор һынлы сенатор тап шундайыраҡ трюк эшләп, бөтөн гәмде аптырашҡа ҡалдырҙы. Кем ул, тиһегеҙме? Шул халыҡҡа аҡыл өйрәтеүсе юғары рангылағы чиновник инде - Силәбе өлкәһенән Федерация Советы сенаторы Маргарита Павлова. Был мәғлүмәтте ҡайһы берәүҙәр, бәлки, ишетмәгәндер ҙә. Аныҡлабыраҡ таныштырайыҡ: "Рәсәй ҡыҙҙарына юғары белем алырға кәрәкмәй, бала тапһындар!" - тигән "ҡанатлы" фраза авторы лабаһа ул, танынығыҙмы инде? Был "ҡанатлы" йөмләнең дауамы ла бар әле: "Юғары белемле йәштәрҙең артыуын туҡтатырға кәрәк, был барыбер уларҙы бер нәмәгә лә килтермәйәсәк".**

Дөрөҫ, Рәсәй йәмғиәтендә юғары белемдең баһаһы төштө, тиҙәр. Ә бит бөгөн, киреһенсә, илебеҙҙең иҡтисади-социаль үсешен тәьмин итеү өсөн белемле, уңышлы йәштәр кәрәк; мәктәп уҡыусыларын, йәш быуынды илһөйәрҙәр итеп тәрбиәләү бурысы ла төп мәсьәлә итеп ҡуйыла түгелме һуң? Аңлашыла, сенатор демография проблемаһын күҙҙә тота, ҡыҙҙар уҡып, белем алғансы, карьера эшләгәнсе, бала табыу өсөн уңайлы йәше үтеп тә китә, тип борсола. Ләкин Рәсәй өсөн генә түгел, ә тотош донъялағы был проблеманы хәл итеү юлдарының береһен йәш ҡыҙҙарҙы ирекһеҙләү һәм хоҡуҡтарын боҙоуҙа күреү бөгөн, XXI быуатта, ниндәйерәк шаңдау алырға тейеш һуң? Әлбиттә, депутат бөгөнгө көндә ғаилә ҡиммәттәре, әсә һәм бала мәсьәләһе өсөн ысын күңеленән борсола, шуға ла илдә тыуымды арттырыу сараларының хатта башҡа ла килмәгән юлдарын тәҡдим итә. Ләкин демография мәсьәләһен ҡоро демагогия йә булмаһа ауыҙлыҡһыҙ эмоция менән генә хәл итеп булма-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Бөгөн мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың бер-береһен йәберләүе, хатта туҡмауы тураһында хәбәрҙәр йыш ишетелеп тора. Мәғариф системаһында "буллинг" тигән төшөнсәнең әүҙем ҡулланыла башлауының сәбәбен нимәлә күрәһегеҙ?***

***Солтан ХӘСӘНОВ, практик психолог:*** Бер-береһе менән аралашҡанда балалар араһында төрлө хәлдәр була. Хатта балалар баҡсаһында ла һуғышыуҙар, талашыуҙар осрай. Әлбиттә, ҡайһы балаға тәрбиә лә етешмәй, әммә бар нәмә тәрбиәнән генә тормай. Бында төп сәбәп - балаларҙың төрлө холоҡло булыуында, кемдер йомшаҡ, шым, кемдер уйынсығын тартып ала алмаған өсөн дә ҡул күтәрә башлай. Шуға ла бындай хәлдәр элек тә булған һәм буласаҡ та.

Башланғыс мәктәп осоронда буллинг артыҡ күҙәтелмәй, сөнки бала был мәлдә үҙе өсөн быуаса таныш булмаған мәктәп тормошона яраҡлаша һәм агрессив холоҡ ла баҫылып тора. Әммә үсмерлек осоронда еткәс, уның организмында гормональ "шторм" башлана, шуның арҡаһында агрессив балалар тағы ла килеп сыға. Шуға лидерлыҡҡа ынтылыу өҫтәлә. Бөтөн бала ла лидер булырға ынтылмай, башлыса агрессив холоҡлоһо теләй быны. Бер төркөмгә тупланалар, унда лидер үҙенә буйһоноусылар менән үҙенсә "идара" итә. Буллинг ул балаларҙың бер-береһенә агрессив мөнәсәбәте генә түгел, үкенескә, уларҙа икенсе баланы рәнйетеү, башҡалар алдында кәмһетеү ниәте барлыҡҡа килә, ошонан ҡәнәғәтлек ала. Физик үҙенсәлектәре булғандарҙы үсеклерә генә торалар, сөнки үсмер ҙур булһа ла, башҡа кешенең хәленә инеп, ул тойғанды тоя алмай әлегә. Интернет селтәрендәге төрлө агрессивлыҡ та буллингҡа килтерә ала. Лидерлыҡҡа ынтылыусы физик көс менән алдырып була икәнен аңлап ҡала. Йәш кенә үсмерҙә лә башҡаларҙы үҙенә ҡаратып тотоу, өҫтөнлөккә өлгәшеү теләге була, үкенескә күрә. Шул бәләкәй генә төркөм эсендә ул үҙен шулай тота ла.

Тәрбиәсегә, уҡытыусыға, ата-әсәгә бындай балаларҙың агрессивлығын кәметә торған ысулдар ҡулланырға кәрәк. Әйтәйек, 3-4 йәшлек бала нимәлер көйөп, әсәйгә һуғып ебәрә, ти. Был ситуацияла күптәр, ярамай, тип, үҙе балаға һуғып ебәрә. Киреһен эшләргә кәрәк. Баланың ҡулынан тот та, башынан һыйпа. "Һин мине яратмайһыңмы ни, мин һине бик ныҡ яратам", тип әйт. Баланың күңеленә шунда уҡ икенсе орлоҡ һалына. Әрләп кенә ыңғай яҡҡа йүнәлтеп булмай, хисксерештәрен икенсе юҫыҡҡа бороп ебәрергә кәрәк. Ошондай контроль кәрәк уларға ҡарата.

Шуныһы ла бар: башҡаларҙы рәнйетеп, уларҙан көләп ҡәнәғәтлек алыуҙар уҡытыусы алдында эшләнмәй, улар мәктәптән ситтә эшләнә. Ләкин класс етәксеһе тәрбиәүи эш алып барырға тейеш. Мәҫәлән, дин менән бәйләргә була: башҡа кешене рәнйетеү, физик кәмселегенән көләү - гонаһ. Тыштан ҡурҡалар ҙа, бындай кешеләрҙә эстән яратмайҙар. Был ҡылыҡтар хоҡуҡ боҙоуға, енәйәт эшенә килтереүе мөмкин. Бер-ике миҫал килтерәһең, быны шул ҡалала шулай булған, малайҙы ҡумыҡлап туҡмағандар, ул имгәнгән, енәйәт эше асылған, ошоно ойоштороусы колонияға китте. Ул енәйәтсенең киләсәге ниндәй була инде, ата-әсәһенә ниндәй ҡайғы, тип әйтеү ҙә уларҙы уйландырыуы ихтимал.

Ә бына рәнйетелгән балаларҙы яҡларға кәрәк. Һәр баланың һәләте була, йә йырлай, йә бейей, йә шиғыр яҙа, йә спортта алдынғы. Һәләтен үҫтерергә булышлыҡ итегеҙ, күңелен үҫтерегеҙ, класташтары араһында абруйын арттырығыҙ. Шулай уҡ ҡайһы саҡта ниндәйҙер психологик сәбәптәр арҡаһында, әйтәйек, арыуы, үҙен тота алмауы һәҙәмтәһендә уҡытыусы үҙе лә буллинг өсөн сәбәп бирә ала. Ҡул менән түгел, тел менән үҙегеҙ баланы кәмһетмәгеҙ. Тыңлашмай ултырһа ла, "башһыҙ", "алйот" тип әрләргә ярамай. Оло кешенең яҡшы ғәмәлдәрен генә үҙләштермәй бала, ямандарын да өлгө итеп ала. Тәнәфестә мотлаҡ ул уҡыусыға "алйот" тип әйтеүселәр, бынан көләүселәр табыласаҡ.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Үҙған тәүлектә Башҡортостанда коронавирус йоктороуҙың 191 яңы осрағы асыҡланған. Хәбәр ителеүенсә, бөгөнгө көндә республикала 183 пациент, шул иҫәптән 94 оло йәштәге кеше стационарҙа дауалана. Ә 2418 ауырыу өй шарттарында мәкерле сиргә ҡаршы көрәшә, шуларҙың 1089-ы - 60 йәште үткән.

✔22-25 ноябрҙә Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөлә "Халыҡ-ара бизнес аҙналығы-2023" үтә. Форум үҙен дәүләт менән бизнес араһында диалогты үҫтереү өсөн профессиональ майҙансыҡ итеп танытты. Йыл һайын сарала 30-ҙан ашыу тематик сессия һәм түңәрәк өҫтәл эшләй, килешеүҙәр төҙөлә. Әлеге форум донъяның 21 иленән, Рәсәйҙең 89 төбәгенән һәм Дәүләт Думаһынан, Федерация Советынан, ШОС-тан, Рәсәйҙең Сауҙа-сәнәғәт палатаһынан, Рәсәй Сәнәғәтселәр һәм эшҡыуарҙар союзынан, Рәсәй тәрәгенән, Эшлекле Рәсәйҙән 4 меңдән ашыу ҡатнашыусыны берләштерә.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә республиканың ышаныслы сит ил партнерҙары менән бәйләнештәрҙе нисек үҫтереү хаҡында хәбәр итте. Әлеге ваҡытта республика 112 ил менән сауҙа алып бара. 2023 йылдың тәүге ярты йыллығында Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнеше һиҙелерлек артҡан. Төркиә (үҫеш 88 процент), артабан Үзбәкстан (+27 процент), Беларусь (+14 процент), Ҡытай (+5 процент), Ҡаҙағстан (+4 процент) менән сауҙала яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшелгән.

✔Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы Луганск һәм Донецк халыҡ республикаларының Халыҡ Советтары (парламенттары) менән ике яҡлы килешеүҙәр төҙөргә әҙерләнә. Документтарға йыл аҙағына тиклем ҡул ҡуйыу күҙаллана. Республика парламенты рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, парламент-ара хеҙмәттәшлек сиктәрендә тәжрибә уртаҡлашыу, республика парламенттарының мәғлүмәти йөҙөттән үҙ-ара хеҙмәттәшлеген үҫтереү, ҡануниәтте һәм закон сығарыу процесын камиллаштырыу буйынса бергәләп эшләү планлаштырыла.

✔Рәсәй Хөкүмәтендә төбәктәр өсөн субсидиялар күләме билдәләнде, улар 2023 һәм 2024 йылдарҙа белем биреү ойошмаларында уҡыу-тикшеренеү, ғилми-ғәмәли, ижади эшмәкәрлекте, белем биреү ойошмаларында физкультура һәм спорт менән шөғөлләнеүҙе ойоштороу өсөн матди-техник базаны яңыртыуға йүнәлтелергә тейеш. Бойороҡҡа Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Башҡортостанға 24,7 миллион һум дотация бүленә, тиелгән унда.



уын депутат үҙе лә яҡшы аңлайҙыр, моғайын. Шул уҡ ваҡытта ул йәш ғаиләләргә пособиелар менән ярҙам программаһын да кире ҡаға, был йәштәрҙе бала табыуға дәртләндерә алмаясаҡ, ти ул. "Күптәр хәҙер, йәш ғаиләләргә күберәк пособие түләргә, фатир, машина менән тәьмин итергә кәрәк, шул саҡ балалар ҙа күберәк донъяға киләсәк, тип тыҡый, ләкин был алдаҡ юл һәм бының шулай икәнлеге Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре тәжрибәһенән дә асыҡ күренә: унда ғаиләләргә ниндәй генә ярҙам күрһәтелмәй, әммә... тыуым коэффициенты уларҙа ла һис артмай. Беҙгә яуапты рухи-әхлаҡи өлкәнән эҙләргә кәрәк", - ти сенатор Павлова.

Бер яҡтан, уның һүҙҙәрендә дөрөҫлөк тә юҡ түгел, ләкин баяғы "ҡанатлы йөмлә"һе менән ул изге ниәтте өҙә һуға. РФ Дәүләт Думаһы депутаты Ксения Горячева ғәжәпләнеү белдергәнсә, ысынлап та, Маргарита Павлова үҙе юғары белем алған, яуаплы эштәрҙә эшләп, карьера баҫҡыстарынан күтәрелгән, шул уҡ ваҡытта ире менән өс бала үҫтерәләр. Тимәк, уның бала табыу эшмәкәрлегенә юғары белем һис тә ҡамасауламаған! Ә нишләп әле юғары белем башҡа ҡатын-ҡыҙҙарға бала табыуға аяҡ салырға тейеш? Павлова ханымдың уҡымаған, наҙан ҡыҙҙарҙан бала таптырыу тәҡдимен ҡараңғы Урта быуатҡа ҡайтыу тип атаусылар ҙа бар. Дәүләт Думаһының Мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Елена Ямпольскаяның ғәҙел һүҙҙәренсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың уҡырға һәм эшләргә хоҡуғы өсөн быуаттар буйы көрәш барған һәм ул еңеү менән тамамланған. Тимәк, тарихты кирегә бороп булмай, ти ул.

Тағы бер депутат, Мария Бутина, юғары белем алыу, карьераға өлгәшеү һәм ғаилә мәсьәләләрен уңышлы бергә алып барыуҙа шәхси тәжрибәһе менән уртаҡлашты. "Белем алыу йәки һөнәргә эйә булыу ғаилә ҡороуға ҡамасаулаймы? Юҡ! Мин уҡытыусы һөнәрен һайланым, директор урынбаҫары булып эшләнем, ә әсәйем - энергетика өлкәһендә юғары класлы хеҙмәткәр, һәм беҙгә бәхетле ғаилә ҡорорға был һис тә аяҡ салманы, киреһенсә, беҙ бәхетле әсәләр", - ти ул.

Ғөмүмән, Павлованың шау-шоу ҡуптарған был тәҡдименә ҡаршы етди дәлилдәр менән сығыш яһаусылар бик күп. Мәҫәлән, фекер алышыусыларҙың береһе: "Беҙ, ҡатын-ҡыҙ, юғары белем алып, аҡсалыраҡ ерҙә эшләмәһәк, ғаиләләребеҙҙе кем аҫрар?"- тигән һорау бирә. Ир-егеттәрҙең бөгөн ғаиләләге роленә ҡарата "таш ырғытыу"ҙар күпселегендә ғәҙел, тип танырға мәжбүр уҡыусылар. Эшһеҙлек, эскелек һәм ғаилә дилбегәһен тулыһынса ҡатын-ҡыҙға тапшырып ҡуйыуҙа ла шул уҡ ҡатын-ҡыҙҙы ғәйепләүҙәр күп. Былары туранан-тура демографияға ҡағылмаһа ла, илдә тыуым кәмеүенә килтереүсе объектив факторҙарҙы иҫәпкә алмай ҙа булмайҙыр. Мәҫәлән, йәштәребеҙ юғары уҡыу йорттарын тамамлап, белем алып, һөнәргә эйә булып сыҡһалар ҙа бөгөн күптәре уҡыған һөнәре буйынса эш таба алмай, күптәре сауҙа, менеджмент, хеҙмәтләндереү өлкәһендә йәш ғүмерен уҙғара. Бәләкәй эш хаҡына ул торлаҡ та һатып ала алмай, ғаилә ҡороу шуға ла уйҙарында ла юҡ әлегә. Ә һуң самай ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп йәшәй торған мәлдәрендә егеттәребеҙҙең бөгөн ҡайҙалығы үҙегеҙгә яҡшы мәғлүм.

Демография мәсьәләһе, тыуымды арттырыу, Рәсәйҙәге күп балалы ғаиләләргә аҡсалата ярҙам РФ Президенты Владимир Путиндың даими иғтибар үҙәгендә. Ил етәкселеге был мәсьәләне барыбер ҙә төбәктәрҙә халыҡтың тормош шарттарын яҡшыртыуҙа, социаль программаларҙы бойомға ашырыуҙа күрә. 2030 йылға илдә халыҡ һанын арттырыуҙың тотороҡло үҫеше тәьмин ителергә тейеш, тигәйне Владимир Путин 2020 йылда уҡ әле халыҡҡа ярҙам саралары буйынса Дәүләт советы ултырышында. Үкенескә, Росстаттың бөгөнгө иҫәпләүҙәренән сығып, 2030 йылға яңы төбәктәрҙе иҫәпкә алмайынса, Рәсәйҙә халыҡ һаны 3 миллионға кәмеүе ихтимал, тип фаразлай. Сәбәптәре - тыуым кимәленең кәмеүе, өлкән йәштәгеләр һаны артыуы. Нисә генә ҡабатлаһаң да, халыҡтың тимәк, тыуымдың да кәмеүе илдең иҡтисади үҫеш кимәленә бәйле.

Әйткәндәй, быйылғы тыуым кимәле 1999 йылдан алып иң түбәне буласаҡ. Ғаиләләрҙә тыуымды арттырыу өсөн икенсе һәм унан һуңғы балалар өсөн дәүләт сығымдарын байтаҡҡа арттырыу ғына, ихтимал, һөҙөмтә бирер, ти Иҡтисади сәйәсәт институтының ғилми хеҙмәткәре Игорь Ефремов. Әлбиттә, Маргарита Павлованың, йәштәрҙең мәлендә ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп, илдә тыуымды арттырыуға өлөш индереүҙәре уларҙың рухи-әхлаҡи кимәленә бәйле, тигәне менән килешергә лә булыр ине кеүек, ләкин бөгөн, ғалимдар раҫлауынса, йәш быуын рухи йәһәттән һуңыраҡ өлгөрә. Мәҫәлән, бөгөнгө 20 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙең шәхес булараҡ үҫеш күрһәткесе үҫмерлек йәшенә тура килә. Ә һеҙ, Маргарита, үҙҙәре лә әле балалыҡтан сығып бөтмәгән ҡыҙҙар-егеттәрҙе бала табып тәрбиәләргә өндәйһегеҙ...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Бөгөн мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың бер-береһен йәберләүе, хатта туҡмауы тураһында хәбәрҙәр йыш ишетелеп тора. Мәғариф системаһында "буллинг" тигән төшөнсәнең әүҙем ҡулланыла башлауының сәбәбен нимәлә күрәһегеҙ?

***Нәзиә БИКБОВА, мәғариф ветераны:*** Хәҙерге балаларҙың ҡаты бәғерле булып үҫеүенең төп сәбәптәренең береһе - интернет тип уйлайым. Бына ошо замана ауырыуына дусар итеүсе интернет балаларҙы ғына ла түгел, йәштәрҙе, хатта ҡарт-ҡороно ла үҙенә ҡол итә, бынан нисек ҡотолорбоҙ икән? Минеңсә, бөгөн халыҡ аҙашыу юлында һәм һәм дөрөҫ юлды - Хаҡ Тәғәлә билдәләгән хаҡ юлды тиҙ арала ғына табып булмаҫ кеүек.

Үҙем аңлағанса, сәбәптәрен дә әйтәйем. Беренсенән, беҙҙең оло быуын кешеләре, барыһы ла булыр, тик һуғыш ҡына булмаһын, тип, тыныслыҡ ҡына теләп үҫтек. Ә бөгөнгө көндә дер һелкетеп донъя көткән йәштәрҙең формалашыу ваҡыты 90-сы йылдарға тура килде. Ошо осор балалары һәм уларҙың балалары тик матди байлыҡҡа табынып, бәхет төшөнсәһен аҡсала тип аңлап үҫте. Икенсенән, һуңғы йылдарҙағы ситтән индерелгән әҙәпһеҙ фильмдар, ҡурҡыныс монстрҙар күрһәтелгән йәнһүрәттәрҙең дә йоғонтоһо барҙыр. Ҡарағыҙ әле, 3 йәшлек балалар йәнһүрәттәрҙәге геройҙарҙы эләкләп, уларҙың тауышы менән һөйләшеп йөрөй. Тимәк, улар өсөн экран артындағы тормош юҡ, улар барыһын да ысынбарлыҡ итеп ҡабул итә, тәьҫире көслө бындай фильмдарҙың. Араларында енәйәтсенең ниндәй юл, маҡсат менән енәйәт ҡылғанын күрһәтеп, ошолай эшләгеҙ, юғиһә, тотолоп ҡуйырһығыҙ, тигән кеүек "өйрәтә" торғандары бик күп. Ошо "сәнғәт" өлгөләре, телевидение аша балаларҙың аңын үҙгәрттеләр ҙә, улар ярҙамы менән үк ниндәй бөйөк идеялар менән йәшәгән илебеҙҙе лә юҡҡа сығарҙылар. Кинәйәләп тәрбиәләй торған киноларыбыҙ ҙа юҡҡа сыҡты.

Мин уҡытыусы булып 40 йыл эшләнем. Шөкөр, бер тапҡыр ҙа буллинг менән осрашҡаным булманы. Үҙебеҙ үҫкәндә лә бындай ҡанһыҙлыҡ юҡ ине. Киреһенсә, кешене һүҙ менән дә рәнйетмә, ти ине атай-әсәй. Уларҙың тәрбиәләп ултырырға ваҡыты ла булманы, тип әйтергә яратһаҡ та, ошондай һүҙҙәр, кәңәштәр, үҙҙәренең әхлаҡлы өлгөһө тәрбиәләгәндер. Боронғолар "Ахырызаман балалары үҙҙәре ата-әсәһенә батша булыр", - тигән. Замана балаларының тирә-йүндәгеләргә ҡарата талаптары, ошаҡтары ата-әсәләр өсөн закон бөгөн. Хәҙерге ата-әсәләргә үҙ балаһы ғына бала, ҡалғандарҙыҡы - бәлә. Үҙ балаһы ҡәнәғәт булһа, еткән, башҡаныҡын түбәнһетһәң дә ярай. Һәр ғаиләлә икешәр бала - береһе баш бала, икенсеһе төпсөк, үҙ һүҙле, үгеҙ күҙле булып үҫкән балаға шул ғына кәрәк. Тимәк, баланың формалашыу осорондағы яуаплылыҡ ата-әсә өсөн иң мөһим яуаплылыҡ ул. Телефон алып биреп, көнө-төнө шунда текәлдереп ултыртып ҡуйыуҙандыр был буллинг тигән бәләләрҙең башы? Ғөмүмән, бала ғаиләлә бер-береһенә иғтибарлы, хәстәрлекле, йомшаҡ булып үҫһен өсөн ғаиләлә иң кәмендә 5 бала булырға тейеш, минеңсә.

Минең һуңғы класым башҡорт класы булды, ата-әсәләр ҙә, уҡыусылар ҙа шул тиклем тәрбиәле, аҡыллы булдылар. Мин дә уларға йыйылыштарҙа ҡоро нотоҡ һөйләп тороуҙан ҡаса инем, төрлө яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен уҡыйбыҙ ҙа, шулар буйынса һөйләшәбеҙ, тәрбиә мәьәләләрен шул арҡылы хәл итәбеҙ, уйланабыҙ. Ғөмүмән, башҡорт балалары тәрбиәле булыуы менән айырылып тора, хатта рус телле уҡытыусылар ҙа: "Боҙоп бөтәләр бит һеҙҙең балаларҙы, ни эшләп башҡорт мәктәбе астырып, шунда уҡытмайһығыҙ уларҙы?"- тип әйтә торғайны. Дин дәрестәре инә тип һөйләнеләр ҙә, уның да файҙаһы булманы. Иманлы кеше мөйөштә намаҙ уҡып ултырыусы ғына түгел бит, халҡыңа кәрәкле булыу, оло-ларҙы оло, кеселәрҙе кесе итә белеү ул иманлылыҡ күрһәткесе. Ошондай тәрбиә һалынһа ине бала саҡтан.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы һәм Дәүләт Йыйылышы раҫлаған республика Йәмәғәт палатаһы ағзаларының йыйылышы үтте. Улар урындағы йәмәғәт берекмәләренең ун вәкилен йәмәғәт палатаһына ағза итеп алыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Республиканың йәмәғәт палатаһының тәүге ун ағзаһы 26 октябрҙә Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында тауыш биреү юлы менән һайланды. Беренсе ултырышы быйыл декабрҙә планлаштырыла.

✓Бүздәк районы спортсыһы Сәфирә Сәғитова грэпплинг буйынса ике тапҡыр донъя чемпионы титулын яуланы. Турнир Мәскәү өлкәһенең Красногорск ҡалаһында үтте һәм Рәсәйҙең 35 төбәгенән, Һиндостандан, Ҡаҙағстандан, Алжирҙан, Ҡырғыҙстандан, Үзбәкстандан 800-ҙән ашыу ҡатнашыусыны берләштерҙе. Сәфирә Сәғитова - "Олимп" өҫтәмә белем биреү үҙәгенең спорт көрәше секцияһы тәрбиәләнеүсеһе, Бүздәктең 2-се мәктәбе уҡыусыһы.

✓Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 28 ноябрҙә - 2 декабрҙә Мәскәүҙә "Рәсәй" күргәҙмә-форумында Башҡортостандың ауыл хужалығы аҙналығы ойоштороla, ул "Аграр Башҡортостан" тип атала. Тәүге өс көндә төбәктең төп брендтары - башҡорт балына һәм башҡорт атына арналған саралар (оҫталыҡ дәрестәре, викториналар) үткәрелә.

✓2023 йылдың сентябрендә Башҡортостанда пенсионерҙарҙың дөйөм һаны 1,136 миллион кешенән күберәк тәшкил иткән, уларҙың 167 меңгә яҡыны эшләп йөрөй. Был хаҡта республика статистары хәбәр итте. Сентябрҙә Башҡортостанда тәғәйенләнгән пенсияларҙың уртаса күләме 19 129 һумға еткән. Был 2022 йылдың апреленә ҡарағанда 1150 һумға күберәк, тип билдәләнеләр Башстатта. Рәсәйҙең финанс министры Антон Силуанов хәбәр итеүенсә, яңы йылдан уртаса пенсия 23,2 мең һумға етергә тейеш.

✓Белорет районының тау саңғыһы үҙәктәре миҙгелде былтырғыға ҡарағанда иртәрәк асырға әҙерләнә. Абҙаҡта яһалма ҡар яуҙырыу системаһы 23 октябрҙә үк эшләй башланы. Ә бөгөн "Морат" тау саңғыһы ошондай эштәргә тотондо. Район хакимиәте башлығы Андрей Иванюта хәбәр итеүенсә, ҡар генераторҙары Морат тауының көньяҡ битләүендә эшләй. Беренсе, дүртенсе һәм балалар трассаларында ҡар яуҙыралар. Бер үк ваҡытта 13 пушка эшләй.

ҠЫҪҠАСА

# ҺОРАУҘАР БАРМЫ?

**29 ноябрҙә киске сәғәт 7-лә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров менән "Тура бәйләнеш" була.** Бөгөндән тура бәйләнеш башланғанға тиклем республика халҡы социаль селтәрҙәрҙә төбәк етәксеһенә үҙҙәрен борсоған һорауҙарын бирә ала. Видеоһорауҙарҙы 28 ноябрҙәсә республика етәксеһенең рәсми сайтына һалырға мөмкин, социаль селтәрҙәрҙә һорауҙар тура бәйләнеш башланғансы һәм хатта тура эфир барышында ла ҡабул ителә. Әйткәндәй, Радий Хәбировтың быйылғы "Тура бәйләнеш"е - уның республика етәксеһе вазифаһына һайланғандан һуң бишенсеһе. Былтыр ул 27 октябрҙә уҙҙы һәм дүрт сәғәткә яҡын дауам итте. Ул саҡта трансляцияны 135 606 кеше ҡараны. Эфир ваҡытында халыҡтан ике меңдән ашыу хәбәр килде, тура бәйләнеш тураһында иғлан ителгәндән алып өс мең һорау ҡабул ителде.

✓ **Башҡортостанда балалар баҡсаһы өсөн түләүгә компенсация алыу тәртибенә үҙгәрештәр индерелде. Хөкүмәттең тейешле ҡарары республиканың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған.** Башҡортостан Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, хәҙер ата-әсәләр түләүгә компенсация алыу өсөн ғаризаны өс ысул менән бирергә мөмкин: мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһына килеп ғариза яҙырға, электрон формала; "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында ҡалдырырға; мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһына почта менән ебәрергә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республиканың мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларына йөрөгән балаларҙың ата-әсәләре балалар баҡсаһы өсөн түләүгә компенсация алырға хоҡуҡлы. Беренсе балаға ул - 20 процент, икенсе балаға - 50 процент, өсөнсө һәм артабанғы балаларға 70 процент тәшкил итә. 2023 йылдың ғинуарынан ата-әсә түләүенең уртаса күләме 1937 һум 40 тин күләмендә билдәләнгән. Компенсация нисек бирелә? Ай һайын ата-әсә түләүе күләме кәмей бара йәки аҡса шәхси иҫәпкә күсерелә.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары беренсе уҡыуҙа "Башҡортостанда һунар һәм һунар ресурстарын һаҡлау тураһында" республика законына төҙәтмәләр проектын ҡарарға әҙерләнә.** Закон проекты республикала дәүләт һунар инспекторҙарының ғүмерен һәм һаулығын мотлаҡ страховкаларға тәҡдим итә. "Улар браконьерҙарға ҡаршы көрәштең алғы һыҙығында тора һәм эштәренә бәйле киң вәкәләттәргә эйә. Закон боҙоусылар менән эш алып барғанда, дәүләт һунар инспекторы законһыҙ табышты, ҡоралды һәм транспортты тартып алырға, кәрәк икән, көс һәм хеҙмәт ҡоралын ҡулланырға хоҡуҡлы. Уның эшен һәр ваҡытта ла аңлап ҡабул итмәйҙәр. Дәүләт һунар инспекторының ғүмеренә һәм һаулығына хәүеф янаған осраҡтар ҙа була. Әлеге закон проекты инспекторҙарҙың социаль яҡланыуын көсәйтеүгә йүнәлтелгән", - тине Башҡортостан парламенты рәйесе Константин Толкачев. Страховкаланыусы - Башҡортостандың Экология министрлығы, ә страховкалаусы - конкурс нигеҙендә һайлап алынған страховка ойошмаһы.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КӨСЛӨ ФЕКЕРҘӘШТӘР ТӨБӘГЕ



**Мәскәүҙә Федерация Советында быйыл Өфөлә июнлә үткән Рәсәй һәм Беларусь төбәктәренең X форумына йомғаҡ яһалды. Кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты.**

Рәсәй Федерацияһы Советы рәйесе Валентина Матвиенко билдәләүенсә, был үткәреү кимәле, йөкмәткеһе һәм һөҙөмтәләре буйынса иң яҡшы форумдарҙың береһе булды. Башҡортостан етәкселеге ғәйәт ҙур ойоштороу һәм әҙерлек эштәре алып барҙы, бәйләнерлек бер сәбәп тә булманы, тине ул. "Радий Хәбировтың форумды әҙерләүгә ҙур иғтибар бүлеүен беләм, - тине Валентина Матвиенко. - Күптән түгел коллегам, Беларусь Республикаһы Советы рәйесе Наталья Кочанова менән осраштым. Ул тағы ла форум тураһында бик матур һүҙҙәр әйтте".

Матвиенко фекеренсә, иң мөһиме - һандар буйынса һөҙөмтәләргә өлгәшелгән, төбәктәр, компаниялар һәм фирмалар араһында килешеүҙәргә ҡул ҡуйылған. "Хөрмәтле Радий Фәрит улы, Андрей Геннадьевич, Лилия Салауат ҡыҙы (Л.С. Ғүмәрова - Федерация Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе), һынатмағанығыҙ һәм ҙур эш башҡарғанығыҙ өсөн ҙур рәхмәт, - тине Валентина Матвиенко. - Башҡортостанда бик көслө фекерҙәштәр коллективы эшләүенә инандым. Өфө халҡының ысын башҡорт ҡунаҡсыллығы һәм ихласлығы менән ҡунаҡтарҙы ҡабул итеүе хаҡында ла бик йылы тәьҫораттар ҡалды".

Валентина Матвиенко форумды ойоштороуға ҙур өлөш индергәне өсөн Радий Хәбировҡа Федерация Советының Маҡтау грамотаһын тапшырҙы.

Журналистарға биргән интервьюһында Башҡортостан Башлығы форумдың республика өсөн мөһимлеге хаҡында һөйләне һәм алған наградаларҙы ул сараны лайыҡлы һәм сифатлы үткәргән идара итеү командаһы һәм дөйөм республиканың эшен юғары баһалау тип атаны.

- Беҙҙең өсөн дуҫ илдәр менән партнерлыҡ айырым әһәмиәткә эйә, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров. - Рәсәйҙә Белоруссияға асыу өсөн башҡарған эштәребеҙ Башҡортостан өсөн бик мөһим. Сауҙа һәм үҙ-ара инвестициялар йәһәтенән һиҙелерлек үҙгәрештәр күрәбеҙ.

Республика Башлығы әйтеүенсә, киләһе йылда Өфөлә Рәсәй менән Ҡаҙағстан араһында төбәк-ара хеҙмәттәшлек форумы үтәсәк. Ул республиканың тышҡы иҡтисади әүҙемлеген артабан үҫтереүгә, дөйөм алғанда ике дәүләттең үҙ-ара эш итеүенә булышлыҡ итәсәк.

Ләйлә АРАЛБАЕВА.

# ЯУГИР ҺҮҘЕ

**"Башҡортостан" мотоуҡсылар полкы командирының тәрбиә эше буйынса урынбаҫары подполковник Рөстәм Шаһабетдинов Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә махсус хәрби операция зонаһында хәрби подразделение яугирҙарының үҙ бурыстарын нисек үтәүе хаҡында һөйләне.**

Ул командование һәм бөтә яугирҙар исеменән республика етәкселегенә мотоуҡсылар полкына һәр яҡлап әхлаҡи һәм матди ярҙам күрһәткәне өсөн рәхмәт белдерҙе. "Беҙҙең полк август аҙағынан бирле шунда, ошо ваҡыт эсендә 65 яугир бүләкләнде, ә 224-е наградаға тәҡдим ителде. Даян Мурзин, Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин, Таһир Күсимов исемендәге башҡорт батальондары алдынғы позицияларҙа тора. Улар барлыҡ кәрәк-яраҡтар менән тәьмин ителгән. Сергей Зорин исемендәге башҡорт батальонының заманса танктары бар. Хәрби подразделениелар ҡуйылған бурыстарҙы теүәл үтәй. Әйберҙәр һәм аҙыҡ-түлек менән тулыһынса тәьмин ителгәнбеҙ. Кәрәк икән, алыш ваҡытында рация аша башҡорт йәки татар телдәрендә аралашабыҙ. Беҙҙең полктың хәҙер үҙенең гимны бар. Һүҙҙәрен ротабыҙ замполиты яҙҙы", - тине "Башҡортостан" полкы командиры урынбаҫары.

Башҡортостан Башлығы махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға наградалар тапшырҙы. Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы, үҙ теләге менән махсус хәрби операцияға юлланған Радик Динәхмәтов "Башҡортостандың халыҡ артисы" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды.

# ТАҒЫ БЕР ОСРАШЫУ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров махсус хәрби операцияла хәрби бурысын үтәгәндә яраланған хәрбиҙәр менән осрашты.**

"Мин күптән һеҙҙең менән осрашып, барлыҡ мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшергә, хәлегеҙҙе белешергә теләй инем. Һеҙҙең аша яралы яугирҙарға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам системаһының нисек эшләүен аңларға теләйем. Республикала 30-ҙан ашыу ярҙам сараһы ғәмәлдә, уларҙың һәр береһенә күп аҡса һалынған, быйыл 5 миллиард һум. Башҡортостанда "Ватанды һаҡлаусылар" махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға булышлыҡ итеү фондының филиалы булдырылды, социаль координаторҙар институты эшләй. Бынан тыш, Өфөлә, Нефтекамала, Стәрлетамаҡта һәм Сибайҙа яугирҙарыбыҙға ярҙам күрһәтеү өсөн муниципаль үҙәктәр асылды. Спорт аша һеҙҙе әүҙемерәк тормошҡа ҡайтарыу өсөн параолимпия комитетын йәлеп итәбеҙ. Үҙ-үҙегеҙгә бикләнмәгеҙ, был беҙҙең өсөн бик мөһим. Яугирҙарҙың подразделениелары менән даими бәйләнештәбеҙ. Уларға ярҙам итәбеҙ, 100-сө гуманитар ылау оҙаттыҡ. Бөтә һорауҙарығыҙҙы, үтенестәрегеҙҙе һәм теләктәрегеҙҙе тыңларға әҙермен", - тип белдерҙе Радий Хәбиров.

"Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фондының республика филиалы етәксеһе Гөлнур Ҡолһарина билдәләүенсә, филиал 6 ай эшләй. Штатта 7 урынбаҫар һәм 54 социаль координатор бар. Социаль координаторҙарҙың әсәйһе - төп офиста, 51-е муниципалитеттарҙа эшләй. "Ошо ваҡыт эсендә байтаҡ эш башҡарылған. Беҙгә һигеҙ меңдән ашыу кеше мөрәжәғәт итте, ун ике меңгә яҡын мөрәжәғәт килде. Шуларҙың ун меңдән ашыуы хәл ителде. Төп һорауҙар иҫәбендә - ярҙам сараларын тәғәйенләү; хәрби хәрәкәттәр ветераны танытмаһын алыу; юридик һәм медицина ярҙамы; махсус хәрби операцияла ҡатнашыуға бәйле федераль һәм төбәк түләүҙәре", - тип билдәләне Гөлнур Ҡолһарина.

Осрашыу барышында республика Башлығы махсус хәрби операция ветерандарының һорауҙарына яуап бирҙе һәм уларҙың тәҡдимдәрен тыңланы.

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Салауат Ҡолбахтин Башҡортостандың мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идарағы начальнигы итеп тәғәйенләнде. "Һеҙ былтыр ноябрҙән бирле ошо вазифала эшләйһегеҙ, үҙегеҙҙе яҡшы күрһәттегеҙ. Төҙөүселәр һеҙҙе яратмай, был эшегеҙҙең сифаты тураһында һөйләй. Һеҙгә ышанып тапшырылған мәҙәни мираҫ объекттарын яҡлауҙы дауам итегеҙ", - тине Радий Хәбиров аҙналыҡ оператив кәңәшмәлә. Башҡортостанда Ространснадзорҙың Волга буйы федераль округы буйынса территориаль идараһының начальнигы урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы итеп Тимур Мөхәмәтйәнов тәғәйенләнде.

✓Өлкән юстиция советнигы Вадим Шәйәхмәтов биш йылға Өфөнөң Дим районы прокуроры итеп тәғәйенләнде. Тейешле бойороҡҡа Рәсәй Федерацияһының генераль прокуроры Игорь Краснов ҡул ҡуйған. Башҡортостан Республикаһы прокуратураһының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, Вадим Рим улы Шәйәхмәтов 1984 йылда тыуған, 2005 йылда "юриспруденция" һөнәре буйынса Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. 2006 йылдың ғинуарында Башҡортостан прокуратураһы органдарында эшләй башлай.

✓2024 йылда яңы йыл каникулдары 10 көн була. Оҙайлы ялдар 2023 йылдың 30 декабренән башлана һәм 2024 йылдың 8 ғинуарына тиклем дауам итә. Рәсәй Хеҙмәт министрлығы киләһе йылда ял һәм байрам көндәрен күсереү тураһында проект баҫтырып сығарғайны. Яҙ көнө рәсәйҙәрҙе дүрт көнлөк ике ял осоро көтә: 28 апрель - 1 май һәм 9 - 12 май. Ватанды һаҡлаусылар көнө (23 - 25 февраль) һәм Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө (8-10 март) унайһынан өсәр көн ял итәбеҙ. 2024 йылда 12 июнлә (Рәсәй көнө) һәм 3-4 ноябрҙә лә (Халыҡтар берҙәмлеге көнө) ял була.

✓Киләһе йылда Өфөнөң Йылы (Теплое) күлендә йәмәғәт пляжы барлыҡҡа килеүе ихтимал. Был хаҡта Өфө хакимиәтендәге оператив кәңәшмә барышында Граждандарҙы яҡлау идараһы етәксеһе Рафаэль Әхмәтов хәбәр итте. Баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев әйтеүенсә, ҡалала пляждар һанын арттырыу өсөн эшҡыуарҙар менән эште әүҙемләштереү кәрәк. Өфөлә йәйгеһен йылға-күл буйҙарында 254 меңдән ашыу кеше ял иткән.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

✓ ***Индексация 7,5 процент кимәлендә фаразлана. Әгәр ғаилә беренсе балаға Әсәлек капиталы алмаған икән, икенсе балаға түләү 833 800 һумға тиклем арттырыла, алған булһа, 630 967 һум була.***



*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ХЕҘМӘТТӘШЛЕК МӨҺИМ



**Ҡайһы бер киң мәғлүмәт сараларының, бөгөн донъя йәмәғәтселеге иғтибары Украиналағы хәлдәр һәм ХАМАС менән Израиль араһындағы һуғыш барышына төбәлгән, шуға күрә лә Сан-Францискола 15-17 ноябрҙә үткән сираттағы Азия-Тымыҡ океан иҡтисад хеҙмәттәшлеге (АТЭС) форумы яңылыҡтар таҫмаһында беренсе урынға сыҡманы, тигән фекере менән тулыһынса ризалашып булмаҫ ине, әлбиттә. Сөнки быйыл форумдың 30-сы саммитына йыйылған 20 илдең, шулар иҫәбендә вице-премьер Алексей Оверчук етәкселегендәге Рәсәй делегацияһының да ҡатнашыуы һәм дискуссияларҙа тиң хоҡуҡлы ағза-ил булараҡ сығыш яһауы, йәғни илебеҙҙең халыҡ-ара аренала еңел генә иҫәптән төшөп ҡалмауы, санкция шарттарына ҡарамаҫтан, төрлө илдәр менән иҡтисади бәйләнештәрҙе нығытыуға ынтылыуы, төрлө илдәр етәкселәре менән осрашып, яңы проекттар буйынса килешеүҙәргә өлгәшеүе ҙур әһәмиәткә эйә булды.**

Был форум иң тәүҙә шуныһы менән иғтибарҙы йәлеп итә: унда илдәр үҙҙәренең сәйәсәт айырмалыҡтарына ҡарамаҫтан, бер үк майҙанда осраша ала һәм ошо сарала ҡатнашыу хоҡуғына эйә. Шуға күрә лә АҠШ-тың быны яҡшы аңлаған дәүләт секретары Энтони Блинкен саммитта сәйәси айырмалыҡтарға баҫым яһамаҫҡа, ә сара һығымтаһы буйынса берҙәм мөрәжәғәткә өлгәшергә саҡырҙы. Американың башҡа эшмәкәрҙәре лә Блинкен тәҡдимен хуплап сыҡты, юғиһә бит тәүҙәрәк Рәсәйҙең саммитта ҡатнашыуына төрлөсә "таяҡ тығып" маташҡан һәм, ғөмүмән, ошоға тиклем фәҡәт Мәскәү менән мөнәсәбәттәрҙе киҫкенләштереүгә йүнәлеш тотҡан һәм теләһә ниндәй яйын табып, Украина мәсьәләһен килтереп ҡыҫтырырға ғәҙәтләнгән Вашингтонға был юлы коллектив эшмәкәрлеккә әҙерлек ҡиәфәтен алырға тура килде. Һөҙөмтәлә саммиттың һығымта декларацияһы ҡабул ителеп, унда асыҡ, ирекле һәм эҙмә-эҙлекле сауҙа баҙары мөхитен булдырыу хаҡында мөрәжәғәт ҡабул ителде. Был документта шулай уҡ яңы коронавирус инфекцияһы һәм уның эҙемтәләре менән көрәште әүҙемләштереү, шулай уҡ 2030 йылға тиклем аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген тәьмин итеү мәсьәләләре урын алды. А.Оверчук белдереүенсә, АТЭС декларацияһында Рәсәй делегацияһы ағзаларының иҡтисад һәм климат буйынса тәҡдимдәре лә тулыһынса эшкә алынды.

Шулай итеп, саммит ваҡиғаһының күптәр иғтибарын йәлеп иткән "сейәһе"нә лә яҡынлаштыҡ. Мәғлүм булыуынса, түҙемһеҙләнеп көтөлгән был ваҡиға саммит барышында АҠШ менән Ҡытай лидерҙары Джо Байден һәм Си Цзиньпиндың бер нисә сәғәт буйы дауам иткән күҙмә-күҙ осрашыуы ине. Ҡытай сит ил эштәре башлығы Ван И белдереүенсә, осрашыу төрлө яҡлы һәм үҙенсәлекле булды. Си Цзиньпин һүҙҙәренә ҡарағанда, АҠШ Ҡытайға баҫым яһауҙан туҡталырға тейеш, сөнки Ҡытай Штаттарҙы "ҡыуып етергә йә ҡыҫырыҡларға ла, гегемонияға ла ынтылмай". Нисек кенә булмаһын, сәйәси күҙәтеүселәр фекеренсә, ҠХР етәксеһе сауҙа-иҡтисад мәсьәләләрен сәйәсиләштермәү яғында, шуның өсөн дә ул АТЭС форумына АҠШ менән тап иҡтисад бәйләнештәрен нығытыу һәм шул нигеҙҙә башҡа дөйөм мөнәсәбәттәрҙә лә асыҡлыҡ, конструктив хеҙмәттәшлек булдырыу маҡсатында килеүен бер нисә тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә алды. Был уның саммиттағы түбәндәге белдереүенән дә яҡшы аңлашыла: "Азия-Тымыҡ океан төбәгенең үҫеш тәжрибәһе асыҡлыҡ булыу - ул сәскә атыуға, ә бына аралашыуға ябыҡ булыуҙың, киреһенсә, бөлгөнлөккә килтереүен күрһәтә. Беҙ сауҙа-иҡтисади мәсьәләләрен сәйәсиләштереүгә һәм уларҙы ниндәйҙер бер ҡоралға, был өлкәләге хәүефһеҙлек төшөнсәһен юҡҡа сығарыуға ҡаршы торорға тейешбеҙ".

Эйе, дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ. Эксперттар белдереүенсә, идеология йәһәтенән Вашингтон менән ниндәй генә айырмалыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, Пекин үҙенең иҡтисади үҫеше хаҡына хеҙмәттәшлектән ситләшергә, иҡтисади партнерҙарын "дуҫ" һәм "дуҫ булмаған" төркөмдәргә бүлеп ҡарарға йыйынмай. "Беҙ Ҡытай-Америка мөнәсәбәттәренең тотороҡло үҫешен бойомға ашырыу өсөн план билдәләнек һәм йүнәлеш алдыҡ",- тип белдерҙе Цзиньпин Байден менән осрашыуға һығымта яһап.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫ АРТА

**Әсәлек капиталын алып та, файҙаланып өлгөрмәгән осраҡта, ул 2024 йылдың 1 февраленән фактик инфляция кимәле буйынса индексациялана.**



Индексация 7,5 процент кимәлендә фаразлана, тип хәбәр итә Башҡортостан буйынса Социаль фонд. Әгәр ғаилә беренсе балаға Әсәлек капиталы алмаған икән, икенсе балаға түләү 833 800 һумға тиклем арттырыла, алған булһа, 630 967 һум була. Әсәлек капиталы өлөшләтә тотонолһа, уның ҡалған өлөшө индексациялана. Әсәлек капиталы аҡсаһын белем алыу, торлаҡ шарттарын яҡшыртыу (шул иҫәптән ипотека), әсәнең пенсияһының тупланма өлөшө, инвалид балаларҙы йәмғиәткә яраҡлаштырыу, 3 йәшкәсә балаларҙың айлыҡ түләүе өсөн файҙаланырға мөмкин. Әсәлек капиталының актуаль суммаһын Дәүләт хеҙмәттәрендә уның ҡалған өлөшө тураһында белешмәгә заказ биреп белергә мөмкин.

*ҠЫҪҠАСА*

## ҠЫШ БАБАЙ ЙОРТО

**Өфө мэры Ратмир Мәүлиев баш ҡала Ҡыш бабайы резиденцияһын асыу көнөн әйтте.** Быйыл ул Ленин исемендәге майҙанда, "Азимут" ҡунаҡханаһы алдындағы скверҙа урынлаша. Резиденцияны асыу тантанаһы 24 декабрҙә көндөҙгө 4-тә башлана. "Яңы йыл майҙансығында ла үҙгәрештәр бар, боҙло һындар, иллюминациялар, әүҙемлектәр күберәк була, - тип яҙҙы Ратмир Мәүлиев үҙенең телеграм-каналында. - Өфөгә Бөйөк Устюгтан Рәсәй Ҡыш бабайы ҡунаҡҡа килә һәм резиденцияны асыу сараһында ҡатнаша". Ҡышҡы тылсымсы һәм уның ярҙамсылары ҡунаҡтарҙы 25 декабрҙән 30-ына тиклем - көндөҙгө сәғәт 4-тән киске 8-гә, 30 декабрҙә - көндөҙгө 12-нән киске 8-гә, Яңы йыл төнөндә көндөҙгө сәғәт 12-нән төнгө 2-гәсә ҡабул итә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр Өфө Ҡыш бабайы резиденцияһын 100 мендән ашыу кеше килеп күрҙе.

✓ **Өфөнөң Ленин районында урынлашҡан 2-се Башҡорт лицейында уҡыусыларҙың теш ауырыуҙарын дауалау һәм иҫкәртеү өсөн стоматология кабинеты асылды.** Был "Сәләмәт йылмайыу" модуле сиктәрендә "Ҡанатлан!" мәғариф проекты ярҙамында тормошҡа ашырылды. Тантаналы сарала Өфөнөң мәғариф идаралығы етәксеһе урынбаҫары Солтан Баҙыҡов, Өфөнөң Ленин районы хакимиәте башлығы Олег Котов, 3-сө балалар стоматология поликлиникаһының баш табибы Римма Ғәниева ҡатнашты. Яңы кабинет заманса ҡорамалдар һәм материалдар менән йыһазландырылған. Тимәк, уҡыусыларға сифатлы медицина ярҙамы күрһәтеләсәк, тигән һүҙ. Билдәле булыуынса, әлеге ваҡытта республика мәктәптәрендә 244 стоматология кабинеты эшләй, 100-ҙән ашыуы "Ҡанатлан!" мәғариф проектының "Сәләмәт йылмайыу" модуле сиктәрендә асылған.

✓ **25 ноябрҙә "Елкән" башҡорт классик музыкаһын йәш башҡарыусыларҙың өсөнсө телевизион конкурсының финалы һәм гала-концерты була.** "Башҡортостан" дәүләт концерт залы сәхнәһендә башҡорт музыкаһы әҫәрҙәре яңғыраясаҡ,12 йәш музыкант дирижер Дмитрий Крюков етәкселегендәге республика Дәүләт оркестры менән сығыш яһаясаҡ. Финалсылар 4 номинацияла сығыш яһай: фортепиано, тынлы инструменттар, скрипка һәм халыҡ инструменттары. Конкурста композиторҙарыбыҙ Азамат Аҙнағолов, Урал Иҙелбаев, Илдар Хисаметдинов, Рим Хәсәнов, Әлфиә Хәбированың яңы әҫәрҙәрен тыңларға мөмкин буласаҡ. Быйыл "Елкән" конкурсы Рәсәй Президенты иғлан иткән Педагог һәм остаз йылына арналды. Конкурс турына 47 музыкант үтте. Жюриҙа билдәле музыканттар эшләне. Концерт БСТ каналында тура эфирҙа күрһәтелә.

✓ **РФ Дәүләт Думаһы депутаттары беренсе уҡыуҙа мәғариф тураһында законға үҙгәрештәр ҡабул итте.** Улар мәктәптәрҙә балаларҙың телефон менән файҙаланыуын тыйыуға һәм хеҙмәт дәрестәрен кире ҡайтарыуға ҡағыла. Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин үҙенең телеграм-каналында парламентарийҙарҙың закон проектын Рәсәй халҡының тәҡдимдәрен иҫәпкә алып эшләп бөтөргә тигән ҡарар ҡабул итеүен билдәләне. Уның һүҙҙәренсә, төҙәтмәләр икенсе уҡыуға индерелә, уға ярашлы, дәрестә телефондар ҡулланыу тыйыла (ашығыс осраҡтарҙан тыш) һәм мәктәптәргә мотлаҡ фән итеп хеҙмәт дәресе кире ҡайтарыла. "Хеҙмәт тәрбиәһе - белем биреүҙең айырылғыһыҙ өлөшө. Ул һәр бала өсөн кәрәк. Был төҙәтмәләрҙе декабрь башында ҡарарға йыйынабыҙ", - тип яҙҙы Вячеслав Володин.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бәүел юлындағы таш

❖ Бәүел юлына таш ултырыу осрағында кишерҙе йыуып таҙартырға һәм ваҡ ҡырғыстан үткәреп, 3 ҡалағына 3 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөлөккә төнәтергә ҡалдырырға. Иртәнсәк йылытырға һәм бер нисә өлөшкә бүлеп, көн дауамында эҫе көйөнсә эсеп бөтөргә. Дауаланыу - 1 ай.

### Аҙҡанлылыҡ

❖ Кишер, торма һәм сөгөлдөрҙө ҡырғыс аша айырым һауытҡа үткәрергә. Йәшелсәләрҙең һутын һығып алырға, ҡара быяла шешәгә тигеҙ өлөштә ҡойорға. Шешәнең ауыҙына боҫо сығырлыҡ итеп ҡамыр һыларға. Ошо һуттар ҡатышмаһын көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу - 3 ай.

❖ 7 өлөш кишер, 2-шәр өлөш сөгөлдөр һәм ҡыяр һуттарын ҡушырға. 15-20 көн дауамында көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20-30 минут алда 0,5-0,7 стакан эсергә.

❖ 3 өлөш кишер һәм 2 өлөш шпинат һуттарын ҡушып, ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр 0,5-0,7 стакан эсергә.

❖ Аҙҡанлылыҡтан шулай уҡ мүшмел (кизил) емештәре ашау ҙа ярҙам итә. Айыу баланы (жимолость) зәңге ауырыуына ҡаршы һәм дөйөм хәлде яҡшыртыусы тәьҫиргә эйә. Халыҡ дауаһында был емештәрҙе аҙҡанлылыҡтан ашарға кәңәш ителә.

### Эскелек

❖ 1/2 балғалаҡ киптерелгән ҡылыс үлән (аир) тамыры һәм артыш (можжевельник) емешен, 1-әр балғалаҡ һары мәтрүшкә япрағы, әрем япрағы, меңъяпраҡ үләнен алып ҡушырға, ваҡларға. Йыйылманың 1 балғалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп бешерергә һәм бер юлы бөтөргәнсе эсергә. Ҡылыс үләндең эфир майы боҫон һуларға.

### Ангина

❖ Ҡылыс үлән (аир) тамырһабағын ваҡларға, шуның 2 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, һыу парында 20-30 минут төнәтергә. Көнөнә кәмендә 3 тапҡыр сайҡарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

**✓ Ата-әсәләре улдарын килеп алып ҡайттылар. Ә уның һәр кимәлдәге командирҙары, замполит, әлбиттә, үҙ язаһын алды. Кемеһелер дәрәжәһенән төшөрөлдө, икенселәренә ҡәтғи шелтә бирелде.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Аласабыр, аласыбар**
**(Пеганка)**



Аласыбар өйрәккә ҡарағанда, ҡаҙға ныҒыраҡ оҡшаған. Өлкән ҡоштарҙың төҫө сыбар: ҡара башлы. Түшенән ҡалаҡ һөйәгенә табан көрән-ҡыҙыл "таҫма" һуҙылған, осоп барғанда ҡанаттарының ап-аҡ өҫкө яғы ла яҡшы күренә. Муйыны аҫҡа табан ерәнгә әйләнә. Суҡышы ҡара, маңлайында ҡыҙыл оро бар, тәпәйҙәре ҡара-һоро. Инә ҡоштоң төҫө аҡһылыраҡ, маңлайында ҡыҙыл ороһо ла юҡ. Шәп оса, ә бына һыу аҫтына бәпкәләр генә яҡшы сума.

Ата ҡош һыҙғырыбыраҡ "дью-дью-дью", "дьту" тип, ә инә ҡош йомшаҡ ҡына итеп "ғағағаҡ", "корр" тип тауышлана. Ерҙә яҡшы атлап йөрөй, кәрәк булғанда шәп кенә итеп йүгерә лә. Ҡыр ҡаҙы һәм өйрәктәре кеүек үк, һыу өҫтөнән ныҡ ҡына ҡалҡып ултыралар, һирәк сумалар. Иртә яҙ килһәләр ҙә, башҡа өйрәктәргә ҡарағанда ояны һуңғараҡ ҡоралар.

Беҙҙең төбәккә яҡын оя ҡорған ерҙәре Азов диңгеҙенән Байкал арьяғына тиклем. Тоҙло, шулай уҡ сөсө һыулы күлдәрҙе үҙ итәләр. Төлкө, бурһыҡ кеүек йәнлектәрҙең ташландыҡ өңдәрен оя итеп һайлайҙар. Ташландыҡ тәҙәләш урындарында, таштар, һалам өйөмдәре янында оя ҡороу улар өсөн хас. Үҙе оң соҡой алмай, шуға ла уңайлы тип тапҡан ояһы һыуҙан йыраҡ урынлашыуы бар. 7-10 йомортҡа һала. Бәпкәләрҙе парлашып тәрбиәләйҙәр, был йәһәттән дә улар ҡаҙҙарға оҡшаш. Ике айлыҡ бәпкәләр оса башлай. Ә оло аласыбарҙар йөнөн ҡойор өсөн ҙур туптарға йыйылалар.

Ҡыҫала кеүектәр, моллюскылар, саранча кеүектәр менән туҡлана. Үлән, уларҙың орлоғон да ашай.

Республикала аласыбарҙар башлыса осоп ҡына үтеп китешләй теркәлә. Ә бына оя ҡороп йәшәү өсөн Урал арьяғы күлдәрен һайлай. Силәбе өлкәһендә ул йыш осрай торған ҡош, Ырымбур өлкәһендә ҡайһы бер территорияларҙа ғына тап итеп була.

Августың өсөнсө декадаһында йылы яҡҡа йыйына башлайҙар. Сентябрҙән ҡалмай осоп китеп бөтәләр. Беҙҙең төбәктең аласыбарҙары Каспийҙың көньяғында, яҡын Көнсығышта һәм Һиндостанда ҡышлай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

КӨН ТЕМАҺЫ

# ҺИНЕ ӨЙҘӘ КӨТӘЛӘР,

## йәки Буласаҡ һалдаттарға әйтер һүҙем

(Башы 1-се биттә).

### Осҡон менән...

Төнгө сәғәт икеләр тирәһендә хәрби госпиталдең дежур хирург бүлмәһендә сираттағы тапҡыр шылтыраған телефон трубкаһын алдым.

- Доктор, фәлән казармала һалдатты ток һуҡҡан, - тине тулҡынланыуынан тотлоға биреп часть буйынса дежурҙағы майор. - Ашығыс рәүештә "скорый" ебәрегеҙ!..

Дежурҙағы фельдшер прапорщик Карауловты ашығыс ярҙам машинаһы менән шунда уҡ әйтелгән казармаға ебәрҙем. Күпмелер ваҡыттан һалдатты госпиталгә алып та килделәр.

- Ҡотҡара алманыҡ, иптәш подполковник, - тип доклад яһаны фельдшер, - күрәһең, шул уҡ секундта йән биргән булған...

Оҙаҡламай ҡабул итеү бүлмәһенә, гәҙәттәгесә, часть командиры, замполит һәм башҡалар йыйылды. Сөнки һалдат ғүмере өсөн иң беренсе нәүбәттә улар яуаплы...

Ә эш былай булған. Төн уртаһында тәмәке тартҡыһы килеп уянған кесе сержант Р. "тумбочка"ла торған йәш һалдатҡа (рота буйынса дневальный булып тороу һалдат лексиконында шулай тип атала) үҙенең "текә"леген күрһәтергә уйлапмы, әҙәлгән үтек шнурын розеткаға тығып, сымдың ике осон тоташтырыу ысулы менән электр осҡоно (короткое замыкание) яһап, тәмәке ҡабыҙмаҡ була. Бәлки, элегерәк тә шулай итеп йөрөгән булғандыр ул, әммә был юлы... Ҡыҫҡа ғына итеп әйткәндә, дембелгә ҡайтырға бер нисә ай ғына ҡалған һалдаттың ғүмере шулай аңһыҙ рәүештә өҙөлдө. Ата-әсәләре улдарын килеп алып ҡайттылар. Ә уның һәр кимәлдәге командирҙары, замполит, әлбиттә, үҙ язаһын алды. Кемеһелер дәрәжәһенән төшөрөлдө, икенселәренә ҡәтғи шелтә бирелде. "За слабую политико-воспитательную работу среди личного состава..." Командирҙы язаға тарттырыу менән, әлбиттә, һалдатҡа ла, уның ата-әсәләренә лә бер ниндәй файҙа юҡлығы барыбыҙ өсөн дә асыҡ. Кемдер әйтмешләй, "поезд киткәйне инде"...

### Әсәкәйем нишләр?..

"Ҡарағыҙ, егеттәр, минең "водовозка" нисек тормоз тотҡанын. Смертельный тормоз!.." - мискәһендә яртылаш һыуы булған ауыр "ЗИЛ" ҙур тиҙлектә таш ҡойма буйындағы эскәмйәлә тәмәке тартып ултырған өс "дембел"гә яҡынлаша. Иптәштәренә етергә бер нисә метр ҡалғас, маҡтансыҡ водитель кинәт тормозға баҫа. Машинаның тормозы, ысынлап та "смертельный", йәғни, тәғәрмәстәр шундуҡ һыҙыра башлай. Әммә... водовозкалағы бер нисә тонна һыу сайпылып, машинаны кинәт алға этәрә... Бампер өс егетте лә шытырҙатып таш стенаға ҡуша ҡыҫа. Һалдаттарҙың икеүһе шунда уҡ йән бирә. Ә береһен госпиталгә алып килеп еткерәләр. "Был хәлгә тарығанымды белһә, әсәкәйем аҡылдан шашыр инде...", - тигән егеттең һуңғы һүҙҙәре һаман да ҡолағымда сыңлай. Әйе, ысынлап та, тап шул һүҙҙәрен генә әйтеп өлгөрҙө һалдат наркоз алдынан. Ҡатмарлы операция барышында уны ҡотҡарып алып ҡалыу мөмкин түгеллеге



асыҡланды. Арҡа мейеһе, талағы, бауыры бөтөнләйгә иҙелгән, эсәктәре бер нисә урындан өҙөлгән, бик күп ҡан юғалтҡан, ғөмүмән, хирургия теле менән әйткәндә, "травма несовместимая с жизнью", һалдат башҡаса уянманы... "Бернисә көндән улым әрмендән ҡайта", тип көткән ата-әсәләренең хәлен кем генә аңламаҫ?.. Шулай уҡ, шаянлыҡ менән, аңһыҙ рәүештә өс кешенең ғүмерен өҙгән водитель һалдат һәм уның туғандары хаҡында ла кем генә борсолмаҫ...

"Тәрбиә эшен етешһеҙ алып барған" командирҙар, әлбиттә, язаһын алды. Әммә, миндә һәм башҡа күптәрҙә ошо фажиғә өсөн гәйеплеләрҙе егеттәрҙең үҙҙәре араһынан ғына эҙләү кәрәктер, тигән уй ҡалды...

### "Ышаныслы урын тапҡан..."

Стратегик ракета пастарында АСО (Автоматизированная система охраны) тип аталған нәмә бар. Ябай ғына итеп әйткәндә, ракетаның тирә-яғы юғары вольтлы тимер сым селтәре менән әйләндереп алынған. Йыш ҡына унда мышы, төлкө, йә иһә ниндәйҙер берәҙәк эттәр эләгеп үлгеләй ине. Был хаҡта һәр бер һалдат бик яҡшы белә. Ниҙер килеп эләгеү менән, электр тоғы автоматик рәүештә һүнеп тора һәм, эләккән нәмәне алып ташлағандан һуң, ҡабаттан ток ебәрәләр. Бына шуны файҙаланып, рядовой Сидоров, дембелгә алып ҡайтырға әҙерләгән әйберҙәрен тимер сым артына "ышаныслы урынға" йәшерә. Токлы сым өҫтөнә ниндәйҙер берәй бүрәнә-маҙар ташлау юлы менән токты һүндертеп, шул арала әйберҙәрен йәшереп өлгөрөп йөрөгән "тапҡыр" һалдат, өйөнә ҡайтып китер алдынан сетка (токлы сымдарҙан яһалған ҡоролма тап ана шулай тип атала) артынан "дембельсий чемодан"ын алырға була. Әммә... был юлы ниндәйҙер сәбәп менән автоматика эшләүҙән "баш тарта"...

Был хаҡта һөйләү ҙә ҡурҡыныс, ысынында, күмергә әйләнгән улдарын атаәсәһе килеп илай-илай тыуған яғына алып ҡайтып киттеләр. Автоматика гәйепләме был хәлгә, командирмы, әллә һалдат үҙеме икәнлеген уҡыусының хөкөмөнә ҡалдырам. Ә әрмеләге йола буйынса, һәр хәлдә, командир гәйепле...

### "Поздно пить "Боржоми"

Әлеге "дембел"гә йыйыныу мәле. Оборона министрының яҙғы саҡырылыш һалдаттарын ҡайтарыу тураһындағы сираттағы бойороғо март аҙаҡтарында сыға. Ике егет шул шатлыҡлы датаны автопаркта ҡаршылай. Илебеҙҙең "изге" йолаһына ярашлы, былдай көндө билдәләп тә алмаҡсы булалар. Антифриз менән... (Антифриз - автомобилдең двигателен һыуытырға тәғәйенләнгән, спирт эсе сығып торған шыйыҡса. ТОСОЛдың аналогы. Ифрат та ныҡ ағыулы. Кеше өсөн үлемесле доза - 30-50 грамм). Был шыйыҡсаның үлемесле икәнлеген һәр бер һалдат белә. Уларға хәрби табиптар, командирҙар һәр саҡ был хаҡта занятиелар үткәреп тора. Тик, кемдер быға әллә ышанмай, әллә ни... Инде бөйөрҙәре бөтөнләй эшләүҙән туҡтаған был ике егетте Екатеринбургтағы Округ госпиталенә алып килеп еткерәләр. Әммә интенсив терапия, хатта ваҡытлыса уларға тоташтырылған яһалма бөйөр ҙә ярҙам итмәй һәм, һөҙөмтәлә, егеттәрҙе барыбер ҡотҡарыу мөмкин булмай. Хәрби табиптар әйтмешләй: поздно пить "Боржоми", когда уже почки отказали...

### "Давай, поспорим!.."

Полк котельныйында 200 литрлыҡ мискә төбөндә бер аҙ ғына дизель яғыулығы (солярка) тора. Рядовой Мулин, Солодов, Якунин бәхәсләшә-бәхәсләшә шул мискә тирәһендә тәмәке көйрәтә. "Ошо мискәгә шырпы яндырып ташлаһам да ут тоҡанмаясаҡ, сөнки был бензин түгел, ә - солярка", - ти егеттәрҙең береһе. Икенсеһе уның менән риза булмай. Ә өсөнсөһө, ике иптәшенең бәхәсенә шаһитлыҡ ҡылып, шулай ҙа дөрөҫлөктө иҫбатларға ҡарар итәләр... Янған шырпы мискә төбөнә хатта төшөп тә етмәй, сөнки, мискәлә йыйылып торған солярка пары ялҡынланып, ғәйәт ҡеслө шартлау барлыҡҡа килә. Һөҙөмтәлә егеттәр бик ауыр яныу йәрәхәте ала. Уларҙың икеүһе госпиталгә алып килеп тә еткермәҫ элек шоктан (ожоговый шок) һәләк була. Ә берәүһе бер нисә ай дауаланғандан һуң, төнендәге һәм битендәге яра йөйҙәре менән өйөнә ҡайтарыла. Был да командирҙың етерлек тәрбиәләмәүе арҡаһында микән? Һәр хәлдә, дивизия командованиеһы шулай тип ҡарар ҡылды.

### Уйындан - уймаҡ...

Йәш лейтенант Василий Хрящев полк буйынса дежурға баҫа. Ә уның ярҙамсыһы булып сержант Соловьев тора. Лейтенантҡа ни бары егерме бер генә йәш була. Дембелгә йыйынып йөрөгән сержант та уның тиҫтере. Төн. Башҡа һалдаттар йоҡлай, ә офицерҙар өйҙәренә ҡайтып киткән. Дежурҙа китап уҡыу, йә иһә, алмашлап ял итеп алыу урынына, дежурный менән ярҙамсыһы үҙҙәренсә "көн үткәрә" башлай. Әрмелә "панибратство" тигән нәмә рөхсәт ителмәй. Әммә инде икенсе йыл хеҙмәт иткән "старик" һалдаттарҙың әрһеҙерәктәре үҙҙәрен кисә генә курсант погондарын лейтенантлыҡына алыштырған бәғзе егеттәр менән тиң күрә. Шул уҡ ваҡытта, йыуашыраҡ (хатта мәшәүерәк) булған ҡайһы бер лейтенанттар, үкенескә, быға юл ҡуйып, ысынында иһә үҙҙәренең абруйҙарын төшөргән осраҡтар ҙа юҡ түгел.

Был юлы ла лейтенантҡа "Вася" тип өндәшергә тартынмаған "карт" һалдат Соловьев йәш начальниктың пистолеты менән уйнап алырға була. Вася, һис һүҙһеҙ, магазины патрондар менән тулы пистолетын кобураһынан сығарып, сержантҡа бирә. Пистолет менән уйнай торғас, сержанттың бер патронды патронникка ебәреүен дә абайламай ҡала офицер. Хәҙер инде пистолет предохранителдән дә алынған, йәғни, атыуға әҙер... Бер ни тиклем ваҡыттан "күп нәмә белгән" йәш офицер сержантҡа нисек дөрөҫ итеп тәҙләргә өйрәтә башлай һәм янылыш курокка баҫа... Әле генә шат, шаян булған Соловьев ергә ауа. Пуля тап маңлайына барып тейгән...

Офицерҙы хәрби трибунал суды күпмелер йылға төрмәгә ебәрҙе. Соловьев цинк табутында өйөнә ҡайтып китте... Бына шундай хәлдәрҙе иҫләп, йәш һалдаттарыбыҙҙы һәр төрлө аңһыҙ бәлә-ҡазаларҙан ҡурсалап алғы килә. Аллаһы Тәғәлә уларға һау-сәләмәт хеҙмәт итеп, өйҙәренә ҡайтырға насип итһен.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы подполковник.**

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа

1828 йылда шул уҡ районда өй төҙөгән саҡта емертелгән ҡурғанда ат биҙәүестәре һәм тимер әйберҙәр менән Византия императоры Феодосий II заманындағы алтын тәңкә (монета) табыла. Ул 401 - 450 йылдарҙа хакимлыҡ иткән. Ошо табылдыҡтың - V быуатҡа ҡараған Византия тәңкәһененең осраҡлы булмауына V -VI быуаттарға ҡараған ҡурғандарҙа табылған хәрби кейемле һәм ҡалҡан тотҡан ике Византия яугиры һынландырылған, бронзанан ҡойоп эшләнгән ике медальон дәлил. Ошондай айылдар алдынғылыҡ билдәһе булып, улар менән V быуатта Византияла айырыуса ҙур хеҙмәт күрһәтеүселәр бүләкләнгән. ХХ быуат урталарында Өфө ҡалаһы биләмәләрендә һәм яҡын тирәлә табылған быяла кубок, сасанид көмөшөнән эшләнгән әйберҙәр көньяҡ импорты предметтары исемлеген киңәйтә бирә.

1936 йылда Пушкин һәм Ленин урамдары мөйөшөндә Медицина университетының административ корпусы бинаһы өсөн котлован ҡаҙығанда ҙур археологик асыш яһала. Эшселәр бай ҡәбергә тап була, бында бик күп алтын әйберҙәр, ҡыҙыл ебәк туҡыма фрагменттары табыла. Табылдыҡтарҙың байтаҡ өлөшө урлана, әммә Милли музей хеҙмәткәрҙәре яҡынса VII быуат аҙағына ҡараған 50 алтын биҙәүесте йыйып алып, фән ҡарамағына тапшыра. Улар - алтын колттар, медальондар, һырғалар һ.б. Табылдыҡтар составы был ҡәберҙең һис шикһеҙ, алдараҡ иҫкә алынғандары кеүек үк, "батша ҡәберлектәре" тип аталғандары иҫәбенә инеүен раҫлай.

Ахырҙа, ХХ быуаттың 60-сы йылдарында ҡала үҙәгендәге емертелгән ҡәберҙәрҙең береһендә VII-VIII быуат сиктәренә ҡараған ҙур алтын сылбыр табыла. Был үтә һирәк осрай торған табылдыҡ ул саҡтағы Милли музей директоры, билдәле археолог Р.Б. Әхмәров тарафынан фән өсөн һаҡлап алып ҡалына.

Турбаҫлы ҡәбиләләре үҙҙәренең үлгән кешеләрен тәрән ҡәберҙәргә ерләп, өҫтәрен бейек булмаған ер өйөмдәре менән ҡаплаған. Ҡәберҙәрҙең оҙонса стеналары төньяҡтан көньяҡҡа йүнәлтелгән; төньяҡ стеналарындағы тәрән итеп соҡоп яһалған урынға эсенә аҙыҡ тултырылған балсыҡ һауыт ҡуйылған һәм күп итеп ит һалынған була. Ат һөйәктәре, шул иҫәптән аттарҙың ерләү йолаһына ярашлы һалып ҡалдырылған аяҡтары, баштары һәм тиреләре - турбаҫлыларҙың ҡәҙимге ерләү йолаһына тап килә.

Турбаҫлыларға түңәрәк һәм яҫы төплө, оҙон тура муйынлы бейек һауыттар һәм яҫы төплө тәпәш көршәктәр хас. Яҫы төплө көршәктәрҙең примитив булған көршәк яһау ҡулайламаһында етештерелеүе хаҡында фараз бар. Турбаҫлыларҙың ҡәберҙәре алтын, көмөш, бронза һәм гәрәбә биҙәүестәргә бай.

Беҙгә турбаҫлыларҙың торлаҡтары ниндәй булыуы билдәле. Улар - ҙур булмаған (4х5 йә иһә 5х6 м) тура мөйөшлө ер өйҙәр, уларҙың ҡалдыҡтары Имәндәш ҡаласығында, Кушнаренко һәм Яңы Турбаҫлы II тораҡтарында табылған. Һуңғы ҡомартҡыла иҫке үҙән яры буйлап урынлашҡан ошондай 5 торлаҡтан тотош урам хасил булған. Әлбиттә, турбаҫлыларға ер өҫтөнә бүрәнәләрҙән һалына торған ағас өйҙәр ҙә таныш булған, әммә уларҙың археологик яҡтан тикшереп булырҙай эҙҙәре ҡалмаған.

Кешеләр даими йәшәй торған тораҡ эҙҙәре Көнбайыш Урал буйына килгән турбаҫлыларҙың ултыраҡ тормош рәүешенә күсеүен белдерә. Быға төбәктең тәбиғи-климатик шарттары - күп һәм тәрән ҡарлы ҡыш миҙгелдәрендә малдарҙы тибенлектә аҫрау мөмкинлеге булмағас, уларға ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ әҙерләү мохтажлығы булыуы мәжбүр иткән.

Турбаҫлылар ер эшкәртеү менән дә шөғөлләнгән, ураҡтар, ҡул тирмәндәренең таш дискылары һәм янғын ваҡытында ашлыҡ һаҡланған соҡор төбөндәге күмерләнеп ҡатҡан бойҙай ҡалдыҡтары ошо хаҡта һөйләй.



Яңы Турбаҫлы ҡурғандарының бер нисә ҡәберендә ҡурылған бойҙай бөртөктәре табылыуы бик оригиналь күренеш. Тимәк, турбаҫлылар өсөн ҡурылған ашлыҡ (ҡурмас) традицион аҙыҡ булып, ул үлгән кеше йәне өсөн тәғәйенләнгән аҙыҡтар иҫәбенә ингән. Ер эшкәртеү өсөн турбаҫлыларҙың һабан ҡулланған булыуы ихтимал.

Турбаҫлы кешеләренең ҡәберҙәрҙәге һөйәктәрен тикшереү уларҙың күбеһенең европеоид расаһына ҡарауын күрһәтә: оҙон буйлы, тар йөҙләләр; әммә улар араһында монголоид расаһы вәкилдәре лә булған. Турбаҫлыларға баш һөйәген яһалма рәүештә деформациялау хас. Турбаҫлыларҙың тән төҙөлөшөнөң ошондай биологик үҙенсәлектәре уларҙың көньяҡ далаларынан күсеп килеүсе ҡәбиләләрҙән булыуына дәлил. Уларҙы беҙҙең эра сиктәрендә Көньяҡ Ҡаҙағстан һәм Түбәнге Волга буйҙарында көн иткән күсмә ҡәбиләләр вариҫтары итеп ҡарап була.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Украинаның уң яры буйындағы һәм Көнсығыш Польшалағы алыштарҙа

### Ковель йүнәлешендәге һәм Владимир-Волынский янындағы яу хәрәкәттәре

Владимир-Волынский өсөн барған алыштар хаҡында дивизия командиры Г.А. Белов ошолай яҙа: "... Ҡаланы төндә штурмларға булдыҡ. Штурм алдынан ҡалала паника тыуҙырырға тырыштыҡ, бының өсөн һәр полктан ҙур булмаған автоматсылар төркөмдәре ебәрелде. 58-се гв. атлы полкынан сапер-шартлатыусылар төркөмө тимер юлы полотноһын шартлатыу маҡсатында тимер юлы станцияһына йүнәлде.

Төнгә ҡаршы артиллеристар һәм минометсылар немец траншеяларына ут асты. Гв. подполковнигы И.Ф. Горлатовтың 60-сы гв. атлы полкы подразделениелары айырыуса тәүәккәл эш итте. Яугирҙар ҡараңғыла тиҙ арала тимер сыбыҡлы кәртәләргә барып етте, улар аша үтеп сығыу урындарын булдырып, алға ташланды. Немецтар пулеметтарҙан һәм автоматтарҙан көслө ут асты. Шуға ҡарамаҫтан, беҙҙең подразделениелар дошман траншеяларына шыуышып барыуын дауам итте. Гв. сержанты М. К. Верещагин беренсе булып дошман пулеметы янына шыуышып килде һәм уның өҫтөнә гранаталар ырғытты. Пулемет тынып ҡалғас, эскадрон алға ташланды һәм траншеяларға бәреп инде.

Ҡалаға көнсығыштан һөжүм иткән 58-се гв. атлы полкы яугирҙары ла ҡыйыу һәм тәүәккәл эш итте. Улар беренсе траншеяны һәм бер нисә өйҙө алды. Әммә полктар артабан һөжүмде дауам итә алманы. Немецтар икенсе траншеянан һәм ҡырыйҙағы өйҙәрҙән көслө ут асты. Был утты баҫтырыу өсөн бер нәмә лә юҡ ине, орудиелар аҙ, снаряд һәм миналар етешмәне. Беҙҙең полктар беренсе траншеяла нығынды.

Дошман Грубешево һәм Сокаль тораҡ пункттарынан машиналар менән резервтарын алып килде. Улар тәүҙә Пивник утары янында оборона тотҡан 62-се гв. атлы полкын контратакаланы, ә таң менән 58-се һәм 60-сы гв. полктары биләгән һыҙыҡта контратакаға күсте. Гвардиясы-черниговсылар көн буйына немецтарҙың ярһыулы ҡыҫымына ҡаршы торҙо. Уларҙың бөтөн атакалары кире ҡағылды. Яугирҙар геройҙарса, батырҙарса алышты. 60-сы гв. атлы полкының 3-сө эскадроны парторгы, гв. сержанты Степан Ерохин, взвод командиры һәләк булғас, командалыҡ итеүҙе үҙенә алып, һуңғы патроны ҡалғанса алышты. Ике тапҡыр яраланһа ла, ул взвод менән командалыҡ итеүен дауам итте.

Артиллеристар фашист танкылары контратакаһын ҡаһармандарса кире ҡаҡты, гв. капитаны М.К. Нагаевтың 148-се гв. артминполкының 1-се батареяһы ныҡ торҙо. Немецтар батареяны ҡамап алып, ҡулдарына төшөрөргә маташты. Үтә киҫкен хәл килеп тыуҙы, ошо хәлдән үҙҙәренең ДШК пулеметтары менән гвардия сержанттары Холкин һәм Шәйхетдинов ҡотҡарҙы. Улар батареяны авиация һөжүменән ҡурсалай ине. Немецтар батареяны ҡамап ала башлағас, Холкин һәм Шәйхетдинов, эре калибрлы пулеметтарын ер өҫтөндәге сәптәргә атыу положениеһына күсереп, һөжүм итеүселәргә ут асты. Уларҙың байтағы үлтерелде һәм яраланды, әммә ҡалғандары орудиеларға яҡынлашты. Бер дошман автоматсыһы, Холкин янына шыуышып килеп, уны атып үлтерҙе. Батыр гвардиясы һәләк булды, әммә дошман үҙ ниәтенә өлгәшә алманы.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ*

# БИШ ТИНЛЕК АҠСА...

## Екатерина II дәүеренән



1772 йылғы 5 тинлек тимер аҡса Рәсәй коллекционерҙары араһында киң популярлыҡ яулаған. Уның ауырлығы уртаса 51,0 грамм, ҡалынлығы 0,4 сантиметр, диаметры 4,0 - 4,3 сантиметр. Аҡсаның ике яғында ла төрлө штемпелдәр, матур биҙәкле һүрәт бар. Уларҙы Екатеринбург һәм Сузун аҡса һуғыу йортонда сығарғандар. Шулай уҡ Бөйөк Екатерина дәүерендә биш тинлекте Мәскәү, Сестрорецк, Санкт-Петербург, Аннинск һәм Таврий аҡса һуғыу йорттары етештергән.

Аҡсаның йөҙъяғында ике башлы бөркөт төшөрөлгән. Уның башын ике таж, өсөнсөһө улар араһында урынлашҡан. Бөркөттөң күкрәген аждаһаны яҙалаусы Еңеүсе Георгий һүрәте төшөрөлгән ҡалҡан биҙәй. Ҡалҡанды Андрей Первозванный ордены менән сынйыр уратып алған. Бөркөттөң тәпәйендә дәүләт власы символдары - скипетр һәм держава. "ЕМ" тамғаһы ла бөркөттөң тәпәйе аҫтында ҡуйылған.

Реверстың төп символы - Екатерина II вензеле, өҫтә - батша тажы, ҡырлап аҫтан өҫкә табан ботаҡ, уртала аҡсаның сығарылған йылы. Ул "17" һәм "72", I (императрица), "Е" (Екатерина) хәрефтәренән һәм "II" һанынан торған ике өлөшкә бүленгән. Аҡса дөрөҫ булмаған түңәрәк формаһында. Екатерина II ваҡытындағы биш тинлек аҡсалар тарихи һәм нумизматик ҡимməткә эйә.

Фотола күрһәтелгән аҡса Темәс тыуған яҡты өйрәнеү музейында ОФ 4232 һаны аҫтында һаҡлана.

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



Мәхмүт Ҡашғари төҙөгән төрки телдәренең энциклопедик һүҙлеген ентекләп тикшерә башлаһаң, иң боронғо, бер үк мәғәнәүи ерлектә хасил булған дөйөм төрки тамыр һүҙҙәрен барлап сығырға була. Ошо боронғо һүҙ тамырҙары хәҙерге төрки телдәрендә, фонетик яҡтан бер аҙ үҙгәреш кисергән хәлдә лә, айырым һүҙ булараҡ та һәм унан яралған башҡа бер һүҙҙәрҙә лә ҡулланылыш тапҡан.

Ҡайһы бер миҫалдарға туҡталайыҡ.

**Ҡашғари: "At, ҡаты рәттәге әлиф менән. Мәҡәл бар: куш канатин эр атин, мәғәнәһе шундай: "кеше аты менән үҙенең маҡсатына нәҡ ҡош ҡанаттары менән өлгәшкән кеүек өлгәшә".**

Был мәҡәл хәҙерге башҡорт телендә лә үҙгәрешһеҙ тиерлек һаҡланып ҡалған: "Ҡош ҡанаты менән, ир-егет аты менән данлы". Шулай уҡ халҡыбыҙҙың ошо уҡ мәғәнәләге тағы бер мәҡәле бар: "Ҡаҙ ҡанаты - ҡауырһын, ир ҡанаты -ат". Телебеҙҙә ошо уҡ "ат" һүҙе "исем" мәғәнәһендә лә ҡулланыла, әммә Ҡашғари һүҙлегендә был һүҙҙең башҡа бер мәғәнәһе хаҡында мәғлүмәт юҡ.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 42-45-се һандарҙа).**

✓ ***2013 йылда Ә. Исҡужин исемендәге 9-сы музыка мәктәбе "Рәсәйҙең 100 яҡшы мәктәбе" конкурсында еңеү яулай, директоры "Йыл директоры - 2013" исеменә лайыҡ була.***



# ОЯҺЫНДА - осҡанында -

**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, баш ҡаланың Әҙеһәм Исҡужин исемендәге Балалар сәнғәт мәктәбе директоры Әхиәт Ғиниәт улы ҒӘЙЕТБАЕВ 2007 йылдан башлап ошо уҡыу йортон етәкләй. Затон биҫтәһендә ҡасандыр емерек хәлдәге ағас бинала ғына урынлашҡан мәктәпте бөгөн танырлыҡ та түгел. Бөтөн шарттарға тап килгән яңы моң һарайы төҙөлөшө барған саҡта уның һәр кирбесенең нисек һалыныуына шаһит Әхиәт Ғиниәт улы. Балалар сәнғәт мәктәбенә данлыҡлы ҡурайсы Әҙеһәм Исҡужин исемен юллау, дөйөм классик дисциплиналар рәтендә башҡорт музыкаһы кластарын формалаштырыу, "Мәҙәниәт" милли проекты сиктәрендә заманса сифатлы музыка ҡоралдары һатып алыу, мәктәпте өҫтәмә кадрҙар, профессиональ музыка уҡытыусылары менән тәьмин итеү, эш барышында идара системаһын хәҙерге фән һәм техника ҡаҙаныштарын иҫәпкә алып төҙөү, артабанғы үҫеш стратегияһын билдәләү, белем биреү методикаларын һәм программаларын эшкәртеү, компьютер музыкаһы, эстрада вокалы, виолончель, ҡурай, думбыра, ҡыл-ҡубыҙ кластарын асыу, рус һәм башҡорт музыка ҡоралдары ансамблдәрен һәм оркестрҙарын, өлкән һәм кесе йәштәге балалар хор коллективтарын сәхнә костюмдары менән комплектлау һ.б. - былар барыһы ла директорҙың көндәлек хәстәре, тырышлығы менән тормошҡа ашырыла.**
**2013 йылда Ә. Исҡужин исемендәге 9-сы музыка мәктәбе "Рәсәйҙең 100 яҡшы мәктәбе" конкурсында еңеү яулай, директоры "Йыл директоры - 2013" исеменә лайыҡ була. Әхиәт Ғиниәт улы - музыка сәнғәтенә бағышланған хеҙмәттәр, мәҡәләләр авторы, төрлө конкурстарҙа жюри ағзаһы, асыҡ дәрестәр, оҫталыҡ кластары үткәрә, йәш уҡытыусыларға методик ярҙамдар күрһәтә.**
**2017 йылда музыка мәктәбе "Рәсәйҙең 100 яҡшы ойошмаһы һәм предприятиеһы" конкурсында еңеү яуланы, директоры "Инновация һәм үҫеш өсөн" Маҡтау дипломы менән бүләкләнде. 2018 йылда иһә "Бәләкәй принц" Бөтә Рәсәй конкурсында еңеүсе тип танылды. 2020 йылдың 3 мартында Әхиәт Ғәйетбаевтың тырышлығы менән бөтә шарттарға яуап биргән өс ҡатлы музыка мәктәбе бинаһы сафҡа инде.**
**Әхиәт Ғиниәт улының барлыҡ тормошо минең күҙ алдымда үтте. Беҙ Баймаҡ районының Буранбай ауылында тыуып үҫтек. Тамырҙарыбыҙ халҡыбыҙҙың моң һандуғасы данлыҡлы Буранбай сәсәнгә барып ялғана. "Үҫкәнендә ни күрһә, осҡанында шул булыр" ти халыҡ мәҡәле. Кешенең оло мәле сабый сағының шаңдауы тигәнгә лә ишара был. Шуға күрә лә музыка мәктәбе директоры менән әңгәмәбеҙ булмышыбыҙҙы әүәләгән рухи тамырҙарыбыҙ, бәхетле бала сағыбыҙҙың ҡайһы бер миҙгелдәре хаҡында булыр.**

**Әхиәт, бала сағыбыҙ бергә, бер үк һуҡмаҡтарға баҫып, бер үк шишмәләрҙең һыуын эсеп, бер үк әкиәттәрҙе, йырҙарҙы тыңлап үтте. Хәтирәләребеҙ ҙә уртаҡ. Шулай ҙа, бала сағыбыҙ, тигәндә иң тәүҙә ниндәй ваҡиғалар күҙ алдыңа килә?**

- Иң иҫтә ҡалғандары иң бәхетле мәлдәр инде ул, Әхмәр ағай. Шағир һүҙе менән әйткәндә, оҙон-оҙаҡ бала сағым! Шүлкә буйҙарында бесән эшләгән мәлдәр үҙе генә ни тора! Беҙҙең ауылдан Шүлкәгә тиклем егерме саҡрымдар барҙыр. Юл насар. Ҡара урман эсендәге юлды тракторҙар йәй буйына тәрән-тәрән соҡорҙар ҡалдырып иҙгеләп бөтөрә. Ат егеп иртән иртүк сыҡҡанда ла, тик төш ауғас ҡына арып, еккәндең хәлен алып барыр ереңә барып етәһең. Шуға ла халыҡ мал-тыуарын ҡыуып, хатта ҡаҙ-тауыҡтарын ҡалдырмай, бесәнлеккә күсеп килә. Күҙ күреме ерҙә бихисап ҡыуыштар ҡалҡып сыға. Көндөҙ урман тып-тыныс, барыһы ла бесән саба. Ә кисен беренсе ысыҡ төшөү менән ҡыуыш тирәһендә кешеләр күренә башлай - усаҡтарҙағы ҡаҙандарҙа ит мулҡылдап бешә, тәмле аш еҫе тирә-йүнде ялмап ала. Кистәр шундай тыныс, хатта саҡрым алыҫлығындағы күршең менән тауыш күтәрмәй генә һөйләшәһең.

Миңә, ун йәшлек малайға, бигерәк тә кистәрен Зәйнулла ағайҙың ҡыуыш төбөндә ҡурай уйнағаны оҡшай. Түшәлеп ятҡан киске томанда моң шул тиклегем алыҫҡа тарала, әйтеп аңлатырлыҡ түгел. Зәйнулла ағайҙың армиянан ҡайтҡан сағы, өс йыл флотта хеҙмәт иткән. Ул Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға ингән, тип кемдәндер ишеткәйнем, Ҡурай буйынса мәшһүр ҡурайсы Ғата Сөләймәнов үҙе уҡыта, имеш. Үәт бәхетле кеше! Нимә генә тимә, ағай ауылыбыҙҙың беренсе профессиональ ҡурайсыһы!

Үҙең беләһең, беҙҙең ауылда, ғөмүмән, һәләтле кешеләр бик күп: йырсылар, ҡурайсылар, гармунда, скрипкала, ҡыл-ҡумыҙҙа, баянда уйнаусылар, һыңҡылдата баҫып бейеүселәр, ҡумыҙсылар, шағирҙар. Тағы ла беҙҙең ауылда тик боронғо йырҙы башҡарыу ғына йырлай белеүгә иҫәпләнә. Заман йырҙарын башҡарыусылар таҡмаҡсылар иҫәбендә (Һәр ауылдағы кеүек, нервыла уйнаусылар ҙа юҡ түгел!).

Ауылыбыҙҙың данлыҡлы сәсән, ҡурайсы Буранбай исемен йөрөтөүе лә юҡҡа түгелдер. Әйткәндәй, минең ҡартатайым Солтанморат та ҡурайҙа бик матур уйнаған тип һөйләйҙәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 1943 йылда һуғышта хәбәрһеҙ юғалған. Атайым ҡурай тартмаһа ла, баянда, мандолинала, скрипкала бик матур уйнаны, ҡайһы саҡ йырлап та ебәрә торғайны.

**Ҡартәсәйең Хәнифә инәй хәтеремә ныҡ уйылып ҡалған. Уның колхоз ҡыуыштары араһында үҙ ҡыуышы булды. Бесәнселәргә ҡымыҙҙы ла ул әҙерләне, кәшәүәр булды...**

- Солтанморат ҡартатайым ҡырҡ өсөнсө йылда хәбәрһеҙ юғалғас, ҡартәсәйем өс бала менән яңғыҙ тороп ҡалған. Ул үгеҙ, ат егеп, бригадаға кәрәсин, сәләрке ташыған. Яғыулыҡ тултырылған мискәләрҙе арбаға тейәп, Ирәндек тауы аша Магнитогорск ҡалаһынан килтергән ҡартәсәйем. "Аҙна буйы йөрөп ҡайта торғайныҡ", тип һөйләр ине ул. Ҡартәсәйемдең ауыр тормош көтөүен күреп, йәлләп һәм ғашиҡ булып, йәш егет Сәйәх уға өйләнгән.

Ҡартәсәйем бик сибәр булған. Ул бик оҫта ҡуллы кеше ине. Белеме булмаһа ла, иҫәп-хисапҡа ла шәп булды. Биш намаҙының береһен дә ҡалдырманы. Беҙҙең алты мөйөшлө өйҙөң төп яҡтағы бүлмәһендә уның балаҫ һуғыу станогы бар ине. Ул бер ваҡытта ла буш торманы. Ҡартәсәйем төрлө-төрлө биҙәктәр яһап балаҫтар, хатта ябынып йөрөй торған суҡлы мамыҡ шәлдәр һуҡты. Тирә-яҡ ауылдарҙан халыҡ күп килә торғайны. Хатта заказдар бер нисә айға алдан төҙөлә. Шуға ла ғаиләлә етешлек булғандыр. Ул замандағы етеш тормошто сәйгә ҡуйылған бал, шәкәр, кәнфит, прәниктәр менән баһалайҙар ине. Был тәмлекәстәр беҙҙең табында бер ҡасан өҙөлмәне. Шуға ла ҡартатайым ғорурлыҡ менән: "Беҙҙең балалар шәкәрһеҙ сәй эсмәй, бына ғәжәп", - тип ҡыуанып кешегә һөйләй ине.



**Атайың менән әсәйеңдең өйләнешеүенә бәйле ҡыҙыҡлы лаҡап та һөйләйҙәр беҙҙең яҡта. Әсәйеңдең бер туған ҡустыһы Фәйзулла ағайың шул саҡта гармунлы булған ваҡиғаны һөйлә әле?**

- Лаҡап түгел ул, ағай, булған хәл. Атайым өс йыллыҡ әрме хеҙмәтен тултырып, тыуған ил алдындағы бурысын үтәп, тыуған ауылыбыҙға ҡайта. Алда тотош тормош, яҡты киләсәк, ҡанатлы уйҙар, матур пландар. Ике ҙур сумаҙанда туғандарға алған күстәнәстәр, арҡаһына гармун аҫып алған. Әрмегә тиклем үк гармунсы булып танылған булған ул. Хәҙер инде өйләнергә ваҡыт, йолаһы шулай. Тик кемгә өйләнергә? Үткән йомала ауылдан 20 саҡрымдар араһында Нуғай тигән ауылға олатайымдың һеңлеһе Гөлзаһира инәйгә ҡунаҡта булғанда күреп ҡала ҡалаҡҡа һалып йотмалы бер һылыуҙы. Исеме Сәғирә икән.

"Оҡшап ҡалды һылыу, тәүәккәлләргә булдым", - тип һөйләй торғайны атайым. Шулай итеп, ҡышҡы сатлама һыуыҡта саңғы менән 20 саҡрым араны берҙәй итеп Нуғайға барып та ингән. Гөлзаһира инәйҙәрҙә сәй эсеп йылынып алғас, кисен күрше ҡыҙының тәҙрәһен сирткән. Тик ҡыҙҙың ун йәшлек ҡустыһы Фәйзулла апаһын сығармай ҙа сығармай икән. Ҡансама юл үтеп, атайым ҡыҙҙы күреп һөйләшә лә алмайынса, Буранбайға ҡайтып киткән. Ни эшләргә, берәй хәйлә кәрәк бит инде.

Икенсегә барғанда атайым тәҙрә ҡағып тормаған, гармунында һыҙҙырып уйнап ебәргән. Фәйзулла ағай шундуҡ атылып килеп сыҡҡан да: "Килеп йөрөмә ҡабат, барыбер апайымды һиңә бирмәйем, гармуның менән генә әүрәтә алмаҫһың", - тип ҡаты торған. Атайым да юғалып ҡалмаған: "Әйҙә, һөйләшәйек, мин һиңә ошо гармунды бүләк итәм, ә һин апайыңды саҡырып сығар", - тигән. Фәйзулланың күҙҙәре янып киткән. Уртаҡ тел табылған.

Апай хаҡы - гармун, Фәйзулла ағайым гармунға тейенгән һәм һөйөнгән. Ул саҡта ауылдың төп моң сығанағында уйнарға өйрәнеп алып, Нуғайҙың беренсе егетенә әүерелгән. Әле лә һыҙҙырып уйнай, шул саҡты һағынып һөйләй. Үҙе матур ғаилә ҡороп, еңгәй менән ҡыҙ-малайҙар үҫтереп, Ниғәмәт ауылында ғүмер итәләр. Әйткәндәй, мине гармунда уйнарға ул өйрәтте. Бына ҡыҙыҡ: атайымдың һөнәре икенсе кеше аша миңә күсте. Рәхмәт уға! Атайыма ла!

**Иҫләйһеңме, беҙҙең өйҙәр яҡын ғына урынлашҡайны. Улай ғына ла түгел, был өйҙәрҙә йәшәүсе балалар бер ғаиләләй татыу инек, бер өйҙә йәшәгән һымаҡ инек...**

- Уң яғыбыҙҙа Ғариф олатай Буранбаевтар, артабан Ғәле, Ҡәһәрмән Ғөбәйҙулллиндар, тағы ла бер өй аша - данлыҡлы тарих уҡытыусыбыҙ Әғзәм Әсфәндиәр улы Хәмитовтың өйө. Һул яҡта профессиональ ҡурайсылар, игеҙәктәр Ирғәле һәм Нурғәле Байрамғоловтарҙың ҡартаталары Салих олатайҙарҙың йорто, уларҙан ары урынлашҡан өйҙә мәшһүр шағирыбыҙ Рәйес Түләк тыуып үҫте. Беҙҙең йорттан юл ашаһындағы ҡаршы яҡ күршеләребеҙ тип биш-алты өйҙә йәшәүселәрҙе атарға булалыр. Юл ашаһы тиһәләр ҙә, ҡаршы яҡ өйҙәрҙең беҙгә тиклем аралығы 30 аҙым самаһы ғына, ҡыҫҡаһы, ул тирәләге өйҙәр бик бытыш урынлашҡайны. Урталыҡтағы өй, ағай, һеҙҙеке, Ғүмәр олатай Үтәбаевтарҙыҡы, уның янында олатайҙың әсәһе Тайфа инәйҙәрҙеке, унан Йосоп ағай Ғөбәйҙуллиндарҙың, шунан Таңатар олатай Раевтарҙың өйө. Ғүмәр олатайҙарҙың уң яғында ҡорҙашым Салауат Ғөбәйҙуллин, арыраҡ Ғилмитдин олатай Һағынбаевтар (Юнир Һағынбаевтың ҡартатаһы) йәшәне.

Бала саҡта беҙҙең өсөн миҙгел төшөнсәһе бөтөнләй булманы: ҡыш ни, яҙ ни, йәй ни, көҙ ни. Берҙәй үк күңелле, бер уйын ялҡытһа, икенсеһен алыштыра һалабыҙ. Шау-гөр киләбеҙ. Мәктәптән ҡайтҡас, бер кем дә өйҙә ултырмай. Барыбыҙ ҙа урамда йә булмаһа Һаҡмар буйында. Был күренештең төп сәбәбе - көн һайын күңел тартып торған йорт: Ғүмәр олатайҙың өйө. Бында беҙгә күңелле, берәү әрләмәй, ауыр һүҙ әйтмәй. Был йорт хәҙерге балалар баҡсаһын хәтерләтә. Ғаиләләрендә ун бер бала: Мәҙинә, Гөлнур,

✓ ***Мин һинең ихтыяр көсөңә һоҡландым. Был сифатыңды Сибайҙа сәнғәт училищеһын асҡанда, Өфөләге ташландыҡ музыка мәктәбе урынына заман талаптарына тап килерлек Балалар сәнғәт мәктәбен төҙөгәндә нығыраҡ тойҙом.***

# КҮРГӘНЕ,

## булғаны

Зөфәр, Бибинур, Әхмәр, Әхтәм, Әмир, Хәбир, Зәбир, Гөлсинә, Мәзүнә. Ҡайһы ваҡыт өйҙәрендә күберәк тә балалар йыйылып китә, күршеләрҙән Ғәзиз, Миңнулла, Заһир, Зариф, Салауат, Нуритдин, Зәйнитдин, Рәйес, Йосоп килеп ҡушыла. Дөбөршатыр йөрөйбөҙ, тик тыйып, мәтриләп торған тәрбиәселәр генә юҡ.

Бер ваҡиға күңелгә һеңеп ҡалған. Шулай бер мәл урамда уйнап йөрөгәндә кинәт кенә дөбөр-шатыр йәшенләп ямғыр яуа башланы. Йүгерешеп өйгә ынтылдыҡ, ялан аяҡтарға мәте йәбешкән. Мәрйәм инәй ҙур кәритәгә һыу ҡойоп аяҡтарҙы сайҙырып төпкө бүлмәгә урын йәйеп, бер иҙән итеп теҙеп һалды. Тышта шатырлап ямғыр яуа, өй эсе ҡараңғы. Мәрйәм инәй тыныс ҡына әкиәт һөйләй. Шундай рәхәт, күҙ ҡабаҡтары ауырайып, йоҡлап киткәнмен.

**Бибинур апайҙың дәрестәрен иҫләйһеңме?**

- Әлбиттә, иҫләйем. Иң беренсе уҡытыусым Бибинур апай булды. Беҙ ике-өс өйҙән йыйылған 7-8 бала көн һайын "уҡытыусыбыҙҙың" үҙе мәктәптә уҡып ҡайтыуын түҙемһеҙләнеп көтөп алабыҙ. Апай дүртенселә уҡый ине ул саҡта. Беҙ төштән һуң уҡыйбыҙ, был саҡта урам тынып ҡала. Урам эсендә солан кеүек һарай, эсе яҡты. Стенала бәләкәй ҡара таҡта эленеп тора. Ҡаршы стена буйлап оҙон эскәмйә һәм өҫтәл. Барыбыҙҙың да ҡулыбыҙҙа ҡәләм, дәфтәр. Ул ваҡытта хәҙерге шариковый ручкалар юҡ ине, әммә өйҙә ҙур ҡатырға һауыт эсендә иллеләп перо һәм уның янында ҡыҙыл ағас һауытлы ҡара һауыты.

Бына апай "Әлифба"ны аса, ҡәҙерләп кенә биттәрендәге ҡыя, тура һыҙыҡтарҙы беҙҙең дәфтәргә төшөрә. Ашыҡмай ғына унынса һыҙыҡтарҙы һыҙабыҙ. Килеп сыҡмай ҙа ҡуя. Уҡытыусыбыҙ шым ғына янибыҙға килеп ҡарап тора. Шулай ҙа тырышабыҙ. Етмәһә, мин һулаҡай. Һул ҡул менән тигеҙ сыҡҡан кеүек. Үҙемә лә ҡулай. Тик Бибинур апай яныма килеп: "Уң ҡул менән яҙалар, һул ҡул менән түгел", - тип ҡәләмде уң ҡулыма күсерә. Ул ситкә киткән арала тиҙ генә һулыма кире күсерәм. Бер ваҡыт һулаҡай ҡулымды бөтөнләй кеҫәмә тығып китте. "Башҡа улайтма, атыу ҡулың менән ҡуша кеҫәңде тегеп ҡуям", тип янай.

Беҙгә бигерәк тә унын әкиәт китабын уҡыуы оҡшай. "Урланған ҡояш" әкиәте бигерәк иҫтә ҡалған. Ҡояшты йотҡан крокодилға нәфрәт, ҡотҡарыусы йәнлектәргә мең рәхмәт. Ошо дәрестәр артабанғы тормошомда ҙур роль уйнаны. Элек бит балалар мәктәпкә бөтөнләй әҙерлекһеҙ баралар ине ауыл ерендә. Мәктәпкә барғанда мин ҡәләмде нисек һәм ҡайһы ҡулға тоторға белә инем. Дәфтәргә ҡыя һыҙыҡтар ҙа, түңәрәктәр ҙә матур сыға. Әлбиттә, бәләкәй генә һарайҙағы Бибинур апайым биргән тәүге дәрес һабаҡтары мәктәптә уҡыуыма ҙур йоғонто яһаны.

**Мин һине сәпиттә йөрөргә өйрәттем, уны иҫләйһеңме?**

- Иҫләйем, ниңә иҫләмәҫкә! Әле мәктәпкә бармағайным, атайым миңә "Салют" тигән велосипед алып бирҙе. Әммә йөрөй белмәйем. Буйым да етмәй. Бер-ике көн урамда этеп алып йөрөнөм. Малайҙар һораһа, биреп торам. Бер көн шулай, Әхмәр ағай, һин минең сәпит менән йөрөп килдең дә, "Әйҙә, Әхиәт, һине велосипедта йөрөргә өйрәтәм", тип әйтеп һалдың. Һин бер яғынан тотоп тораһың, мин икенсе яғынан менеп ултырҙым. Педален әйләндерә алмайым, рулде бора белмәйем, етмәһә, бер яҡҡа ҡолап барған һымаҡмын. Һин ҡабырғанан нығ итеп тотоп, тыш-быш килеп минең янда йүгерәһең. Тын алышыңды тоям, арығанһың, тик ебәрмәйһең. Тәүге көн минең өсөн файҙаһыҙ үтте. Иртәгәһенә кәртә артындағы тигеҙ үләнлеккә сыҡтыҡ. Мин үҙемде бөгөн ышаныслыраҡ тотам. Берҙән, бер көнлөк тәжрибәм бар, икенсенән, ҡолаһам да, үлән йомшаҡ. Йүгереп эйәреп бара торғас, ҡапыл ҡулыңды ебәрҙең дә, үҙең абайламаҫтан тороп ҡалдың. Ә мин бер ун метр самаһы барып йығылдым, әммә артабан сәпиттә үҙем йөрөй башланым.

Һинең миңә ғүмергә етерлек биргән һабағың да шул булғандыр: ҡоламайынса ҡоламаҫҡа өйрәнеп булмай.

**Минән ҡурайҙа уйнарға өйрәнгәнең дә иҫеңдәлер. Үҙең шундай теләк белдергәйнең. Шулай ҙа тота килеп шундай теләгең нисек барлыҡҡа килде һуң?**

- Беренсенән, һигеҙҙе тамамлағас, туғыҙынсы класҡа "килмешәк" булып Беренсе Этҡолға барырға теләмәгәнмендер инде. Өҫтәүенә, ул ауыл малайҙары уҫал ғыналар. Күрше ауыл мәктәбенә "килмешәк" булып уҡырға барыуҙың ни икәнен беҙ, буранбайҙар, яҡшы беләбеҙ. Йыш ҡына күрше ауыл малайҙары менән уҫмаҡлашырға тура килә. Әлбиттә, бындай шарттарҙа уҡыуҙың сифаты тураһында һүҙ ҙә юҡ. Икенсенән, йыш ҡына мәктәптең оло кластары араһында бәйгеләр булып тора, концерт программалары әҙерләйбеҙ, жюриҙа үҙебеҙҙең уҡытыусылар. Мин малайҙар менән гармунсылар ансамблендә сығыш яһайым. Класташым Фәттәх Аралбаев гармунда һыҙҙырып уйнай, тағы ҡурайын алып сәхнәгә сығып китә. Ул ҡурайҙа ла шундай итеп уйнай, мин дә һис шикһеҙ ҡурайҙа уйнарға тейешмен, тигән теләк ҡабынды күңелдә. Тик ҡурайҙы ҡайҙан алырға, нисек өйрәнергә? Тап шул саҡта һинең дә атайыңдан ҡурай уйнарға өйрәнеүең иҫкә төштө инде. Һин шулайтып мине лә ҡурайҙа уйнарға өйрәтә башланың, ағай.

**Иң тәүҙә ниндәй көйҙө өйрәндек?**

- "Күк Ирәндек буйында"ны өйрәттең. Ҡағыҙға ҡайһы бармаҡты асырға кәрәклеген һандар ҡуйып яҙып бирҙең. Тәүге нотабыҙ ҙа шул булды.

**Ул йылды мин унынсыны тамамлап, колхозда эшләп йөрөй инем. Атайымдың кәңәше буйынса алдағы йылда Ауыл хужалығы институтына уҡырға инергә әҙерләнә башлағайным. Атайың Ғиниәт ағай, әсәйем күмәкләп мине лә йәүкәләп, Өфө сәнғәт училищеһының ҡурай бүлегенә барырға күндерҙегеҙ. Шул саҡта дүртәүләп, атайың, һин, Сыңғыҙ һигеҙ йыллыҡ мәктәбенең география уҡытыусыһы Мостафа ағай Ҡотдосов купе вагонында Өфөгә барҙыҡ бит әле...**

- Минең ҡурай бүлегенә уҡырға барыу теләгем осраҡлы килеп сыҡты, ағай. Яҙғы каникул башланған саҡ ине. Мин Нуғай ауылындағы өләсәйемә йылдағыса ҡунаҡҡа килдем. Сәй эсәбеҙ. Әсәйемдең бер туған ҡустыһы, атайымдың гармунына эйә булған Фәйзулла ағайым ҡыҙыҡһынып һорай ҡуйҙы: ҡустым, һигеҙҙе бөтәһең, ҡайҙа уҡырға бараһың, тине. Мин: "СПТУ-ға булһа ла уҡырға инәсәкмен, тик туғыҙынсы класҡа бармаясаҡмын",- тинем. Ул: "Әйҙә сәнғәткә, һәләтең бар, ана еҙнәм дә баянда, гармунда матур уйнай, - тип минең атайҙы ла маҡтап алды. - Ҡурайҙа өйрәнә башлағанһың. Өфөлә сәнғәт училищеһында күрше ауылдан Ришат Рәхимов тигән егет уҡыта. Әйткәндәй, Фәйзулла ағай, һәйбәт ҡустың булһа, әпкил, алырбыҙ, тигәйне", - тип әйтеп һалды. Шул минутта минең яҙмыш ҡапыл үҙгәрҙе лә ҡуйҙы. Мин ныҡлап имтиханға әҙерләнә башланым. Шунан һине лә күндерҙек. Ҡалғанын үҙең беләһең инде.

**Эйе, поезда Магнитка еткәс, Әбйәлил районы инәйҙәрен, апайҙарын ҡурай тартып бейеткәнебеҙ ҙә хәтеремдә. Хәйер, был хаҡта яҙған хикәйәм дә бар.**

- Беҙ ул саҡта документ тапшырырға һуңланыҡ та, Ришат ағайҙың өйрәтеүе буйынса училищеға яҡын ғына урында йәшәүсе Ғата ағай Сөләймәновтың фатирына барып индек. Йәнәһе, беҙ баймаҡтар, һеҙгә үтенес менән килдек, ә ҡатыны беҙҙе танымай, өйгә индермәҫкә итә. Беҙ унын һайын ныҡышабыҙ. Шунан ҡатыны "Ғата" тип ҡысҡырыуға, төпкө бүлмәнән Сөләймәнов үҙе килеп сыҡты. Беҙҙе ҡурай уйнатып ҡараны ла, мине алырға, ә һине әрменән һуң килергә, тигән ҡарарын сығарып та ҡуйҙы. Шул саҡта Ғата ағайға нимә тип әйткәненде иҫләйһеңме, ағай?

**Әллә, онотҡанмын, нимә тинем?**

- Хәҙер алмағасығыҙ, армиянан һуң килеп тә тормаясаҡмын, тинең. Ғата ағай һуңынан "Ағайың әрменән ҡайттымы, беҙгә киләме? Бик үткер егет ине", тип бер нисә тапҡыр һораштыһинең турала.

**Беҙ атайың менән шул көндө үк поезға ултырып, кире ауылға ҡайтып киттек. Һин бер үҙең ҙур ҡалала, артыбыҙҙан йүгерерҙәй булып, тороп ҡалдың. Шул саҡта ниндәй тойғолар кисергәнең хәтерендәме?**

- Һеҙ вокзал яғына табан алға атланығыҙ. Мин түмәр кеүек баҫҡан урынымда ҡатып ҡалдым. Аҙым һайын араларыбыҙ алыҫая, бына өй мөйөшөнә барып еттегеҙ. Артығыҙҙан илап йүгерерҙәй булып, үҙ-үҙемде көскә тыйып торам. Шул ваҡыт, Әхмәр ағай, һин туҡтап, ҡапыл миңә боролдоң да, йылмайып, йоҙроғондо күрһәттең: бирешмә, йәнәһе. Эйе, һин белә инең минең хәлде, тоя инең. Бала сағым менән ошо рәүешле Өфө урамында хушлаштым. Дөрөҫөрәге, Өфө урамында илап тороп ҡалды бала сағым. Һеҙ кинәт боролоп, бейек йорттоң мөйөшөн үтеп, юҡ булдығыҙ. Шулай итеп, минең икенсе тормош, оло тормошом башланды.

**Унын ҡарауы, Әхиәт, һинең шул көндән еңел дә булмаған, сихри ҙа, ҡатмарлы ла, мөғжизәле лә, мәшәҡәтле лә, ҡыуанысла ла тормош юлың башланды. Мин һәр ваҡыт һинең ихтыяр көсөңә һоҡландым. Был сифатыңды мин бигерәк тә Сибайҙа сәнғәт училищеһын асҡанда, Өфөләге ташландыҡ ағас биналағы музыка мәктәбе урынына заман талаптарына тап килерлек мәшһүр ҡурайсы, остаз Әҙеһәм Исҡужин исемендәге Балалар сәнғәт мәктәбен төҙөгәндә нығыраҡ тойҙом. Ҡайһы ваҡыт: "Уны мин ҡурайҙа уйнарға өйрәттем бит әле", - тип ғорурлыҡ тойғолары ла кисерәм. Эйе, мин һине ҡурайҙа уйнарға өйрәттем һәм һин бөгөн миңә ҡарағанда ҡурайҙа һәйбәтерәк уйнайһың. Был - минең дә еңеүем. Бына хәҙер 60 йәшеңә лә еттең. Шундай ҡустым булыуына үтә лә шатмын, ана шулай кешеләрҙе, халҡыңды, туғандарыңды, мине лә ҡыуандырып йәшә!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

# ӘХИӘТТЕҢ ЭШЕ БЫНЫҺЫ ЛА



**Ошо көндәрҙә Балалар сәнғәт мәктәбендә Әҙеһәм Исҡужин исемендәге VII Асыҡ ҡала ҡурайсылар конкурсы булып уҙҙы. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, күренекле ҡурайсы-педагог, башҡорт халҡының рухи мәҙәни мираҫын һаҡлауға һәм үҫтереүгә ҙур өлөш индергән халыҡ йырсыһы Әҙеһәм Исҡужиндың хәтерен мәңгеләштереүгә йүнәлтелгән сарала Өфөнән генә түгел, республика райондарынан, хатта күрше өлкәләрҙән дә 50-нән ашыу ҡурайсы ҡатнашты.**

Был ҡурайсылар конкурсы үҙен ярыш майҙансығы ғына түгел, ә оҫталыҡты камиллаштырыу мәктәбе лә тип танытты. Ҡатнашыусыларҙы профессионалдар - Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың халыҡ артисы Юлай Ғәйнетдинов, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Әхиәт Ғәйетбаев, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Таһир Хәмитов, шулай уҡ уҙған йылдарҙа Гран-при яулаусылар Иҙел Аралбаев һәм Шамил Күсәмишев баһаланы. Баһалап ҡына ҡалманы, кәңәштәрен бирҙе, оҫталыҡ дәресе үткәрергә лә мөмкинлек тапты. Конкурсты ойоштороусылар - Өфө ҡала хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралығы, Әҙеһәм Исҡужин исемендәге Балалар сәнғәт мәктәбе был сараның матди дәртләндереү өлөшөн лайыҡлы тәьмин итеүҙе хәстәрләһә, ойоштороорға ярҙам итеүселәр - Республика халыҡ ижады үҙәге, Ҡала мәҙәни-ял итеү үҙәге, Башҡортостандың Ҡурайсылар союзы, Өфө ҡала башҡорттары ҡоролтайы шулай уҡ ҡатнашыусыларҙы маҡтау һүҙҙәре һәм үҙҙәренең бүләктәре менән баһаланы, күтәрмәләне. Ғәҙел баһалар алып, ихлас ҡотлау һүҙҙәре ишетеп таралышты барыһы ла.

Шарттар буйынса, 16 йәштән өлкәндәр категорияһында ҡатнашыусыларға инструменталь әҫәрҙәр уйнауҙан тыш, оҙон халыҡ йырҙарын да башҡарырға кәрәк ине. Һәм ошо шартты юғары кимәлдә атҡарып, Гран-приҙы Силәбе өлкәһенән Рифат Исҡужин яуланы. Ул Әбйәлил районында тыуып-үҫкән. Бөгөн Магнитогорск ҡалаһында йәшәй, металлургия комбинатында экскаватор машинисы булып эшләй. Камил Вәлиев исемендәге Сибай сәнғәт колледжының ҡурай класын тамамлаған. Йыр буйынса махсус белеме юҡ. Үҙенең әйтеүенсә, йөрәгендә - ҡурай моңо һәм башҡорт халыҡ йырҙары. Ошо һөйөүе, таланты был юлы оло баһалауға лайыҡ булды ла инде.

***✓ Яҙыусының барлыҡ хикәйә, повестары реаль тормош ваҡиғаларына ҡоролһа, был әҫәре бөтөнләй икенсе юҫыҡта. Әҙип ҡулланған алым тип әйтәйемме, форма тип әйтәйемме, бөгөнгө башҡорт прозаһында юҡ.***

# АВТОР ТУРАҺЫНДА

Түңәрәк аҡ йөҙлө, аҡһыл төҫтәге һирәк сәсле, ерәнһыу керпекле, киң маңлайлы, кәүҙәгә тәпәш, әммә йыуантаҡ бабайымды (әсәйемдең өлкән ағаһы) мин үҙемде белә башлағандан бирле беләм. Әсәйем тарафынан да, атайым тарафынан да уға иғтибар ҙур: береһе ағай тип өҙөлә, икенсеһе ҡайнаға тип өтәләнә. Өҫтәлдән самауыр төшмәй, кистәрен бал балы ултыртыла. Бабайым балыҡ ярата, шуға ла уның был йомшаҡлығын яҡшы белгән атайым көн дә тиерлек бер биҙрә балыҡ алып ҡайта (ул саҡта ау менән балыҡты ауылда бер Мәүлимбирҙе бабай ғына тота торғайны, бөгөнгө һымаҡ бер кем дә йылым менән йөрөмәне, шуға ла ауыл эргәһенән генә аҡҡан Еҙемдә балыҡ күп ине. Атайым эшкә киткәндә Мәүлимбирҙе бабайға балыҡ кәрәк икәнен әйтеп китә, кисен алып ҡайта). Әсәйем йәшелсә баҡсаһындағы ҡойо эргәһендәге тәпәш өҫтәлдә таҙарта. Бер өлөшөн кис һыйын ҙур табала ҡыҙҙыра, икенсеһен, күберәген, икмәк һала торған оло мейескә ут яға ла, күмерен тартып, суйын сөгөнгә тултырып, төнгөлөккә ултырта. Уныһы - иртәнге ризыҡ. Һөйәктәренә тиклем майҙа ҡурылып бешкән ул балыҡтың тәмлелеге! Бабайым ҡәнәғәт, маҡтай-маҡтай ашай, үҙе ихлас, күңелсәк, шаян.

Үҫә төшөп, уҡырға барғас, бабайым уҡыуым менән ҡыҙыҡһына, ҡайһы предметты яратыуым хаҡында һорай. Юғарыраҡ кластарҙа инде ниндәй китаптар уҡыуымды белешә, яҡшы уҡырға, ваҡытты бушҡа уҙғармаҫҡа, маҡсатлы йәшәргә, художестволы әҙәбиәт менән дуҫ булырға өндәй. Туғыҙ-унынсы кластарҙа мин уның билдәле яҙыусы икәнен белә инем, гәзит-журналдарҙа хикәйәләрен, хикәйәттәрен уҡыйым. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Хәҙисә апай, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Мәрүә апайҙар йыш ҡына уның хикәйәләре, хикәйәттәре буйынса диктант, инша яҙҙыра, авторы - беҙҙең яҡташ, ошо класташығыҙҙың бабаһы, тип миңә күрһәтә. Бындай саҡтарҙа башым түбә таҡтаһына тейерҙәй булып ғорурланып ултырам...

Өфөләге фатирҙарында китаптарының күплегенә хайран ҡала торғайным. Унда башҡорт, рус, башҡа телдәрҙә туғандаш, донъя әҙәбиәте классиктарының томдары, әҙәби тәнҡит, фольклор, философия буйынса китаптар, сәйәсәт, театр, кино, һынлы сәнғәт, скульптура, рәссамдарҙың альбом-каталогтары, ҡалын-ҡалын энциклопедиялар, һүҙлектәр... Бындай миҡдарҙағы китаптар беҙҙең мәктәп китапханаһында ла булмағандыр.

Китапханаһына бәйле бер ваҡиға, дөрөҫөрәге, минең һорауыма уның яуабы иҫтә. Һигеҙенсе класта уҡығанда булһа кәрәк, атайым менән уларға килдек. Ҡышҡы каникул мәле ине. Ниндәйҙер яңы сыҡҡан әҙәби китапты кәштәнән һурып алып, ҡараштыра башланым. Шул мәл әбейем сәй эсергә саҡырҙы. Мин китапты диванға һалдым да ванна бүлмәһенә ҡул йыуырға йүнәлдем. Бабайым минең арттан: "Китапты урынына ҡуй!" - тине ҡәтғи тауыш менән. Мин йәһәт кенә боролоп әлеге китапты алған еремә тыҡтым. - "Бында алты меңдән ашыу китап, килгән һәр кем алған китаптың урынын бутаһа, мин үҙемә кәрәген нисек табам? Мин уларҙың ҡайһыһы ҡайҙа тороуын ятлап бөткәнмен. Алғанһың икән, урынына ҡуйырға ғәҙәтлән".

- Һалып ҡына торҙом бит, сәйҙән һуң алыр инем, - тип мөңгөрҙәнем. Ғүмерлек һабаҡ булды ул һүҙҙәр минең өсөн, китапты ғына түгел, ғөмүмән, алған, ҡулланған, тотонған һәр әйберҙе урынына һала барырға өйрәтте...

Икенсе килгәнемдә, нисектер ҡыйыуланып: "Был китаптарҙың барыһын да уҡыныңмы?" - тип һораным. "Үҙемә кәрәген уҡыным", - тине. "Алты меңдән нисәүһе кәрәк булды инде?" - тип ныҡышам. "Бөтәһе лә", - тине бабайым. Мин ошоға тиклем дә, аҙаҡ та бындай бай китапхананы бүтән бер кемдә лә күргәнем булманы.

Юғары уҡыу йортонда математика факультетын тамамлаһам да, әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыныу, бөтә буш ваҡытта художестволы китап уҡыу уның йоғонтоһолор тип уйлайым - ғүмерлек ғәҙәткә әйләнде. Алты мең үк булмаһа ла, байтаҡ китап йыйылды. Һатып алып уҡый барам, кәштәгә теҙә барам...

Бабайым илле йәшен тултырғас та фажиғәле рәүештә һәләк булып ҡуйғас (юл аша туҡталышҡа сыҡҡанда машина бәреп китә), китапханаһын улы менән ҡыҙы бүлешеп алды. Әйткәндәй, уларға ла китап ене ҡағылғайны - аталарының өлгөһө. Күп өлөшөн үҙҙәре уҡыған мәктәптәргә бүләк иттеләр. Ә бына ҡулъяҙмаларын - архивын үҙемә алдым. Уларҙы яйлап барлап, танышып, төрлө йыйынтыҡтарҙа, альманахтарҙа донъя күргәндәрен бер яҡҡа, сыҡмағандарын бер ерҙә туплап барҙым. Ул бер нисә көндә генә тамамлана торған эш түгел, байтаҡҡа - айҙарға, йылдарға һуҙылды. Хәйер, үҙем дә әллә ни ҡабаланманым. Һөҙөмтәлә бер-бер артлы өс китабын - хикәйәләр, повестар, шиғырҙар, әҙәби тәнҡит мәҡәләләрен нәшер итеп булды. Ваҡыт-ваҡыт ҡалын папкаларҙы, дөйөм дәфтәрҙәрҙе, гәзиттәргә төрөлгән ҡулъяҙмаларҙы аҡтара торғас, яңы әҫәрҙәре лә килеп сыға тора, башланғандары, ташланғандары, герой-персонаждар теҙмәһе, уҡтар менән сыбарланған биттәр (сюжет-композиция ҡоролмаһы, әҫәрҙәрҙең график кәүҙәләнешелер инде) осрай. Шул ваҡытҡа тамамларға тейешмен, эш бара, ҡәнәғәтмен, йәки бармай, оҙаҡ тотона алманым, тигән үкенесле яҙмалар ҙа бар...

Шуныһы шатлыҡлы, әҙәби тәнҡит "ҡуҙғалды": уның дөйөм ижады, донъя күргән әлеге әҫәрҙәре хаҡында матбуғатта мәҡәләләр, рецензиялар, иҫтәлектәр, хәтирәләр, тора-бара күләмле монографиялар яҙыла башланы. Ҡәләм оҫтаһының яңынан тыуыуы ине был, уның әҙәби-ғилми мираҫын яңы күҙлектән барлау, баһалау ине. Үкенескә, һуңлабыраҡ ҡайттыҡ был ижадҡа, үҙе күрә алманы, ғәҙел баһа ишетә алманы...

Бөгөн мин әҙәбиәт һөйөүселәргә бабайымдың ҡулъяҙмалары араһынан табылған хикәйәһен (әҫәр, бәлки, повесть булараҡ уйланғандыр ҙа) тәҡдим итәм. Ул мин туплап сығарған йыйынтыҡҡа эләкмәне, һуңыраҡ таптым. Уҡып сыҡҡас, әҫәрҙе... тамамланмағандай тойҙом. Герой өйөнән сыға, әммә тәғәйен еренә барып етмәгән, һаман китеп бара һәм уның ҡасан барып етере билдәһеҙ. Үкенескә, ҡулъяҙманың артабанғы биттәрен, күпме эҙләһәм дә, таба алманым. Әллә өлөшләп-өлөшләп ташығанда берәй ерҙә төшөп ҡалған, әллә башҡа ҡағыҙҙары араһына инеп киткән. Икенсе уй ҙа килеп ҡуя башҡа: әҫәрҙе ослап өлгөрмәүе лә бар, яңынан ҡайтыу маҡсатында һалып ҡуйыуы ла ихтимал...

Йәнә шуны өҫтәргә кәрәктер: яҙыусының барлыҡ хикәйә, повестары реаль тормош ваҡиғаларына ҡоролһа, йәғни социалистик реализм методына нигеҙләнһә, был әҫәре бөтөнләй икенсе юҫыҡта. Әҙип ҡулланған алым тип әйтәйемме, форма тип әйтәйемме, бөгөнгө башҡорт прозаһында юҡ, һәр хәлдә күпме уҡып та әлегә тиклем ундайҙы осратҡаным булманы. Ул Франц Кафканың "Замок" һәм "Процесс", Коба Абэның "Женщина в песках" романдарын хәтерләтә, һәр хәлдә, оҡшашлыҡ бар. Әлбиттә, һүҙ авторҙың яҙыу оҫталығы йәки юғары художество кимәле хаҡында бармай, ә геройҙың йәмғиәттә юғалыуы, ә йәмғиәттең уны аңламауы, тормоштоң абсурдлығы хаҡында. Кеше тормошта әллә күпме кеше менән аралашып йәшәһә лә, ул барыбер ҙә япа-яңғыҙ, яҡлаусыһыҙ, һаҡлаусыһыҙ һәм, ҙурҙан ҡупҡанда, уның бер кемгә лә кәрәге юҡ. Хәйер, мин алғараҡ киттем, әҫәрҙе уҡыусы үҙе баһалар.

**Әмир ӘМИНЕВ.**




* * *

Әсләмдең: "Район үҙәгенә барыр өсөн ошонда төшөргәме?" - тигән һорауына водитель: "Төшөргә булалыр, тик бынан урау түгелме икән? Ошо тирәлә икәнен пассажирҙарҙан ишеткәнем бар инде", - тип яуапланы.

- Уның ҡайҙа икәнен теүәл генә белмәгәс, бынан ураулығын ҡайҙан беләһегеҙ һуң?

Водитель яурындарын һикертте лә, әллә уңайһыҙланып, әллә Әсләмдең һорауына йәне көйөп, ҡарашын ситкә алды. Ҡаҙҙыҡы ише оҙон муйыны буйлап күмәгәйе үтте, яҫы усы менән етеү сәстәрен һыпырҙы.

- Бында ҡалмаһаң, әйҙә, иптәш булып киләһе туҡталышҡа тиклем бар. Кем белә, бәлки, унан яҡыныраҡтыр.

- Юҡ, ошонда төшәм, ошонда төшөргә тинеләр, - Әсләм йәнә туҡталыш исемен һораны водителдән, "Эйе, шул", тип ыңғай яуап алғас, рюкзагын арҡаһына ташланы. - Ошо маршрутта йөрөйһөгөҙ, ә район үҙәгенең ҡайҙа икәнен дә белмәйһегеҙ.

- Мин бит тик ошо маршрутта ғына йөрөйөм, ул яҡҡа сыҡҡаным юҡ.

Әсләм өндәшмәне. Төшһөн, нишләп "водителгә иптәш" булып барырға тейеш һуң әле? Бараһы еренә бөгөн барып етергә тейеш тә. Иртәгә уны район үҙәгендә мөһим эш көтә. Водитель, ярай, мәйелең, тигәндәй, йәнә яурындарын һикертте, оҙон муйыны буйлап йәнә күмәгәйе күтәрелде һәм артабан һүҙ ҡуйыртып тормай, ҡуҙғалып та китте.

Туҡталышта Әсләмдән башҡа берәү ҙә төшмәне. Хәйер, кем төшһөн, һуңғы өсмө, дүртме туҡталышты япа-яңғыҙы ғына килде бит. Водитель автовокзалда уҡ, кеше аҙ, биш-алты пассажир өсөн маршрутка сыҡмайым, тип юлға ҡуҙғалмаҫҡа ла ниәтләнгәйне, урта йәштәрҙәге бер уҫал, ирҙәрсә ҡалын тауышлы тәтәй ҡатын менән таяҡҡа таянған телдәр ҡарсыҡ ҡырталашып, билет алғанбыҙ, алып барырға тейешһең, юҡһа, начальнигыңа инәбеҙ, тигәс кенә сигенде. Бәлки, инәлтеп, баһаһын күтәрергә генә теләгәндер. Ә теге ике бисә әллә ни алыҫ китмәне, бер нисә туҡталыштан һуң төшөп тә ҡалды. Был яҡҡараҡ килһәләр, Әсләм район үҙәгенә алып барған юлды, әлбиттә, уларҙан һорашыр ине. Улар төшмәҫ элек һорамағанына үкенде лә бит, тик һуң ине. Моғайын да, ауылдаштарылыр, әммә Әсләм уларҙы танымай. Күрше ауылдыҡылар булыуы ла ихтимал.

Туҡталышта кеше юҡ. Аптыраны Әсләм. Ярай, унан башҡа төшөп ҡалыусы булманы, ти, ә теге яҡҡа ултырып китеүсе лә юҡ бит. Белеүенсә, автобус ары киткән һайын ауылдар йышая, унан ҡалалар башлана, кешеләрҙең дә барып-ҡайтыу-йөрөүҙәре артырға тейеш. Ә юҡ...

Өс яғы бетон коробка-ҡоролманың эсе бысраҡ, һейеп, хатта оло ярау яһап, стеналарына оятһыҙ һүҙҙәр яҙып, шәрә ҡатын-ҡыҙ һындары төшөрөп бөткәндәр. Ул һындар ҙа кеше анатомияһын бөтөнләй боҙоп, дөрөҫөрәге, белмәй, үтә примитив һәм тупаҫ яһалған. Башланғыс синыф балаһы ла шулай төшөрмәҫ. Хәйер, йәштәре оло булһа ла аңдары шул башланғыс синыфтан ары китмәгәндер инде. Һыйыр, аттар ҙа кергән - тиҙәктәре өйөлөшөп ята. Ямғырҡар яуһа, ел-буран булһа нисек кереп ышыҡланалар икән һуң был хәшәрәткә, тип аптыраны Әсләм. Нишләйһең, беҙҙең ысынбарлыҡ шулай инде, тип уйланы йәнә, үҙешмәкәр рәссамдарҙың ижад өлгөләрен күҙҙән үткәргәс. Ҡайҙалыр, нимәләр яҙырға, төшөрөргә беҙҙең ҡул ҡысып ҡына тора, һәр ерҙә үҙебеҙҙең барлыҡты теркәп китергә өйрәнгәнбеҙ. Уның башҡаларға кәрәкме-юҡмы, яҡшымы-насармы икәнен уйлау юҡ.

Ҡағыҙҙар ҙа йәбештерелгән ҡоролма стенаһына. Һыҙылып, мөйөштәре йыртылып, яндырылып бөткән төрлө ҙурлыҡтағы ул ҡағыҙҙарҙың йөкмәткеһе: һыйыр, башмаҡ, ат, тай юғалған, шуларҙы табырға ярҙам һорайҙар, малдарының йәшен, төҫөн, башҡа билдәләрен, ауылдар исемен, үҙҙәренең исем-фамилияларын яҙғандар. Йәштәр бер-береһенә сәләм ҡалдыра, үҙенең ауылға шул көндә ҡайтасағын белдерә, ир-ат исемдәре менән ҡатын-ҡыҙ исемдәре араһына ҡушыу билдәләре ҡуйылып тигеҙ була мөхәббәт тигән яҙыуҙар ҙа әллә күпме. Һәм уларҙың һәр ҡайһыһына һыу буйы аңлатма, шарж, һүрәт-һындар...

Ҡарай-тикшерә торғас, Әсләмдең күҙе бер иғланға туҡталды. Ул хатта иғлан да, белдереү ҙә түгел, ә судҡа саҡырыу ине. Шунса йылдың шунса айы, шунса көнөндә (Әсләм уҡыуҙан туҡтап, бөгөнгө числоны иҫенә төшөрҙө лә, судтың бынан ай элек үк үткәнен иҫәпләп сығарҙы), район үҙәгендә суд буласағы һәм Әсләмдең (фамилияһы, исеме, атаһының исеме, ауылы, урамы, йорт һаны тулыһынса бар) ошо судҡа саҡырылыуы, килмәй ҡалһа, суд ултырышы унһыҙ ғына үтәсәге хаҡында яҙылғайны. Аптырау ғына түгел, иҫе китте Әсләмдең, тамағы кибеп, быуындары хәлһеҙләнде хатта. Ай элек үк саҡырғандар, ә ул саҡ китеп бара. Алманы ул бер ниндәй ҙә ҡағыҙ. Юлда юғалдымы, әллә почтала ятамы икән ни повесткалары? Әллә алып, әсәһе йәшереп ҡуйҙымы? Улай тиһәң, бар, белешеп ҡайт, нишләп һаман саҡыртмайҙар, теге хәлгә байтаҡ ваҡыт үтте, һинһеҙ генә һине ғәйепләп ҡуймаһындар, тип үҙе ебәрҙе. Ә ниңә бында элгәндәр? Аңлауынса,

повестканы бит килтереп ҡулына тотторорға ла, тапшырыуҙары тураһында ҡултамғаһын алырға тейештәр ине. Телефоны ла бар - һис юғы шылтыратырға мөмкин. Нишләргә? Кире борологамы? Ай элек үткән судҡа нимә тип китеп бара инде? Суд ҡарары сыҡты, һуңланығыҙ, йөрөмәгеҙ, тип кенә әйтәсәктәр. Юҡ, бер сыҡҡас, барып етергә, инергә, асыҡларға, повестканы алмауы хаҡында белдерергә кәрәктер. Юҡһа, килмәне, күренмәне, саҡырыуҙы инҡар итте, тип ғәйепләүҙәре ихтимал. Ирҙәме, һуңмы барыбер саҡырасаҡтар, унан йәнә юлға сығырға тура киләсәк. Эйе, бында еткәс кире боролоп булмай инде.

Әсләм ҡағыҙҙы һаҡ ҡына ҡуптарып алып түш кесәһенә тыҡты ла, бетон ҡоролманың артына сыҡты. Тапалып ятҡан юл юҡ, һирәк-һаяҡ үткән һуҡмаҡ ҡына төҫмөрләнә. Әллә мал йөрөгән, әллә кеше аяғы. Тәрән көрһөндө, тирә-яғына ҡараш йүгертеп үҙен оҙон юлға әҙерләне, баш осондағы ҡояшҡа ҡарап алды, рюкзагының ҡайышын ныҡыраҡ ҡыҫты. Яҡты күҙҙә барып етергә тейеш, әсәһенең әйтеүенсә, ун-ун ике саҡрым ара инде. Ауылда етенсеме, һигеҙенсеме класта уҡыған саҡта бер генә барғайны район үҙәгенә. Хәрби комиссариатҡа, медицина тикшереүенә. Унда ла мәктәпме, әллә колхозмы автобусына теҙеп йөрөтөп алып ҡайттылар. Шунан бирле барғаны юҡ. Ниеҫтер тура килмәне. Армияла йөрөп ҡайтты, уҡырға керҙе, ә бына район үҙәгенә башҡаса бер ҙә барырға форсат сыҡманы. Быуна нисә йылдан һуң саҡ китеп барыуы. Был юлы бөтөнләй икенсе маҡсат менән.

Атлай торғас йәнә бер уй башына килә Әсләмдең. Тукталышта, ғәҙәттә, ауыл була, дөрөҫөрәге, ауыл эргәһенә яһайҙар тукталышты. Унда йәшәгән халыҡ юлға сығып, үҙенә кәрәк тарафҡа юлланыр, барған еренән ауылына әйләнеп ҡайтыр өсөн. Ә бында ауыл юҡ, һәр хәлдә Әсләм һаман күрмәй. Алда төҫмөрләнгән урман артында йәки эсендә генә булмаһа. Кеше көн итмәгән ергә тукталыш ҡороп ҡуйғандар булып сыға түгелме? Улай тиһәң, был яҙыу-һыҙыуҙар ҡайҙан? Уларҙы кем йәбештергән? Йәштәрҙең бетон будка эсенә кереп теләһә нимә яҙып, төрлө һүрәттәр төшөрөүен нисек аңларға? Яҡын-тирәлә ауыл булмағас, уларҙы кем ҡалдырған? Әсләмгә тәғәйенләнгән иглан-саҡырыуҙы ла кемдер килтереп элгән бит район үҙәгендә урынлашҡан суд бинаһынан. Тик кем? Суд хеҙмәткәре түгел бит инде. Улар халҡы былдай түбәнлеккә төшә буламы? Тимәк, ауыл бар, мал-тыуар эҙе лә булғас, ул йыраҡ түгел - мал ауылдан йыраҡ китмәй.

Һуҡмаҡ буйындағы ялан тиҙҙән бөттө лә, ваҡ ҡыуаҡлыҡтар, үләне ап-аруҡ ҡуйы һәм бейек булып үҫеп өлгөргән ерҙәр китте. Бер аҙҙан берәм-һәрәм булһа ла ҡайын, ваҡ имән, ыршынан торған ҡатнаш ағаслыҡ башланды. Әммә ул оҙаҡламай тығыҙ ағаслы ысын урманға килеп терәлде.

(Дауамы бар).

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "БАЙЫҠ" ТЕЛЕВИЗИОН БӘЙГЕҺЕ...

## бөтөн республиканы башҡортса бейетә

**"Байыҡ-2023" республика башҡорт бейеүе телевизион бәйгеһенең Гала-концерты үтте. 2008 йылдан алып үткәрелгән был сара бейеү ижады өлкәһендә әһәмиәтле проекттарҙың береһе булып тора, башҡорт хореография сәнғәтен һаҡлауға һәм популярлаштырыуға ҙур өлөш индерә. Телеконкурста йыл һайын 500-ҙән ашыу бейеүсе сығыш яһай. Ошо ваҡыт эсендә унда ун меңгә яҡын бейеүсе ҡатнашҡан, ике йөҙҙән ашыу яңы бейеү ҡуйылған. Ғәҙәттәгесә, "Байыҡ" Яңы йыл байрамдарында Башҡортостан юлдаш телевидениеһынан күрһәтеләсәк, әлегә быйылғы "Байыҡ"тан алған тәьҫораттары менән бейеүселәр һәм баһалама ағзалары үҙҙәре уртаҡлаша.**



***Илгиз НИҒӘМӘТУЛЛИН, бейеүсе, хореограф, Күгәрсен районы:*** Бейеү - ул беҙҙең ғаиләнең йәшәү рәүеше һәм беҙҙең бейеүсе һәм хореограф булараҡ бөтөн ижади ғүмеребеҙ "Байыҡ" менән үрелеп бара. Үҙем профессиональ артист булараҡ 2009 йылда беренсе тапҡыр ҡатнашҡайным, ҡатыным Илүзә Ниғәмәтйәнова менән дуэт булараҡ та, аҙаҡтан инде балалар менән бергә бейеп, ғаилә ансамбле булараҡ та Гран-приға лайыҡ булдыҡ. Күгәрсен, Мәләүез ансамблдәре менән өлкәндәр араһында ла, балалар араһында ла еңеүсе булдыҡ.

Әле беҙ тағын Күгәрсендә эшләп йөрөйбөҙ һәм әлеге мәлдә мин балалар ансамбле менән эш башлап торам. Яңыраҡ ҡына йәштәре 50-не үткән апайҙар килде, бейергә, "Байыҡ"та ҡатнашырға теләйбеҙ, тиҙәр. Бына халыҡтың шулай үҙе үк дәртләнеп йөрөүендә "Байыҡ"тың өлөшө ҙур бит. Ошолай 3 йәшлек баланан алып 80-де уҙған өлкәндәр ҡатнашырлыҡ ниндәй бәйге тураһында ишеткәнегеҙ бар һеҙҙең? Был бит уникаль күренеш.

Шунан һәр бәйгенең кешене йәлеп итә торған яғы ла була - унда ғәҙел баһа бирелһен, енеүсе исем өсөн билдәләнмәһен, ә ысынлап тырышлыҡ һәм ныҡышмалылыҡ менән яуланһын. "Байыҡ"ты ойоштороусыларҙың ҡуйған талаптары башҡорт бейеүен үҫтереүгә эшләй, унда башҡортса ерәнә еткереп бейей белмәгән кеше үтеп китә алмай. Хатта кемдең нисек бейегәнен телевизор ҡараусы үҙе үк күреп, ул үҙе был бейеүсегә "ҡуйған" баһаның жюри баһаларына тап килеүен күреп, ғәҙеллекте тоя. Бәләкәй генә ауылдан килгән коллективтың матур бүләктәр менән бүләкләнеүе, мәҫәлән, шулай уҡ яңы үрҙәргә этәргес. Беренсе турға бик үк килешле булмаған сәхнә костюмдарында килһәләр, икенсе турға район үҙе кейем тегергә ярҙам итә. Сөнки улар ҙа аңлай, Өфө сәхнәләрендә улар районын да данлап тора ла инде. Ошо яҡтан да ҙур эш эшләй "Байыҡ". Шуға ла Рита Ришат ҡыҙы Өмөтбаеваға һәм уның командаһына ныҡ рәхмәтлебеҙ. Етәкселәр бәйге аша беҙҙең эшебеҙҙе күрә, ярҙам да итә башлай.

Ни генә тиһәк тә, беҙ "Байыҡ" менән йәшәп өйрәндек, ул беҙҙе рухландыра, мәҙәниәтебеҙҙе үҫтерә. Талантлы хореографтар килә, улар ҙа ойоштороусыларҙың талаптарына яуап бирерлек бейеүҙәр ҡуйырға тырыша - былар барыһы ла башҡорт бейеүен киләсәк быуынға бар асылында һәм төп нөсхәһендә тапшырырға ярҙам итәсәк.

***Фәнил ӘСӘҘУЛЛИН, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, "Байыҡ-2023" бәйгеһе режиссеры:*** "Байыҡ" телевизион бәйгеһе бөгөнгө көндә бөтөн республиканы башҡортса бейетә. 16 йыл буйына рейтингы төшмәй, яңы бейеүҙәр тыуа, бейеүселәр араһында ла йылдан-йыл яңы исемдәр асыла. Быны сәбәбе шунда - беҙ сал тарихлы халыҡ, тарихы бай боронғо халыҡтың бейеүе лә оҙон ғүмерле, сөнки беҙҙең күрһәтер нәмәбеҙ бар.

Башҡорт бейеүендә дәрт тә, һағыш та, һөйөү ҙә, шаярыу ҙа, яугирлыҡ та, матурлыҡ та һ.б. бар. Мәҫәлән, Кавказ халыҡтарының барыһы ла яраткан бейеүҙәрендә яугирлыҡ та, һөйөү ҙә сағыла. Ә беҙҙә улай түгел. Тематик йәһәттән дә хореографтарға йәҙәп йөрөп эшләрлек киңлек бар. Шулай ҙа һәр төбәктең, һәр районның, хатта ауылдың бейеүе үҙенә хас. Бер ерҙә өҫтөнлөк иткән элементтар икенсе ерҙә булмауы мөмкин. Бейеү һалғанда ошо ерлеккә бәйле ошо үҙенсәлектәрҙе аңлап эш итеү ҙә - ярты уңыш. "Байыҡ"тың төп үҙенсәлектәренең береһе лә тап ошо халыҡсанлыҡ бит. Юғары профессональ кимәлгә еткереп башҡарылған халыҡсан бейеүҙәр уның юғарылығын билдәләй. Улай ғына ла түгел, тамашасының күңелен байыта, мәҙәниәтебеҙҙе күтәрә, бейеү сәнғәтен үҫтерә.

"Байыҡ"тың уңыштарын йыйыр мәле алда әле. Элек учалылар, әбйәлилдәр, баймаҡтар шәп бейей ти инек, хәҙер башҡа районлар ҙа әүҙем ҡуҙғала башланы. Был бигерәк тә балалар араһындағы "Байыҡ" бәйгеһендә асыҡ күренә. Шарандан балалар коллективы башҡорт бейеүе менән килһен әле! Башҡорт бейеүен бер бейегән бала унан айырыла алмай ул, ошо балалар үҫеп етһә, берәй 20 йылдан "Байыҡ" сәхнәһендә әллә ниндәй сәмле ярыштар барыр әле, бына күрерһегеҙ!

***Радик БАКИРОВ, "Саптар" өлгөлө хореографик ансамбле етәксеһе, "Байыҡ" бәйгеһе жюрийы:*** "Байыҡ" бәйгеһе, тәү сиратта, һәүәҫкәр бейеүселәр өсөн әһәмиәтле. Профессиональ бейеүсе былай ҙа гел камиллашыу өҫтөндә. Ә бейергә яратып, башҡа һөнәр эйәһе булыуға ҡарамаҫтан, ошо шөғөлөн дә ташламаған һәм бәйгегә сыҡҡан кеше иһә айырыуса маҡтауға лайыҡ. Улар хатта профессиональ бейеүселәрҙән бер ере менән дә ҡалышмай, тиеүселәр ҙә хаҡлы, сөнки бәйге уларҙы бер сәхнәлә ярыштырып, үҫтерә. Был бәйгегә килеүселәр һис кәмемәй. Мин үҙем бейеүсе һәм ололарға, балаларға бейеү һалыусы булараҡ, был халҡыбыҙҙың дәртле булыуы менән аңлатам. Сөнки йылдан-йыл бейеүселәр ҙә, бейеү ҡуйыусылар ҙа, бейеүҙәр ҙә күбәйгәндән-күбәйә.

Быйылғы "Байыҡ" яңы жюри составы менән айырылыбыраҡ торҙо. Яңы баһалаусылар менән бергә бәйгегә яңы һулыш индерҙеләр, тиген өмөттәмен. Ҡатнашыусылар әйтеүенсә, уларға беҙҙең менән эшләүе еңел булған. Бар кәңәштәргә ҡолаҡ һалып, икенсе турға тағы ла оҫтарып, камиллашып килеүҙәре өсөн рәхмәт уларға. Кем үтмәгән, уларҙы киләһе йылдарҙа күрербеҙ әле, сөнки бейеү сәнғәтенең матурлығы артында иҫ киткес ныҡышмалылыҡ, тырышлыҡ һәм физик көс ята. Балалар менән эшләгәндә лә ҡайһылар ауырлыҡты күтәрә алмай, китә, кемдәр ҡала, уларҙан инде шәп бейеүсе сығасаҡ.

Кемдәр Гала-концертта булған, күргәндер, быйыл шулай уҡ хореографтарҙы күрһәтеүгә лә ҙур урын бирелде. "Еҙ үксә"һе менән башҡорт бейеүенә лә, үҙенең ижадына ла һәйкәл ҡуйған Башҡортостандың халыҡ артисы Риф Ғәбитовҡа "Йылдың иң яҡшы ҡуйыусы-хореографы" номинацияһында төп бүләк тапшырылды. Ир-егеттәр бейеүенең күркәм өлгөһө булған "Еҙ үксә"не беренсе булып бейеүселәрҙең сығышын, "Байыҡ"ка тоғро ҡалып, йыл һайын бейеүҙәр һалған, район-ҡалаларҙа ансамблдәр менән эшләгән бейеүсе-ҡуйыусыларҙың "Гөлнәзирә"не бейеүен халыҡ һаман һөйләй. Кемдәр быны күрмәгән, уларҙың телевизорҙан ҡарау мөмкинлеге бар.

Ғөмүмән, "Байыҡ"тың беҙҙең халыҡты үҙе тирәләй ойоштора алыу һәләтенә һоҡланырға ғына ҡала. Республикаyның бөтөн коллективтарын йыйып, йыл һәҙәмтәләрен барлау - ул ҙур эш.

**Ләйсән ВӘЛИЕВА яҙып алды.**



ИНТЕРНЕТТАН



# БАШЫҢА КЕЙ

■ "СМ-Клиника" кардиологы Анастасия Фомичева белдереүенсә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмау өсөн туҡланыуға ла иғтибар итергә кәрәк. Сельд, бағыр, скумбрия, һөмбаш кеүек майлы сортлы балыҡ омега-3 кеүек майлы кислоталарға бай. Улар ҡандағы липидтарҙың кимәлен түбәнәйтә. Аҙнаһына 1-2 таптҡыр балыҡ ашау сәләмәтлек өсөн бик файҙалы. Был ҡан тамырҙары атеросклерозын булдырмай. Томат, кәбеҫтә, хөрмә, банан, анар, күрәгә, ҡара емеш, йөҙөм витаминдарға, микроэлементтарға бай. Йөрәк һау булһын тиһәгеҙ, көн һайын йәшелсә һәм емешеләкте 5 порция (яҡынса 500 гр) ашағыҙ. Йәшел тәмләткестәрҙә йөрәк "яратҡан" тимер, калий, магний, К һәм С витамины бар. Һарымһаҡты ла рационға индереү кәрәк, ул тәбиғи антиоксидант. Ҡарабойҙай, дөгө организмдан "насар" холестеринды сығара, тимәк, ҡан тамырҙарын таҙарта. Ҡарабойҙайҙа тимер күп, ул бигерәк файҙалы иҫәпләнә. Шулай уҡ зәйтүн майы ла сәләмәт туҡланыуға булышлыҡ итәсәк. Көнөнә 1 балғалаҡ ҡына зәйтүн майы ашау йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре хәүефен 15 процентҡа түбәнәйтә - был ғилми яҡтан раҫланған. Тоҙҙо тәүлегенә 5 грамдан артығыраҡ ашарға ярамай, ул ҡан баҫымын күтәреү сифатына эйә.

■ Миҙгелгә ҡарап, кәйефе үҙгәреүсе кешеләрҙең һаны байтаҡ ҡына икән, мәҫәлән, һыуыҡ яҡтарҙа йәшәүселәрҙең өстән бер өлөшө ошо тайпылыш менән яфалана. Физика-математика фәндәре докторы, профессор Виктор Лощенов әйтеүенсә, һалҡындар килеү менән кеше вакытын күберәк өйҙә үткәрә башлай. Был D витамины ҡытлығына килтерә. Әммә яҡтылыҡ та беҙҙең тормошта ҙур роль уйнай. Ҡояш нуры аҫтында тирелә төрлө физиологик процестар бара. Мәҫәлән, меланин бүленә, иммун системаһы әүҙемлеге яйға һалына. Ҡышын инфраҡыҙыл нурҙар нигеҙендә эшләгән саунаға йөрөү ҙә файҙалы, ти профессор. Был нурҙар тирене йылыта, матдәләр алышыныуы көсәйә. Ә бына йорттарҙы ультрафиолет нурҙары менән дезинфекциялау иһә кәрәк булмаған процедура, тип билдәләй Лощенов: "Өйҙә операция бүлмәһендәге кеүек стериль шарттар кәрәкмәй. Кешелә 500-ҙән ашыу төрлө типтағы микроб йәшәй. Әгәр ҙә уларҙы юҡҡа сығарһаҡ, урындарына башҡа, ауырыуҙарға килтереүсе ҡурҡынысыраҡтары киләсәк". Өйҙә көслөрәк ҡеүәтле лампа ҡуйыу иһә кәйефте күтәрергә ярҙам итәсәк. Ә бына төнгөләккә урамдан төшкән яҡтылыҡтан һаҡланыу өсөн ҡорғандарҙы тартыу кәңәш ителә. Ул мелатонин гормоны бүленеп сығыуын тотҡарлай, был гормон иһә кәйеф һәм сәләмәтлек сығанағы.

■ Трихолог һәм дерматолог Татьяна Егорова ҡышҡы башлыҡ ниндәй булырға тейеш, тигән һорауға асыҡлыҡ индерә. Түбән температурала баш тиреһендә ҡан әйләнеше насарая, сәс тамырҙарына файҙалы матдәләр етешмәй башлай, шуға ла башлыҡ кейеү мотлаҡ. Әммә ул үҙегеҙҙең баш үлсәменә тура килергә һәм ҡан әйләнешен боҙмаҫлыҡ булырға тейеш. Йөнлек тиреләренән тегелгән башлыҡтарҙы ла көн һайын кейергә ярамай. Тышта һыуыҡ саҡта енелерәк баш кейемен һайлау мотлаҡ, был баш тиреһе тын алһын өсөн кәрәк. Шулай уҡ йылы урынға ингәс тә башлыҡты сисегеҙ. Синтетик туҡымаларҙан тегелгән башлыҡтар тирләтә, ҡауаҡ барлыҡҡа килә.

КИТАБЕННАС

# БЕРЕНСЕ ҠОЙМАҠ ТӘМЛЕ БУЛДЫ!

**Ләйсән Сәлимова-Исҡужинаны студент саҡтарҙан беләм, беҙ Башҡорт филологияһы факультетының инглиз теле бүлегендә бергә уҡыныҡ. Ғафури ҡыҙы ижад менән әүҙем шөғөлләнә, төртмә телле шиғырҙар, кинәйәле әкиәттәр яҙа, журналдарҙа һәм онлайн йыш баҫыла. Уның әҫәрҙәре үҙенсәлекле, мажаралы булыуы, еңел уҡылыуы менән айырылып тора. Быйыл иһә "Китап" нәшриәтендә "Йәштәр тауышы" серияһында уның тәүге китабы донъя күрҙе. Ошо уңайҙан уны шылтыратып ҡотланым да, китабын уҡымаҫ элек уға ҡайһы бер һорауҙарымды яуҙырҙым. Уны "Киске Өфө" уҡыусыларына ла тәҡдим итәм:**



**➔ Ләйсән, һине тәүге китабың менән ҡотлайым. Ниндәй хистойғолар кисерәһең?**

- Хыялым ысынбарлыҡҡа әйләнде бит. Бына ул китап минең ҡулда. Әҫәр инде хәҙер үҙ яҙмышы менән йәшәйәсәк. Минең геройҙарым да. Ҡайһы саҡ уларҙан: "Мин яҙған яҙмыш менән риҙаһығыҙмы?" - тип һорағы килә...

**➔ Ә ҡасан һиндә яҙыусы булыу теләге тыуҙы әле ул?**

- Бала саҡтан шундай уй менән яндым. Китап уҡырға яратҡанданмы икән, үҙемдең дә сюжеттар ҡорғом килде.

**➔ Ә тәүге әҫәреңде иҫләйһеңме?**

- Бер класташ малайҙың шиғырҙар (хатта поэмалар) яҙа белеүенә көнләшә торғайным. Мин дә ойоҡбаштар бәйләгән ҡыҙҙар хаҡында яҙҙым, берҡатлы тойолдо. Тәүге ижад емешем "Аманат" журналында баҫылып сыҡты, етмәһә, исем-фамилиямда хата киткәйне... Шул хәтлем йәнем көйгәне иҫемдә ҡалған....

**➔ Китабың "Өмөтдар" тип атала. Әҫәреңдең идеяһы ҡалай барлыҡҡа килде? Ҡыҫҡаса һөйләп кит әле.**

- Беренсе өлөшө төҙәә хикәйә булараҡ яҙылды, "Бәйләнештә" селтәренә һалдым, уҡыусыларға оҡшаны һәм дауамын һоранылар. Идеяны бер танышым бирҙе. Ул килен булып төшкәс, ҡәйнә йортонда бер китап та булмауына, берҙән-бер китаптың өҫтәлде терәтеп торғанына аптыраған. Ошо ваҡиға тирәһендә ҡоролдо ла инде әҫәрем.

**➔ Ҡалай ҡыҙыҡ. Ә бына геройҙарыңдың береһе Италияла төрлө мажараларға эләгә. Бик ышандырырлыҡ итеп яҙғанһың, Италияла булғаның бармы?**

- Эйе, ҡәйнәм Италияла йәшәй.

**➔ Ниндәй яҙыусы булырға теләйһең? Яҙыусылыҡ эшендә иң мөһиме нимә һинең өсөн? Һәм иң ҡыйыны нимә?**

- Әлбиттә, әүҙем уҡылған ижадсы булғым килә. Уҡыусыларым минең китапты алһындар ҙа, бар донъяһын онотоп, минең геройҙарым яҙмыштары менән йәшәһендәр. Ә иң ҡыйыны - уйлап сығарыу түгел, ә ултырып яҙыу. Шунан уны баҫтырып сығарыу.

**➔ Тағы ниндәй әҫәр яҙғың килә?**

- Туве Янссон, Стругацкийҙар, Волков йә Джордж Мартин һымаҡ үҙ Йыһанымды тыуҙыраһым килә...

**➔ Фантаст?**

- Эйе, фэнтези, фантастика мине бик ылыҡтыра.

**➔ Ижадыңа яҡындарың ниндәй мөнәсәбәттә? Тормош иптәшең, ата-әсәйең, дуҫтарың...**

- Барыһы ла ыңғай ҡараштa. Төп таянысым - ул ирем. Ул минә кәңәштәр бирә, деталдәрҙе эшкәртергә ярҙам итә, сюжет линияларын төҙөшә.

**➔ Ҡалай шәп! Ижади кешегә шундай тыл булыуы бик мөһим бит!**

- Эйе, мин дә шулай уйлайым.

***

Артабан "Өмөтдар" менән танышам. Был тарихты бер һөйләм менән ни рәүешле атарға мөмкин? Нисек бер әхирәт яҡын әхирәтенең ирен үҙенә ҡаратҡанмы, йә һәр кемдең бәхеткә хаҡы бар, тип әйтергәме... "Өмөтдар" - ул өмөт менән йәшәүсене аңлата. Ысынында, беҙ бит һәр беребеҙ был донъяла өмөтдар. Тап өмөт йәшәүгә көс бирә, ауырлыҡтарҙы кисерергә ярҙам итә.

Ләйсәндең геройҙары идеаль түгел. Һәм был тәбиғи. Сөнки заманыбыҙ бөтөнләй камил булмаған осор. Идеаль булмаған ысынбарлыҡ идеаль булмаған геройҙар талап итә. Донъяны тик аҡҡа һәм ҡараға бүлеп булмай.

"Унда тәрән уйҙар юҡ ул...Һин бит тәрәнлек яратаһың..." - тине Ләйсән үҙе лә. Ләкин, ышанаһығыҙмы, юҡмы, был әҫәрҙе шул хәтлем йотлоғоп, бар эшемде ташлап, бер тынала уҡып сыҡтым. Үҙем филолог булараҡ (тамамланмаған юғары белемле булһам да), әҫәрҙең сюжеты ғына түгел, авторҙың яҙыу стиле, тел камиллығы, деталдәргә иғтибарлы булыуы, персонаждарҙы ҡылыҡһырлауы, эмоцияларҙы тасуирлауы - барыһы ла һоҡландырҙы. Ни өсөндөр мин китап уҡығанда иң беренсе шуларға иғтибар итәм...

"Өмөтдар" ғибрәтле повесть. Тормош төрлө көтөлмәгән боролоштары менән кешене һәр ваҡыт һайлау алдына ҡуйыуы, әммә һәр ваҡытта ла дөрөҫ юлға сығып та булмауы, ләкин ынтылыш булғанда, мөмкинлектәр табылыуы хаҡында. Бына, мәҫәлән, Алма. Һәләтле тәржемәсе, мәл шауҡымына бирелеп, хужаһының һөйәркәһенә әйләнә. Әммә ирҙең ҡатынынан һис тә китергә уйы юҡ икәнлеген белгәс, гәрлек кисерә, һәм ауыр хистәрҙән ҡотолорға теләгәндәй, осраҡлы осратҡан Наил исемле ауыл егетенә тәҡдим яһай. Егет албырғаһа ла, ҡыҙҙы кире ҡаҡмай. Әммә ауылда уларҙың мөнәсәбәттәре һынауға дусар ителә, аралары һыуына, ире эскегә бирелә, Алма хатта сит илгә сығып китергә мәжбүр.

Сит илдә лә уны күп күңелһеҙлектәр көтә. Гүмере ҡыл өҫтөндә ҡала, фәхишәләр менән притонға ла эләгә, төрлө ауыр эш менән шөғөлләнә, аҡсаһыҙ йонсой... Ахырҙа, Ариф тигән Пакистан егете менән йәшәй башлай.

Ә был ваҡытта уның әхирәте Гөлйемеш Наилды осратып, уға ғашиҡ була. Наил инде яңы тормош башлаған, эскеһен ташлаған, юғары уҡыу йортона уҡырға ингән, хатта мәктәптә инглиз телен уҡыта. Наил да Гөлйемешкә үҙ итә, бергә йәшәй башлайҙар. Әммә һунынан асыҡланыуынса, ул Гөлйемешкә Алманы күргән, һағыныуын шулай баҫҡан. Гөлйемеш быны аңлағас, Наилдың уны яратмағанлығын белгәс, бик ҡаршылыҡлы уйҙар биләүендә ҡала. Һәм, ахырҙа, әхирәтенә илгә ҡайтырға ярҙам итә, Наил менән осрашыуын ойоштора.

Ә бит тағы өсөнсө ҡатын-ҡыҙ персонажы бар - ул Әмилә. Бала саҡтан Наилгә ғашиҡ ҡыҙ. Тап ул араларҙы бутаусы, төрлө низағтар тыуҙырыусы. Һәйбәне алдына ғәйепһеҙ һәм бер ҡатлы ҡылана, әммә аҫтыртын ғына Алмаға ла, Гөлйемешкә лә ташлана - бик ҡурҡыныс ҡатын. Наилдың уныҡы булмаҫын белһә лә, кеше мөхәббәтен юҡ итергә әҙер.

Гөлйемеш тә ике ғашиҡтың ҡауышыуҙарына юл ҡуйһа ла, хистәренән баш тартырға уйламай. Сөнки уның ҡарынында яңы йән яралған.

Күрәһегеҙ, алдан әйткәнсә, повесть геройҙары бер ҡалыпҡа һалырлыҡ түгел. Әммә улар ҡыйыу, дыуамал, хаталарын аңларға әҙер - мин яратам шундайҙарҙы. Әлбиттә, теге йәки был ҡылыҡтарын ҡабул итеп булмай. Әммә аңларға мөмкин тип уйлайым. Сюжет динамикалы, хатта көсөргәнешле лә, Ләйсән уҡыусы иғтибарын ныҡлы контролдә тота.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әҙәбиәтебеҙ торғонлоҡ кисергән осорҙа шундай авторҙар барлығы күңелде күтәрә. Бөтәгеҙгә лә Ғафури һылыуы Ләйсән Сәлимова-Исҡужинаның "Өмөтдар" исемле тәүге китабын уҡып сығырға тәҡдим итәм. Ә курсташым ғына түгел, яҡын әхирәтемә тағы ла яңы әҫәрҙәр менән ҡыуандырыуын теләйем. Беренсе ҡоймағың бик тәмле булды!**

**Гөлшат ХАЖИЕВА.**

СӘХИФӘНӘН

# ПЕНСИЯҒА ТИКЛЕМ ЙӘШӘРГӘ!

**Яңыраҡ редакцияға бер ағай килде. Ғәҙәттә, беҙгә хат-хәбәр, ҡотлау килтерәләр. Былай ғына, хәл белешергә килгәндәре лә юҡ түгел. Был ағай ҙа килеү сәбәбен "былай ғына" тип аңлатты. Былай ғына, бушалағайымға йөрөгән кешеләрҙән түгел икәнен беләбеҙ. Шулай булып сыҡты ла: "Уй төйөнө" рубрикаһына бирерлек һәптеөк фекер орлоғо ташлап, уйға һалып китте.**

Кешенең пенсияға сығыу йәшен оҙайтыуҙы, меңәрләгән кеше кеүек, был ағай ҙа өнәмәй булып сыҡты. "Кеше бит ғүмер буйы ҡасандыр ошо пенсияһын ашайым, тип эшләгән. Бағзе берәү хатта тәүге пенсияһын да ҡулына алмай үлеп китә. Был - төптө ғәҙелһеҙлек. Хөкүмәт, исмаһам, ул кеше аласаҡ пенсияны уның тура варисҭарына түләһә, бик һәйбәт булыр ине лә бит. Ысынында ла шулай булырға тейеш - ошо пенсияһы өсөн күпме йылдарын, ваҡытын, йәшлек энергияһын һалған бит кеше... Һәм бер нәмәһеҙ ул дә кит, балаларыңды, ғаиләңде аҡсаһыҙ, таянысһыҙ, өмөтһөҙ ҡалдырып... Ошо һорауҙы хөкүмәт кимәлендә күтәрер кешеләр кәрәк, халыҡ аһын өҫтә закон сығарыусылар ишетһен ине", - тине.

Был ағай сығып киткәс тә ошо темаға күп баш ваттым. Уның һүҙҙәренең расрлығына тегенән-бынан дәлилдәр эҙләнем. Хәйер, дәлил эҙләп алыҫ китәһе түгел: атайым, мәҫәлән, 57 йәшендә мәрхүм булды, Самат ағайым - теүәл 60 йәштә. Ике ай пенсияһын алып өлгөрҙө, өсөнсөһө килгәндә ул инде был донъя кешеһе түгел ине - мәкерле сир дәрәп алғайны... Ураҙа мәләндә отпуск алып, уны ҡарашырға барҙым. "Эх, бабыбер пенсияны бер 10 йыл булһа ла ашай алмауым эсте бошора... Пенсиям килһә, анау балаларға (ейәндәрен әйтә) тундырма, тәмлекәстәр алып таратыр, яратҡан уйынсыҡтарын алып бирер инем..." - тигәйне ул бер һөйләшкәндә уфтанып. Уға ни тип яуап бирергә лә белмәгәйнем...

Был - беҙҙән 11 кешелек ғаиләнән ике кешенең пенсия ашай алмауы хаҡында. Ә ауылды, үҙебеҙҙән урамдаш барлаһаң... Пенсия йәшенә лә етмәй үлгән Вәлит, Хөснә инәйҙән ике балаһы (Ирек ағай менән Зәкиә апай), Алһыу еңгәй, Гөлдәр еңгәй, Рәүф ағай, Тәлғәт мәрхүм, Мәйсәрә апай, Мөхәмәт еҙнә (Гәүһәр апайҙың ире), Риф ағай, Айҙар ағай, Фаил, Байрас, Иршат ҡустылар, Таһир ағай менән Венера еңгә - былары минең иҫкә төшкән ут күршеләр, беҙҙән бер-ике өй аша йәшәгән кешеләр генә... Камил ағай, Ғәҙел ағай ҙа, Ғилемдар ҡусты ла мәрхүмдәр. Класташтарҙан ғына Азамат, Ғәйсәр юҡтар... Ә тотош ауылды алһаң, ир-ат бармаҡ менән һанарлыҡ. Ауылда иң оло ир-аттар хәҙер Әхәт ҡоҙа, Юлай ағай, Солтан еҙнәләр. 80-гә еткән ир-ат юҡтыр ул әлеге көндә. Етеп үлгәне бар микән? Ауылдың иң оҙаҡ йәшәүсе кешеһе 95 йәше тулып үҙгән һуғыш ветеранының ҡатыны Нәгимә инәй булды ла, 91 йәшендә әсәйем баҡыйлыҡҡа күсте.

Дингә мөрәжәғәт итһәң, Бәйғәмбәребеҙ: "Минең өммәтемдең ғүмер оҙайлығы 60-тан 70-кәсә, һәм бик аҙҙар ошонан артыҡ йәшәр", - тигән. (Байхаҡи, 6759). Бохариҙан хәҙис: "Һеҙ (мосолмандар) был ерҙә шундай ваҡытҡаса торасаҡһығыҙ - энерҙән ҡояш байығанса, шул уҡ ваҡытта йәһүдтәр иртәнән төшкә тиклем, христиандар - төштән эңергәсә". Бынан күренеүенсә, иң ҡыҫҡа йәшәү оҙайлығы - мосолмандарҙыҡы, сөнки эңер мәленән ҡояш байыу арауығы - сағыштырмаса бик ҡыҫҡа ваҡыт.

Тарихтан белеүебеҙсә, элекке халыҡтарға Аллаһ оҙон ғүмер биргән. Мәҫәлән, 29-сы сүрә "Гәнкәбүт"-тә ("Үрмәксе") 14-се аятта әйтелә: "Хаҡтыр, беҙ Нухты үҙ халҡына бәйғәмбәр итеп күндерҙек. Ул үҙ халҡы араһында 950 йыл йәшәне. Уның халҡы барыбер иман килтермәне (боҙоҡлоҡ һәм гонаһҡа батып бөттөләр) һәм уларҙы Туфан һыуы йотто". Ошо аяттан күренеүенсә, Нух бәйғәмбәр дәғүәте, йәғни халыҡты иманға өндәү эшен генә 950 йыл алып барғас, ул ваҡыттағы кешеләр меңәр йыллап йәшәгән, тигәнгә дәлил. Боронғо әкиәттәрҙән дә беләбеҙ ҡарағай буйы оҙонлоғондағы алпамышалар йәшәүен. Хәҙистә лә бығa дәлил бар: "Аллаһ Әҙәм ғәләйһис-сәләмде 60 терһәк оҙонлоғонда итеп яралтты" (Бохари, 1163/3326). Ир кешенең терһәк оҙонлоғонан самалаһаҡ, 35-40 метр оҙонлоғонда булған тәү кешеләр һәм оҙаҡ йәшәгәндәр.

Быларҙы нимәгә яҙам һуң? Беҙ Ҡөрьәндә яҙылған Аллаһ хөкөмдәренә ҡаршы килә алмайбыҙ, Аллаһы Тәғәләнән һәм уның һөйөклө бәйғәмбәренән, күпме генә уҡыһаҡ та, докторлыҡ диссертациялары яҡлаһаҡ та, аҡыллы һәм күберәк белеүсе була алмайбыҙ. Был - хәҡиҡәт.

Баяғы ағайҙың әйткәндәренә, пенсия йәшенең оҙайтылыуына әйләнеп ҡайтһаҡ, шуны ғына әйтке килә: шунда, юғарыла закон сығарғандар, ошоларҙы ла иҫәпкә алһа ине. Йәмғиәттә йәшәп, йәмғиәттән азат булып булмаған кеүек, Аллаһ яралтмыштарының Уның ҡанундарынан тыш йәшәүе мөмкин түгел...

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**
**Бөрйән районы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Инвестицияны үҙегеҙгә һалығыҙ

Бөгөн киләсәккә тип йыйған аҡсағыҙҙың, пенсия иғәнәләренең һеҙҙең өсөн ни тиклем ҙур әһәмиәткә эйә икәнлеге аңлашыла. Таныштарығыҙ пенсияға сыҡҡандан һуң тағы ла яҡынса 15 йыл ғүмер йәшәргә иҫәп тоторға кәңәш бирә. Бының өсөн һеҙ ай һайын шәхси иҫәбегеҙҙә күпмелер сумма һалып барырға тейешһегеҙ. Әгәр йәшерәк саҡта башлаһағыҙ, сумма күләме әҙерәк була, пенсияға сығыу ваҡыты ҡыҫҡарған һайын, иҫәбегеҙгә күсерергә тейешле сумма ла ҙурая. Әммә йәш ваҡытта нисек итеп аҡса арттырырға, сөнки ипотека кредитын, коммуналь хеҙмәттәргә түләргә, кейем-һалым, мебель, көнкүреш техникаһы, аҙыҡ-түлек алырға, машинаны ремонтлап торорға, күңел асырға һәм башҡа сығымдарҙы ҡапларға кәрәк. Был мәсьәләне хәл итеүҙең берҙән-бер юлы - шәхси предприятие асыу һәм уны уңышлы итеп үҫтереү. Әгәр шәхси бизнес башлап уны уңышлы үҫтерә алһағыҙ, һеҙгә пенсия страховкаһы ла кәрәкмәй, сөнки аҡсағыҙҙы үҙ проектығыҙға һалаһығыҙ һәм ул теләһә ниндәй пенсия фондына ҡарағанда күберәк килем килтерә.

Дәлилдәр күрһәтеүенсә, байҙар үҙ ресурстарын һәм үҫешен шәхси проекттарына - берлектәге фондтарға, ғүмерҙәрен страховкалауға йәки пенсия страховкаһына түгел, ә үҙ тормошона һала!

## Аллаһты көлдөргөгөҙ килһә, пландарығыҙ менән бүлешегеҙ

"Планлаштыраһың, планлаштыраһың, ә ғүмер үтә..." Ни өсөн һеҙ аяҡ терәп Аллаһ билдәләгән юлдан ситкә китергә тырышаһығыҙ? Әгәр Илаһ (һеҙҙең ысын Минегеҙ) һеҙҙә план төҙөү өсөн бар итһә, ул сикһеҙ үҙгәреүсән дәүмәлдәр менән эш итеү һәләтен бирер ине, сөнки уларһыҙ бер генә план да уңышлы була алмай.

Беҙ киләсәкте күрә алмағас, уны планлаштырыу өсөн бер минут та әрәм итергә ярамай. Шуны онотмағыҙ: ғүмер һуңында һеҙ яһалған хаталарҙы түгел, ә юғалтҡан ваҡытығыҙҙы уйлап үкенәсәкһегеҙ.

Ральф Уолдо Эмерсон бер ваҡыт: "Тормоштағы уңыш - килеһе сәғәттең уңышлы булыуы", - тип яҙған. Әгәр планлаштырырға теләһәгеҙ, алдағы бер нисә сәғәтте генә планлаштырыу менән сикләнегеҙ, шул саҡта тормошоғоҙ мөғжизәле булыр.

## Оксюморондар

Оксюморон - грек һүҙе, ул ҡушылмағанды бергә ҡушыу (тап килмәгәнде тап килтереү) тигәнде аңлата. Һүҙҙәребеҙ проблема сығанағы ла булыуы ихтимал, сөнки улар беҙҙең хәүефһеҙлеккә ихтыяжыбыҙҙы кәсәйтә генә.

Мәҫәлән, һәр ерҙә ҡулланылған "планмаркетинг" һүҙе маркетинг менән планның шөғөлләнергә ярамай тигәнгә ышанырға мәжбүр итә. "Финанс бойондороҡһоҙлоҡ" аҡса власынан азат булып, уларҙың ҡоло булып ҡалыуҙы һеңдерә. Минеңсә, тормошобоҙҙа финанстарҙың роле ни тиклем мөһимерәк, уларҙан бәйлелегебеҙ шул тиклем ҙурыраҡ.

Ҡапма-ҡаршы аңлатмаларҙы берләштергән һүҙҙәр бар ерҙә лә ҡулланыла. Түбәндәге һүҙҙәрҙе үҙегеҙ аңлап ҡарағыҙ: бизнес-план; балансланған портфель; бәхетле ҡартлыҡ; мөхәббәткә ихтыяж; ғәҙел сәйәсмән...

**Пьер МОРАНСИ.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# УЛЛЫҠҠА АЛҺАҢ...



**Башҡортостанда йыл башынан 59 бала уллыҡҡа алынған, был былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда 9 балаға күберәк. Республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова ошо хаҡта хәбәр итте.**

"Бөтә донъя уллыҡҡа алыу көнө билдәләнә беҙҙә. 2014 йылда бөтә донъя ғаиләгә мохтаж балалар һәм тәрбиәгә алған ата-әсәләр менән теләктәшлек белдергән махсус календарь көнө барлыҡҡа килде", - тип иҫкә төшөрҙө министр. Уның һүҙҙәренсә, бөгөн Башҡортостанда 10 609 етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған бала йәшәй. Шуларҙың 1200-ҙән ашыуы быйыл ғына ғаиләләргә урынлаштырылған, ә 17 бала үҙ ғаиләләренә ҡайтҡан.

"Уллыҡҡа алырға ҡарар иткән ғаиләләр Әсәлек капиталы күләмендә финанс ярҙамына иҫәп тота ала. Беренсе баланы уллыҡҡа алғанда - төбәк бюджетынан 587 мең һумға яҡын, икенсе йәки артабанғы балаларҙы уллыҡҡа алғанда 775 мең һумдан ашыу түләү ҡаралған. Инвалид баланы уллыҡҡа алғанда финанс ярҙамы күләме тағы ла 100 мең һумға арта. Аҡсаны ғаиләнең торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға, дауалауға, шифахана-курорт сәләмәтләндереүенә йәки уллыҡҡа алынған балаға белем биреүгә йүнәлтергә мөмкин", - тине Ленара Иванова.

# ЙӘШТӘР НИСӘҮ?



**2020 йылдың декабрендә "Рәсәй Федерацияһында йәштәр сәйәсәте тураһында" законға төҙәтмәләр индерелде. Уға ярашлы, йәштәргә 14-35 йәшлек граждандар инә, тип билдәләнде. Ошо арала Башстат белгестәре Башҡортостанда йәшәгән йәштәрҙе иҫәпләп сығарҙы.**

2023 йыл башына йәштәр һаны 1084,4 мең кеше тәшкил иткән, был - республика халҡының 26,6 проценты. 20 йәшкә тиклемге йәштәр - 25,8 процент, 20 йәштән 24 йәшкә тиклемгеләр - 18,8 процент, 25 йәштән 29 йәшкә тиклемгеләр 19,3 процент, 30 йәштән 35 йәшкә тиклемгеләр 36,1 процент тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта республикала егеттәр (550 мең кеше) ҡыҙҙарға ҡарағанда 2,9 процентҡа күберәк (534,4 мең кеше).

2022-2023 уҡыу йылында республика университеттарында 99 мең студент белем алған. Колледждарҙа һәм училищеларҙа - 110,6 мең кеше. 85 мең йәш кеше урта звено белгестәрен әҙерләү программалары буйынса, 25,6 мең кеше квалификациялы эшселәр, хеҙмәткәрҙәр әҙерләү программалары буйынса уҡый. Студенттар йыш ҡына иҡтисади һәм юридик профилле, мәғлүмәт технологиялары, электр һәм йылылыҡ энергетикаһы, тау һәм нефть - газ эше, машиналар эшләү һөнәрҙәрен һайлай.

Йәштәр республиканың эшсе көстәренең 34,0 процентын тәшкил итә. 2022 йылғы тикшереү һөҙөмтәләре буйынса 15-19 йәшлектәрҙең мәшғүллек кимәле - 3,6 процент, 20-24 йәштәгеләрҙең - 56,0 процент, 25-29 йәштәгеләрҙең - 84,9 процент, 30-34 йәштәгеләрҙең 87,6 процент.

2022 йылда 14-35 йәшлек 17,8 мең егет һәм 18,6 мең ҡыҙ никахҡа ингән. Уҙған йыл йомғаҡтары буйынса беренсегә өйләнгән ир-егеттәрҙең уртаса йәше - 28,9 йәш, ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы 26,8 йәш тәшкил итте. Төбәктә иң күп никах 20-34 йәштә теркәлгән.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

*✓ Әгәр ҙә кешеләр бер ни менән дә маҡтана алмай икән, улар үҙҙәренең бәхетһеҙлеге менән маҡтана башлай.*

*(Артур Граф).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 1 ДЕКАБРЬ - БӨТӘ РӘСӘЙ ХОККЕЙ КӨНӨ

**Был байрам Рәсәй хоккей федерацияһы президенты Владислав Третьяк тәкдиме менән беренсе тапҡыр 2007 йылда билдәләнә. Ул саҡта илдең 150-нән ашыу стадионы ошо уйынды яратыусыларҙы асыҡ йөҙ менән ҡаршы ала.**

Рәсәй - "Ҡыҙыл машина" тип йөрөтөлгән һәм донъя чемпионаттарында, Олимпия уйындарында еңеүҙәр яулаған данлыҡлы йыйылма командалы Советтар Союзы хоккейының юлын дауам итеүсе. СССР-ҙың хоккей буйынса йыйылма командаһы 8 тапҡыр (1956, 1964, 1968, 1972, 1976, 1984, 1988, 1992 йылдарҙа) Олимпия чемпиондары, 27 тапҡыр донъя чемпиондары була. 1956 йылда тәүге тапҡыр Олимпия уйындарында ҡатнашҡан хоккей командаһы алтын миҙал яулап, дан ҡаҙана. Ҡыҙғанысҡа күрә, үткән быуаттың 90-сы йылдарында илебеҙ яҙмышындағы һынылышлы ваҡиғалар спорт өлкәһенә лә ҙур йоғонто яһай. Шулай ҙа 1993 йылдан бирле алтын миҙалға өлгәшә алмаған осорҙо артта ҡалдырып, Донъя чемпиондары исемен киренән яулай спортсыларыбыҙ: 2008, 2009, 2012, 2014 йылдарҙа. Ә инде 2018 йылғы Олимпия уйындарында Рәсәйҙән олимпия спортсылары атамаһы аҫтында сығыш яһаусы йыйылма командабыҙ 26 йылдан һуң тәүге тапҡыр алтын миҙалдар яулай.

Бөтә Рәсәй хоккей көнө был спорт төрөн халыҡ араһында тағы ла киңерәк танытыу, таратыу маҡсатында ойошторола. Әйткәндәй, теүәл 3 аҙнанан, 22 декабрҙә, Ватан хоккейының тыуған көнө билдәләнә. 1946 йылда Советтар Союзында нәҡ ошо көндә беренсе тапҡыр Канада хоккейы (шайба менән уйнауҙы элек шулай атап йөрөткәндәр) буйынса рәсми уйындар уҙғарыла. Иң тәүге милли чемпионат уйындары 8 ҡалала уҙғарылып, хәл иткес һуңғы уйын Мәскәүҙә үтә.

Бөгөн хоккей уйынын барыһы ла тимәһәң дә, күпселек ярата. Башҡортостанда барыһына ла билдәле "Салауат Юлаев" хоккей клубы үҙ эшен 62 йыл элек башлай. Ә бына ҡатын-ҡыҙҙарҙың "Ағиҙел" хоккей клубы 2010 йылда барлыҡҡа килә. Бөтә Рәсәй хоккей көнөндә "Салауат Юлаев" командаһы көйәрмәндәрен һөйөндөрәйек тип, башватҡысты уның уйынсыларына бағышланыҡ.




*Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.*

**45-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ата. Мөнәжәт. Тубырсыҡ. Ҡоймаҡ. Тәғәм. Шарт. Люстра. Таро. Илбаҫар. Тары. Пани. Әләм. Лапы. Вова. Әсә. Үгеҙ. Наза. Каста. Бала. Скат.

**Вертикаль буйынса:** Таһирова. Туғыҙбаева. Мәрсиә. Мышы. Гәрәбә. Рәшә. Теннис. Мәҙәк. Туп. Ағас. Ҡитға. Әтәс. Әрәмә. Тула. Ҡотлогилдина. Тәпән. Март. Ҡарамышева.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 ноябрь Премьера! "Чехов һабаҡтары",** А.П. Чехов хикәйәләре буйынса. 12+

**29 ноябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури), драма. 16+

**30 ноябрь Премьера! "Килен"** (З. Мусина), драма. 16+

**1 декабрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, А. Ишбулдина инсц.), драма. 12+

**2 декабрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

**3 декабрь "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**28 ноябрь "Ал яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айытматов), драма. 16+

**30 ноябрь "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 16+

**1 декабрь Премьера! "Дейеүкәй"** (С. Лебо), триллер. 12+

**2 декабрь Премьера! "Дейеүкәй"** (С. Лебо), триллер. 18.00 12+

**3 декабрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 12.00 0+

**"Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев), комедия. 18.00 12+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**2 декабрь "Музыку слушаем вместе",** этноәкиәттәр. 11.00 0+

**"Музыкальный интерактив",** этно иленә сәйәхәт. 13.00 0+

**3 декабрь "Бөтә Ғаилә өсөн йәкшәмбе концерты".** 15.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**30 ноябрь "Ғүмерҙең бер мәле"** (Н. Мусин), фантастик төш. 16+

**1 декабрь "Ынйыҡай менән Юлдыҡай"** (Х. Ғәбитов), шиғри драма. 12+

**2 декабрь "Глумов"** (А. Островский), пьеса. 11.00 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**30 ноябрь Премьера! "Гөлнара"** (Ф. Бүләков), драма. 12+

**2 декабрь "Минең йөрәк һиндә тибә"** (Р. Ҡуйбағаров), драмаһы рус телендә. 18.00 12+

**3 декабрь** "Маленькая история о Маленьком Муке" (С. Астраханцев), әкиәт. 12.00 0+

**"Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 18.00 12+

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ноябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Миәкә районы** Тамъян-Тамаҫ ауылынан Сәимә Исламғолова, **Әлшәй районы** яңы Сәпәш ауылынан Н. Г. Фәйзуллина, Раевка ауылынан Тәнзилә Зарипова, **Белорет районы** Манышты ауылынан Сажиҙә Йомағужина, **Мәләүез районы** Этксөк ауылынан Миңзәлә Сангишева, **Өфө районы** Шамонино ауылынан Динә Ханова, Сания Исламетдинова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Күркәм ғүмер байрамығыҙ менән барығыҙҙы тәбрик итәбеҙ һәм ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, бәхет, барлыҡ эштәрегеҙҙә уңыштар юлдаш булыуын, яҡындарығыҙ менән күңел йылығыҙҙы бүлешеп, изгелектәр күреп йәшәүегеҙҙе теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ШУНДАЙ ХӘБӘРҘӘР

# БЕҘҘЕҢ ҺЫЛЫУҠАЙҘАР!



**Ике аҙна элек Мәскәүҙә "Берҙәмлек һылыуҡайы", "Европа һылыуҡайы", "Азия һылыуҡайы" һәм "Кескәй Донъя һылыуҡайы" конкурстары уҙҙы. Унда республикабыҙҙан алты һылыуҡай ҡатнашты һәм Өфөгә төрлө конкурстарҙан алты таж менән ҡайтты.**

"Берҙәмлек һылыуҡайы" - Йәсмин Зәйетова (Гран-при) һәм Ангелина Баркутова (1-се урын); "Берҙәмлек һылыуҡайы" (балалар араһында ) - Самира Вәхитова (1-се урын); "Мисс Азия" - Камилла Әбсәләмова (1-се урын); "Кескәй Донъя һылыуҡайы" - 4 йәшлек Кира Әбсәләмова; "Мисс Европа" - Зарина Йәнбирҙина (Гран-при). Өфөнән ике ҡыҙ "Мисс донъя" халыҡ-ара конкурсына кастинг үтте һәм 111 ҡатнашыусынан егерме ҡыҙ иҫәбенә Зарина Йәнбирҙина һайлап алынды. Ҡыҙҙарға дизайнерҙар тажы, бүләктәр һәм 2024 йылда халыҡ-ара матурлыҡ конкурстарында ҡатнашыу өсөн сертификаттар тапшырылды.

# ИЛҮҘӘ УҘҘЫРҘЫ!



**Ә бына Һиндостанда үткән "Мисс Азия-2023" гүзәллек конкурсында башҡорт һылыуҡайы, 22 йәшлек Илүзә Иҫәндәүләтова Башҡортостанды лайыҡлы күрһәтеп, Гран-при яуланы.**

Илүзә Сибайҙа тыуған. Былтыр Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлаған. "Мисс Башҡортостан-2023" һәм "Мисс Азия-Себер 1-се вице-мисс" конкурстары еңеүсеһе. Ә был конкурста урындар түбәндәгесә билдәләнде: Гран-при - Башҡортостан, 1-се вице-мисс Азия - Непал, 2-се вице-мисс Азия - Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, 3-сө вице-мисс Азия - Таиланд.

"Беҙ бөтә Азияны шаулатабыҙ. Башҡортостандың ниндәй республика икәнен белмәйҙәр ҙә. Донъяла республикабыҙҙы танытыуға үҙ өлөшөбөҙҙө индерәбеҙ", - тип билдәләнеләр һылыуҡайҙы әҙерләгән модель агентлығында. Ысынлап та, был конкурс бик абруйлыларҙан һанала. Унда Ҡытай, Корея, Япония, Вьетнам, Ҡаҙағстан, Рәсәй, Төркиә, Шри-Ланка, Индонезия һәм башҡа илдәрҙән ҡыҙҙар ҡатнашҡан. Улар өсөн бик күп оҫталыҡ дәрестәре, репетициялар, экскурсиялар ойошторолған.

# АТҠА АРНАЛА...

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә Стәрлетамаҡ театр-концерт берләшмәһенең Илшат Йомаголов исемендәге Башҡорт драма театры коллективы баш ҡала тамашасыһына уҙған миҙгелдең яңы постановкаһын - "Ҡорос. Яугир ат яҙмышы" спектакленең премьераһын тәҡдим итте.**

Спектаклдең төп геройы - Миәкә районының Илсеғол ауылынан Ҡорос (Керчь) ҡушаматлы яугир ат. Керчь ролен йәш актер Фәнил Ҡарасурин башҡара. Керчь 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының Бөйөк Ватан һуғышынан тыуған яғына ҡайта алған берҙән-бер аты була. Дүрт йыл эсендә Керчь Уралдан Берлинғаса хәрби юл үтеп, ике тапҡыр яралана. Башҡорт кавалерия дивизияһы ветерандарының хәтирәләре буйынса, Керчь башҡа аттарҙан ныҡ һәм сыҙамлы булыуы менән айырылып тора, айғыр холҡо менән дә үҙен күрһәтә - ул бары бер хужаға ғына буйһона. 1947 йылда Керчтың героик хәрби юлы тураһында белеп ҡалған маршал Семен Буденный айғырҙы һоло менән тәьмин итеп, тыуған Илсеғол ауылына ҡайтарырға ҡуша. Һуғыштан һуң Керчь күп йылдар колхозда тир түгә. Легендар ат 23 йыл йәшәй.

- Пьесамдың спектакле өҫтөндә ҡуйыусы режиссер Айҙар Зарипов менән бергә эшләнек, - ти драматург, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты Мөнир Ҡунафин. - Яңыраҡ был пьеса Фәнис Хөсәйенов тураһында очерк менән "Бер ғүмер етмәй икән" тигән яңы китабымда баҫылып сыҡты.

Илсеғол ауылында данлыҡлы яугир атты онотмайҙар. Ауыл халҡы йыл һайын Еңеү көнөндә Илсеғол ауыл советы бинаһында легендар ат хөрмәтенә ҡуйылған мемориаль таҡтаташҡа сәскә килтерә.

# ҠАҘАҠ БӘЙГЕҺЕНДӘ...

**Уҙған ял көндәрендә Ҡаҙағстандың Төркөстан ҡалаһында "Voice of Turan-2023" халыҡ-ара ҡаҙаҡ йыры фестивале үтте.**

Быйыл дүртенсе тапҡыр ойошторолған йыр конкурсында донъяның 14 иленән (Төркиә, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Рәсәй - Башҡортостан һәм Татарстан, Әзербайжан, Польша, Белоруссия, Молдова, Грузия, Бүрәтстан, Болгария, Португалия, Испания, Аргентина) 18-35 йәшлек эстрада жанры башҡарыусылары ҡатнашты. Улар - тәжрибәле, халыҡ-ара йыр конкурстарында уңышҡа өлгәшкән артистар. Башҡортостан данын унда республикабыҙҙың атҡаҙанған артисы, музыкант-мультиинструменталист, шоумен, ZAINETDIN этно-шоу проекты солисы Заһир Зәйнетдинов яҡланы.

- Конкурс шарттары буйынса беренсе көндә ҡатнашыусылар ҡаҙаҡ сәнғәте оҫталары менән ҡаҙаҡ телендә дуэт йырланы. Икенсе көндә улар үҙҙәренә оҡшаған ҡаҙаҡ йыры менән яңғыҙ сығыш яһаны. ZAINETDIN Шымкент аккордеонсыһы Мәхмүт Урумбаев менән йыр башҡарҙы, - тип һөйләне ойоштороусылар. Конкурста яҡташыбыҙҙың сығышы "Иң үҙенсәлекле сығыш" тип билдәләнде һәм уға диплом, аҡсалата бүләк тапшырылды.

*ТЕЛҺӨЙӘР*

# ҠАРЫУЛЫ БУЛ!

**Сит телдәрҙән үҙләштергән һүҙҙәр һәр телдә бар, унан бер тел дә ҡотола алмай. Әммә үҙ телебеҙҙә бик матур һүҙҙәр була тороп, улар белдергән мәғәнәне ят телдәрҙән отҡан һүҙҙәр менән алыштырыу килешмәгән эш. Миҫал өсөн "караташ" һүҙен алайыҡ.**

**Ҡараташ.** Ҡараташ ул - ҡәләм, электр кәрәк-ярағы яһау өсөн ҡулланылған ҡара йәки ҡара-һоро төҫтәге минерал. Русса графит була. Ҡәләмдең ҡараташ үҙәген оҫлау. Ҡараташ онтағы.

**Ҡарғаморон.** Тимерҙе ҡыҫып тотоуға йәтешләп, осо ялпаҡ, эс яҡтан һырлы итеп эшләнгән ҡыҫҡыс рәүешендәге ҡорал. Уңайлы ҡарғаморон. Ҡарғаморон менән эшләү.

**Ҡарғы.** Ҡарғы тип эттең муйынына таға торған ҡайышты атайҙар. Ҡарғыны сылбырға эләктереү. Ҡарғы тар булмаһын.

**Ҡарғыу.** Ҡапыл үргә һикереү, һикереп алға ынтылыуҙы, берәй нәмәнән аша һикереүҙе ҡарғыу тиҙәр. Ҡарышҡан мал ҡарғыуы бар. Ат соҡорҙо ҡарғып сыҡты.

**Ҡарьяу.** "Карт булыу, картайыу" мәғәнәһендәге һүҙ. Бошмаҫ әҙәм ҡарьямаҫ. Ҡарьяуың етһә лә, һау-имен бул.

**Ҡарыу.** "Көс, ҡеүәт ғәйрәт" тигән һүҙҙәр урынына ҡулланылған һүҙ. Йоҡо туйһа, ял булһа, ҡарыу ҙа юғалмай. Тәбиғәттән айырылмаған кеше ҡарыулы була.

**Фәймә МӘЖИТОВА әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# МАЛ ҠАЗАҺЫ...

## баш ҡазаһы түгел

Сүлдә йөрөгән ҡуңыр ҡаҙ күл ҡәҙерен белмәҫ; күлдә йөрөгән ҡара өйрәк сүл ҡәҙерен белмәҫ; тауҙа йәйләп, ташта үҫкән ил ҡәҙерен белмәҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәлә).**

Кәңәш биргәндәрҙең һәр һүҙен ҡабул ит; үҙ кәңәшеңде һорамағанға биреүҙән тыйыл.

**(Уильям Шекспир).**

Әйҙәгеҙ, шундай итеп йәшәйек: ҡәбергә күмгәндә хатта һине белмәгән кеше лә иларлыҡ булһын.

**(Марк Твен).**

Әгәр ҙә кешеләр бер ни менән дә маҡтана алмай икән, улар үҙҙәренең бәхетһеҙлеге менән маҡтана башлай.

**(Артур Граф).**

Йәшәү - тимәк, минут һайын яңынан тыуыу.

**(Эрих Фромм).**

Эшләгәндә мин ял итәм. Эшһеҙ йөрөгәндә йәки ҡунаҡтар ҡабул иткәндә мин ныҡ арыйым.

**(Пабло Пикассо).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Матур, сыуаҡ бер көндә, кешеләр күрергә, үҙен күрһәтергә, тип, фырт, дорфа, тәкәббер бер әфәнде урам ҡыҙырырға сығып китә. Быңа тәүге урам сатында уҡ танышын осратып, шатланып китә был.**

**- Һине танырлыҡ та түгел! - тип һүҙ башлай һәм ҡыҙыҡһыныуын ҡандырыр өсөн төрлө ахмаҡ һорауҙар яуҙырырға тотона: - Ниңә улай күҙҙәрең һүнгән? Берәй бәләгә тарыныңмы әллә?**

**- Ҡыҙғаныска ҡаршы, минең хәлем шулай тиҙ үҙгәрә, әгәр... - тип, башлаған һүҙен дауам итә алмай танышы, фырт әфәнде уны бүлдерә һала:**

**- Һин нисек был турала шулай тыныс ҡына һөйләй алаһың? Кисекмәҫтән беҙҙең танылған табипҡа мөрәжәғәт ит. Теләһә ниндәй сирҙе лә үҙ ваҡытында дауаларға кәрәк икәнен белмәйһеңме ни?..**

**Фырт әфәнде шулай төрлө сирҙәр, сиргә юлыҡҡан таныштары тураһында сурыты хәбәр һөйләй, танышына ауыҙ асырға ла бирмәй. Шунан:**

**- Әйт әле, дуҫҡайым, һинең кәйефеңдең үҙгәреше күптән киләме? - тип һорай.**

**- Ҡыҙғаныска ҡаршы, һинең үҙ-үҙеңдән ҡәнәғәт физиономияңды күргәндә генә минең кәйефем шулай тиҙ үҙгәрә, ауырыуға һабышам һәм бөтөн яҡты донъя ҡараңғыға әйләнә... - тип яуап бирә танышы һәм әйләнеп китеп бара".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 23046

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
24 ноябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3177
Заказ - 1640